ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

21-27 март (буранай) 2025

№11 (1155)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Йәштәребеҙҙә...**

хаҡиҡәти ҡараш та булһын!



2

**Телефонға килгән кодтарҙы...**

бер кемгә лә әйтмәгеҙ



6

**Өфө - Әбделнасир араһы**

Йүгереп кенә бараһы...



8-10

**Мин донъяға...**

балалар күҙе менән ҡарайым



11

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

*Арзанға яҙылып ҡалығыҙ! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, 2 апрелдән 13-нә тиклемге ун көнлөктә республиканың һәр ҡалаһында-ауылында ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2025 йылдың икенсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 872 һум 46 тингә яҙыла алаһығыҙ. Ошо ун көнлөктә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ икәнен дә онотмағыҙ. Әйҙәгеҙ!*

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ХАТАЛЫ АЛТАҠТАЛАРҘЫ...

## бергәләп төҙәтәйек!

**Республика менән идара итеү үҙәге белгестәре "Хатаһыҙ ҡала. Башҡортостан" чат-ботын эшләгәйне. Башланғыс Хөкүмәт ҡушыуы буйынса тормошҡа ашырылды. Уның ярҙамында республикала йәшәүсе һәр кем алтаҡталарҙа, юл күрһәткестәрендә, урамдарҙың һәм туҡталыштарҙың атамаларында ебәрелгән хаталар тураһында хәбәр итә ала. Мөрәжәғәттәр шунда уҡ "Инцидент-менеджмент" системаһы аша эшкәртелә, тиҙ арала хаталар төҙәтелә.**

Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев әйтеүенсә, "Республикабыҙҙа "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы Закон эшләп килә һәм, уға ярашлы, беҙҙә ике дәүләт теле ғәмәлдә: рус һәм башҡорт телдәре. Шуға күрә беҙҙә бөтә алтаҡталар ике телдә яҙылырға тейеш. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, башҡорт теленең әҙәби тел нормаларын барыһы ла белмәй, шунлыҡтан был алтаҡталарҙа хаталар китә лә инде..."

**(Дауамы 3-сө биттә).**

*КӨН ХӘСТӘРЕ*

# ӘЙҘӘГЕҘ, ТАҘАРТАЙЫҠ!



**Башҡортостан Башлығы Өфө ҡала хакимиәтенә һәм Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығына кисекмәҫтән ҡаланы таҙартыу эштәренә тотонорға ҡушты.**

"Беҙҙә яҙ бер айға иртәрәк килә, ошо мәлгә яраҡлашырға кәрәк. Элек таҙартыу һәм төҙөкләндереү эштәрен 1 майға тамамлау маҡсаты ҡуя инек, хәҙер 1 апрелгә ҡаланы тәртипкә килтереү мотлаҡ. Тиҙ арала тотоноғоҙ эшкә, өмәләр ойоштороғоҙ, кешеләрҙе һәм техниканы урамдарға сығарығыҙ. Хәҙер оло күләүектәр барлыҡҡа килә, һыу баҫыуҙар башланды - һәр осраҡ контролдә булһын. Өфө - республиканың баш ҡалаһы, абруйҙы юғары тоторға кәрәк", - тине Радий Фәрит улы.

Өфө хакимиәте хәбәр итеүенсә, үткән аҙнала уҡ баш ҡалала шәмбе өмәләренә старт бирелде һәм унда 23 меңләп кеше ҡатнашты. 7 апрелдән 1 июнгә тиклем санитар таҙартыу, төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү айлығы ойоштороласаҡ. Был осорҙа ҡалала урамдарҙы, квартал эсендәге биләмәләрҙе, гараж кооперативтары, баҡсасылыҡ ширҡәттәре биләмәләрен таҙартыу эше башҡарыла. Шулай уҡ юлдар, тротуарҙар, ҡоймалар ремонтлана, йылға-күл һәм шишмә буйҙары таҙартыла. Бынан тыш, ағастар ултыртыла. Предприятиелар һәм ойошмалар етәкселәренә эргә-тирәләге биләмәләрҙә тәртип урынлаштырыу, фасадтарҙы, ҡоймаларҙы буяу бурысы йөкмәтелде.

*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

# КИЛӘСӘККӘ ЭШЛӘҮСЕ ОҪТАЛАР



**Баш ҡаланың "Торатау" Конгресс-холында 35-се тапҡыр "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" республика конкурсының йомғаҡлау тантанаһы булып үтте.**

Бындай һөнәри бәйгеләр Башҡортостандың белем биреү системаһының айырып алғыһыҙ бер мөһим баҫҡысын тәшкил итә, сөнки һәр йылды ул үҙенең ниндәй ҙә булһа яңы йөкмәткеһе менән байыта килә. Конкурстың талаптары ҡаты, унда шәптәрҙең дә иң шәбе үҙ оҫталығын күрһәтә, тимәк, һәр сығыш - үҙе бер асыш, тип ышаныс менән раҫлай алабыҙ. Баһалама ағзаларына ошондай ҡатнашыусылар араһынан иң-иң маһирҙарын һайлап алыуы шулай уҡ еңел булмағандыр. Уларҙың "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" конкурсының абсолют еңеүсеһе итеп таныуына өлгәшеү өсөн Стәрлетамаҡтың 5-се гимназияһы физика уҡытыусыһы Ренар Хәйбуллинға ла күп көс һалырға тура килгәндер. Уның әле быйыл "Рәсәйҙең йыл уҡытыусыһы" Бөтә Рәсәй конкурсында ла был титулды раҫлайһы бар. Шуны ла өҫтәргә кәрәк, әлеге мәртәбәле сарала "СОТЫ" педагогтар марафоны еңеүселәре лә бик матур сығыштары менән ҡыуандырҙы.

**(Дауамы 5-се биттә).**

12+

✓ Йәштәребеҙҙе мәҙәниәткә, сәнғәткә, физкультура һәм спортҡа ылыҡтырыу, ватансыллыҡ рухында тәрбиәләү, ғөмүмән, уларҙың киләсәгенә ыңғай йүнәлеш бирә алыу буйынса программаларҙы координациялау талап ителә.



БИК ХУП!

# МИЛЛИ МИРАҪТЫ ҺАҠЛАУ КӘРӘК

**БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтайҙа күпселек тауыш менән "Башҡортостан Республикаһы Милли мираҫтың дәүләт реестры тураһында"ғы закон проектын беренсе уҡыуҙа хупланылар. Закон проектын депутаттар ҡарауына төбәк хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Урал Килсенбаев тәҡдим итте.**

"Атай-олатайҙарҙың хәтерен, быуындар күсәгилешлеген һәм теләктәшлеген һаҡлау, республикаһын рухи-әхлаҡи, фәнни-мәғариф һәм тарихи-мәҙәни, тәбиғи, рекреацион потенциалын һаҡлау һәм үҫтереү маҡсатында БР Конституцияһының 61-се статьяһында күрһәтелгән объекттарҙы һәм башҡа уникаль рухи, мәҙәни, тарихи һәм тәбиғи мираҫ объекттарын үҙ эсенә алған Башҡортостандың милли мираҫының дәүләт реестры әҙерләнгән", - тип хәбәр итте Урал Килсенбаев Дәүләт Йыйылышының пленар ултырышында.

Унын һүҙҙәренсә, реестр 36 уникаль объектты үҙ эсенә ала. Закон проекты реестрҙы тулыландырыу механизмын күҙ уңында тота. "Был - Рәсәйҙең башҡа субъекттарының төбәк ҡануниәтендә аналогы булмаған уникаль документ", - тип билдәләне Башҡортостан парламенты спикеры Константин Толкачев.

Уникаль тәбиғәт ҡомартҡылары, рухи, мәҙәни, тарихи мираҫ объекттары - республиканың үҙенсәлеген һәм колоритын билдәләгән нәмәләр Башҡортостандың милли мираҫ дәүләт реестрына инәсәк. "Улар араһында матди булмаған этномәҙәни байлыҡ объекттары ла бар: башҡорт теле, башҡорт халыҡ музыкаль, музыкаль-шиғри ижады, традицион йола байрамдары, шул иҫәптән башҡорт туйы йолаһы һәм яҙҙы ҡаршылау байрамы. Реестрға шулай уҡ билдәле башҡорт балы, ҡурай һәм ҡымыҙ инә. Проектҡа бөтәһе 36 милли мираҫ объекты индерелгән. Улар иҫәбендә комплекслы объекттар бар, мәҫәлән, ныҡытылған тораҡ пункттар системаһы - бронза дәүеренең археология ҡомартҡылары", - тип өҫтәне төбәк ҡоролтайы рәйесе.

Дәүләт Йыйылышында билдәләүҙәренсә, бөгөн беренсе уҡыуҙа хупланған закон проекты административ акт ҡына түгел. Был - үткәнебеҙгә хөрмәт һәм киләсәккә инвестиция. "Мәҙәни кодыбыҙҙы тәшкил иткән объекттарҙың айырым статусы милли үҙенсәлекте ныҡытыуға хеҙмәт итәсәк. Реестр Башҡортостандың үҙенсәлеген һәм мәҙәни байлығын һаҡлау эшендә дәүләт, ғилми берләшмә һәм киң йәмәғәтселек көстәрен берләштереү буйынса мөһим инструментка әйләнер, тип ышанам", - тип һығымта яһаны Константин Толкачев.

"Башҡортостан Республикаһы Милли мираҫтың дәүләт реестры тураһында"ғы закон проекты Мәҙәниәт министрлығы, Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы буйынса идаралыҡ һәм Экология министрлығы менән берлектә республика Хөкүмәте тарафынан әҙерләнгән.

Галина БАХШИЕВА.

ХУП!

**Башҡортостан Хөкүмәте кәңәшмәһендә БР Башлығы Радий Хәбиров әлегә тиклем йәштәр сәйәсәте буйынса эшләп килгән Дәүләт комитетының министерлыҡ булып үҙгәртеләсәге хаҡында белдерҙе. "Йәштәр менән эшләү - беҙҙең өсөн төп мәсьәлә, - тине ул. - Беҙ ҡасан да булһа үҙебеҙ билгән вазифаларҙан китәсәкбеҙ, беҙҙән аҙаҡ килеүсе йәштәрҙең аңлы, айыҡ аҡыллы булыуы, томоштарында дәүләткә, шәхескә ҡарата үҙҙәрен дөрөҫ позицияла тотоуы мөһим".**

# ЙӘШТӘРЕБЕҘҘӘ...

## хаҡиҡәти ҡараш та булһын!



Республикабыҙҙа йәштәр сәйәсәте буйынса министрлыҡ булдырыу ошо өлкәгә стратегик өҫтөнлөк биреүҙе аңлата. Хәҙерге заманда йәштәр менән бәйле ҡатмарлы проблемалар етерлек, ә был идара итеүселәрҙән системалы эш алып барыуҙы талап итә. Уларға дөйөм һәм һөнәри белем биреү, йәштәребеҙҙе мәҙәниәткә, сәнғәткә, физкультура һәм спортҡа ылыҡтырыу, ватансыллыҡ рухында тәрбиәләү, ғөмүмән, уларҙың киләсәгенә ыңғай йүнәлеш бирә алыу буйынса төрлө дәүләт ведомстволарының, учреждениеларҙың ошо йүнәлештәге программаларын координациялау талап ителә. Шул уҡ ваҡытта йәштәр сәйәсәтен ғәмәлгә ашырыу буйынса ресурстар базаһын да киңәйтеү фарыз.

*Башҡортостан юлдаш телевидениеһына биргән интервьюһында Өфө дәүләт нефть техник университеты профессоры, техник фәндәр докторы, БР Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты Эльдар Теләшев бына нимә тине: "Хәҙерге заманда йәштәргә белем һәм тәрбиә биреү генә етмәй, уларҙа донъяға хаҡиҡәти ҡараш тәрбиәләй алыу мөһим. Йәштәрҙе Ватаныбыҙҙы һөйөргә өйрәтеү бик кәрәк. Шуға күрә ошо өлкә менән идара итеү статусын министрлыҡ кимәленә күтәреүҙе хуплайым".*

Әйткәндәй, Өфө нефть институтында белем алған Эльдар Теләшев студенттарҙың төҙөлөш отряды боецы, һуңынан комиссары һәм командиры була, интернациональ лагерь командиры вазифаһын башҡара. Ул комсомол эшен үҙ итә, туризм һәм спорт менән әүҙем шөғөлләнә.

Хәҙер әле бәйән ителгән мәғлүмәтте яңылыҡ, тип ҡабул итеп булалыр. Шул уҡ ваҡытта киң билдәле бер әйтемде лә иҫкә төшөрөп китәйек: "Һәр бер яңы эш - онотола биргән элекке ғәмәл". Ни өсөн шулай тип әйтергә була? Уртаҡ тарихыбыҙҙың совет осоронда дәүләт органдары йәштәр менән тейешле эш алып барыуҙы һәр саҡта ла алғы планға ҡуйҙы. Урта мәктәптәрҙә, белем биреүҙән башҡа, тәрбиә мәсьәләләре лә иң мөһим бурыстарҙан һаналды. Йәш үҫмерҙәргә башланғыс һәм урта һөнәри белем биреү системаһының ҡаҙаныштарын һанап бөткөһөҙ. Хеҙмәткә һөйөү һәм ватансыллыҡ тәрбиәләү барыһынан да өҫтөн ҡуйыла килде. Бына, мәҫәлән, ул замандарҙағы вуз системаһында Бөтөн Союз кимәлендә ойошторолған студент отрядтары эшмәкәрлеге дәүләт етәкселегенең оло баһаһына лайыҡ булды. Хатта БАМ төҙөлөшөнә ебәреләсәк берләштерелгән студенттар отряды боецтарын партия һәм комсомол органдары етәкселәре Мәскәү Кремле территорияһында ойошторолған тантаналы митингта тәбрикләй торғайны.

Тарих биттәрендә генә тороп ҡалған комсомол ойошмаһы үҙ заманы йәштәрен ойоштороу һәм тәрбиәләү йәһәтенән әлеге ваҡытта ла маҡтауға лайыҡ. Кем комсомол ағзаһы, кем комсомол ойошмаһы комитеты секретары булған - быны яҡшы аңлай. Тарих һабаҡтарын иҫәпкә алып, йәштәр араһында эш алып барыуҙың онотола биргән формаларын һәм алымдарын ҡайтанан бойомға ашыра алһаҡ, илебеҙҙең үҫешен тәьмин итерлек яңы быуындарҙан уңырбыҙ, тигән ышаныста ҡалайыҡ.

Бәҙри ӘХМӘТОВ.

ШАҢДАУ

# ЭТ ҠӘҘЕРЛЕМЕ, КЕШЕ ҒҮМЕРЕМЕ?



**Ай Аллаҡайым, был Дәүләт Думаһының да эше күп, әйтәгүр! Әле бына ошо көндәрҙә генә Рәсәйҙәге берәҙәк эттәрҙе һанап сыҡҡандар икән һәм шундай асышҡа юлыҡҡандар: берәҙәк эттәр беҙҙә законһыҙ килеп йәшәп ятыусы мигранттарға ҡарағанда ла күберәк, имеш. Һәр сағыштырыу "сатанлай", тигәндәре шулдыр инде.**

Әйәһеҙ эттәр илдә 750 мең булһа, Рәсәй Эске эштәр министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, законһыҙ мигранттар - 650 мең. Дөрөҫөн әйткәндә, ике аяҡлы "берәҙәктәр" байтаҡҡа күберәктер ҙә әле, ләкин полиция статистикаһына ышанырға тура килә инде. Әйткәндәй, был ике "лагерь" ҙа ил халҡының йәшәйешенә хәүеф тыуҙырыусы факторҙар. Легаль булмаған юлдар менән Урта Азиянан Рәсәйгә килеп тулған мигранттар милли хәүефһеҙлеккә янаусылар тип танылды ла ул танылыуын, ә бына нисәмә баланың башына етеп, өлкәндәрҙе лә хатта талап, кимереп үлтереүсе ҡойроҡло берәҙәктәр зоонһөйөүсе бәғзе бер тиҫкәреләр арҡаһында һаман бер ни булмағандай иректә йөрөп яталар. Улай ғына ла түгел, ҡырағайланған был әйәһеҙ эттәр кешеләргә ташланып, улар ғүмеренә үлемесле хәүеф тыуҙырыуҙы дауам итәләр. Хәҙер инде улар тарафынан ҡайҙа, кем талап үлтерелгән - иҫәбе-һанына сығырлыҡ түгел һәм, ғөмүмән, эт темаһынан тамам ғарыҡ булынды. Ил төбәктәрендә бындай фажиғәләр көндә тейерлек ҡабатланып тора.

Үҙҙәре таланмаһа ла, был турала, ниһайәт, парламентарийҙарға ла хәүефле сигналдар, халыҡ мөрәжәғәттәре һәм талаптары килеп еткән, ахырыны, һәм улар үтә кешелекле булып ҡыланған һәм ана шул агрессив хайуандарҙы яҡлап сығыш яһаған

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рәсәй Федерацияһы Ҡоралды көстәренең Юғары баш командующийы Владимир Путин Башҡортостандан 3-сө мотоуҡсылар дивизияһының 1220-се мотоуҡсылар полкы хәрбиҙәренең Курск өлкәһен азат итеүгә индергән хәрби өлөшөн юғары баһаланы. Был хаҡта Дәүләт башлығы Курск төркөмө менән идара итеү пункттарының береһендә үткән кәңәшмәлә белдерҙе. Был подразделениеда Башҡортостандан мобилизацияланғандар хеҙмәт итә.

✓Радий Хәбиров республика Хөкүмәте ултырышында Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға юғары дәүләт наградалары тапшырҙы. Президент Владимир Путин указы менән "Башҡортостан" мотоуҡсылар полкының механик-водителе Фрол Ефимов Изге Георгий ордены һәм IV Георгий тәреһе менән бүләкләнде. Башҡортостан Башлығы указдары менән Үҙәк хәрби округының разведчиктар взводы командиры, өлкән лейтенант Радик Хәснуллин - Шайморатов орденына, шулай уҡ хәрби-сәйәси эш буйынса идаралыҡтың рота командиры, кесе лейтенант Вадим Шәйҙуллин генерал Шайморатов миҙалына лайыҡ булды.

✓Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле Рәсәй оборона министрлығы сараларында сығыш яһай. Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова республика Хөкүмәтенең оперативе кәңәшмәһендә ошо хаҡта белдерҙе. "Ансамблдең Мәскәүҙең Кремль һарайындағы сығышы уңышлы булды. Алты мең урынға иҫәпләнгән тамашасылар залы туп-тулы ине. Беренсе бүлектә тамашасылар башҡорт хореографияһы ынйылары менән танышты, ә икенсеһендә донъя халыҡтары бейеүҙәре күрһәтелде. Патриотик блокты оборона министрлығындағы коллегалар юғары баһаланы. Ансамбль Рәсәйҙең оборона министрлығы сараларына йәлеп ителә", - тип билдәләне Әминә Шафиҡова.

✓Баймаҡтың Урал аръяғы агросәнәғәт колледжы хәҙер Зәкәриә Аҡназаров исемен йөрөтә. Хөкүмәттең ошо туралағы ҡарары 12 мартта Башҡортостандың хоҡуҡи мәғлүмәт сайтында баҫылған. Шулай уҡ документта колледж биләмәһендә республиканың күренекле дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, БАССР Министрҙар Советының элекке рәйесе бюсын ҡуйыу ҡаралған. Әйткәндәй, был эш алдан уҡ башҡарылды. 4 февралдә Урал аръяғы агросәнәғәт колледжы биләмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашлығында Зәкәриә Аҡназаровҡа бюст асылды.

✓"Фәнде һәм юғары мәктәпте үҫтереүгә көс һалыу маҡсатында айырым дәүләт комитетын ойошторорға хәл иттек. 2025 йылдың 3 мартында Башҡортостандың Фәнни-технологик үҫеш буйынса дәүләт комитеты булдырылды. Комитет рәйесе итеп Светлана Мостафина тәғәйенләнде", - тине Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә.

✓ *"Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы Законға ярашлы, алтаҡталар - русса һәм башҡортса яҙылырға тейеш. Башҡорт телендәге текст мотлаҡ һулаҡайҙа йәки өҫ яҡтан урынлаштырыла.*



ӘЙҘӘГЕҘ...

# ХАТАЛЫ АЛТАҠТАЛАРҘЫ...

## бергәләп төҙәтәйек!

**(Башы 1-се биттә).**

Билдәләнеүенсә, әлеге чатты теләге булған һәр кем Телеграмда "Город без ошибок. Башкортостан" тип яҙып эҙләп таба һәм үҙе күргән, фотоға төшөргән хаталар тураһында хәбәр итә ала. Шулай уҡ уҡыусыларыбыҙға уңайлы булһын өсөн һылтанма ла тәҡдим итәбеҙ: t.me/bashnamebot. Артабан "Мөрәжәғәт ҡалдырырға" тигән төймәгә баҫырға кәрәк. Хата төҙәтелгәндән һуң уны яҙыусыға мотлаҡ яуап ебәреләә. Мәҫәлән, быйылғы йылдың 19 февраленә ҡарата Өфө, Октябрьский, Салауат ҡалаларында, Өфө, Туймазы, Борай, Бүздәк райондарында тап ошо чат-бот ярҙамында хаталы яҙыуҙарҙы төҙәтеү осраҡтары билдәле. Мөрәжәғәттәрҙең күбеһе алтаҡталарҙағы текстарҙы руссанан башҡортсаға дөрөҫ тәржемә итмәүгә ҡағыла.




Ниндәй хаталар йыш осрай? Баш ҡалабыҙ Өфө үҙәгендәге алтаҡталарға күҙ һалһаҡ, иң йыш осраған хаталарҙың береһе башҡорт хәрефтәрен дөрөҫ яҙмауға, мәҫәлән, "ҡ" урынына - "к" яҙыу, "ҫ" - "с", "ҙ" - "з" хәрефтәрен бутау күҙгә ташлана. Шулай уҡ интернеттағы төрлө онлайн-тәржемәсе сервистарына мөрәжәғәт иткән осраҡта тупаҫ хаталар ебәрелә. Бындай тәржемәләрҙе мотлаҡ белгестәрҙән тикшертергә кәрәк.

"Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы Законға ярашлы, ойошма-учреждениеларҙың алтаҡталары дәүләт телдәрендә - русса һәм башҡортса яҙылырға тейеш. Башҡорт телендәге текст мотлаҡ һулаҡайҙа йәки өҫ яҡтан урынлаштырыла. Әгәр ойошма атамаһы башҡорт теленә тәржемә ителмәһә, башҡортса тексты төп атаманан һуң ҡуйырға ярай. Мәҫәлән: Кафе "МАНДАРИН" кафеһы. Әммә күптәр мәғәнәүи яҡтан дөрөҫ булмауын уйлап тормайынса, "кафеһы" һүҙен алға, ә русса вариантты артҡа ҡуя. Һөҙөмтәлә "Кафеһы "МАНДАРИН" кафе" тигән хаталы һүҙбәйләнеш килеп сыға. Бындай хәлдәргә юлыҡмаҫ өсөн иң дөрөҫө - белгестәргә мөрәжәғәт итеү.

***Хаталы яҙыуҙы төҙәтеү күпме ваҡытты ала? "Диалог төбәк" автономлы коммерцияға ҡарамаған ойошма етәксеһе Ильяс Сәғитов шулай тип аңлатма бирә:*** "Беҙ чат-ботҡа килгән мөрәжәғәттәрҙе шунда уҡ иғтибарға алабыҙ. Хаталы алтаҡта төҙәтелгәнгә тиклем уны иғтибар үҙәгендә тотабыҙ һәм иң аҙаҡтан башҡарылған эштең фотоһын беркетеп, мөрәжәғәт итеүсегә яуап ебәрәбеҙ. Хаталы алтаҡталарҙы алмаштырыу бер нисә көндән бер нисә аҙнаға тиклем ваҡыт талап итә".

---

"Йәшелдәр" партияһының ғауғалашыуҙарына ҡарамай, берәҙәк эттәрҙе эвтаназиялау хаҡында КПРФ депутаты Нина Останина әҙерләгән закон проектын ошо көндәрҙә ҡарарға йыйына. Тик баяғы "Йәшелдәр" тынғы бирмәй һаман: юғары палатаның Конституция комитеты етәксеһе Андрей Клишас агрессив эттәрҙе юҡ итеү буйынса депутаттар башланғысына тиҫкәре баһалама яҙҙы. "Эттәрҙе ҡартайып үлгәнсә ситлектә тотҡон итеп тотоу, улайһа, кешелекле буламы ни?"- тип ғәжәпләнеүен белдерә проект авторы Нина Останина.

Мәсьәләнең башҡа яғы ла бар. "Берҙәм Рәсәй" депутаты Николай Валуев иҫәпләп сығарыуынса, бер этте ай буйына аҫрау өсөн 10 мең, ә ҙур ҡалаларҙа 20 мең һум аҡса китә. Ярай, эт приютта 10 йыл йәшәһен дә, ти. Тимәк, йыллыҡ сығымдарҙы илдәге эттәр һанына ҡабатлаһаң, берәҙәк эттәрҙе ҡарау өсөн йылына 140 млрд (!) һум аҡса сарыф ителә. Депутаттар тағы бер сағыштырыу менән таң ҡалдырҙы: эттәргә ҡарағанда, пенсионерҙар ҡаҙнаға арзанғараҡ төшә икән дә! "Эт мәсьәләһендә беҙгә бер ниндәй ҙә демократия кәрәкмәй, балалар ҡәҙерлерәк"! - тип ярһыны зооһөйөүсе депутаттарға ҡаршы асыу белдереп "Берҙәм Рәсәй" партияһы депутаты Владимир Новиков. Эйе, дөрөҫ ярһый депутат: кеше ғүмерҙәре хаҡында һүҙ барғанда, уны нисек итеп кеше үлтереүсе ҡырағайланған берәҙәк эт ғүмеренә алыштырмаҡ, уның менән сағыштырмаҡ кәрәк! Әммә ҡайһы бер экологик проблемалар шаршауына ышыҡланып, үҙ һүҙҙәрен һүҙ итергә күнеккән "Йәшелдәр" әле булһа "кешелеклелек" өсөн көрәшә һәм Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володинға берәҙәк эттәрҙе эвтаназиялау тураһындағы закон проектын ҡарауҙан алыуҙы талап итә. Ә ысын ҡиммәттәрҙе - кеше ғүмерҙәрен һаҡлап ҡалыу "Йәшелдәр" өсөн кешелеклелек түгелме икән, улайһа?

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

---

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ

# ТЫНЛЫҠ ТҮГЕЛ, ТЫНЫСЛЫҠ КӘРӘК!

**Көнбайыш киң мәғлүмәт саралары Украина Ҡораллы көстәренең Курск өлкәһенә бәреп инеүе менән бәйле Зеленский авантюраһының барып сыҡмауын аяуһыҙ тәнҡит утына тота. Европа һалым түләүселәренең аҡсалары елгә осоролдо, тип яҙа, мәҫәлән, АҠШ-тың USA Today гәзите үҙенең "Сираттағы еңелеү өсөн Украина союздаштары аҡса түләне" тигән баш менән баҫылған материалында. Hull Daily Mail баҫмаһы иһә, Зеленскийҙың хурлыҡлы еңелеүенә Британия йөҙәрләгән млн фунт стерлинг сығарып һалды; өҫтәүенә, Курскиҙа 67 630 украин һалдаты һәләк булды, 2000 бронемашина, 400 танк, 500 артиллерия орудиеһы ҡыйратылды, тип асыу белдерә.**

Украина ғәскәре ҡалдыҡтары Суджала оялап алған команда пункттарынан кейемдәрен һәм флагтарын ғына түгел, йәшерен документтарын, ҡоралдарын, техникаһын ташлап ҡаса, тип яҙа KP.RU. Шуныһы мәҙәк: украин һалдаттары Курск өлкәһенән тотҡарлыҡһыҙ сығып китеү маҡсатында Рәсәй яугирҙары формаһын кейеп алғандар хатта. Ләкин урындағы халыҡ уларҙың ысын йөҙҙәрен фашларға ярҙам итә.

Ҡорал, тигәндән, украин һалдаттары Көнбайыштан бушлай килгән ҡиммәтле ҡорал һәм техникаларын ташлап ҡалдыра, ләкин һуңғы көндәрҙә уларға ҡасыу юлдары ла ябылды: улар тулыһынса ҡамап алынды. Уларға бер генә юл ҡалды: РФ Президенты Владимир Путин әйткәнсә, ҡоралдарын һалып, пленға бирелеү генә боевиктарҙың ғүмерен ҡотҡарып ҡаласаҡ. Тик шулай ҙа уларҙың Курск ерендә ҡылған енәйәттәре тикшереләсәк әле.

Һәм тағы. Запорожье өлкәһендә "Уң сектор" экстремистик ойошманың террористар төркөмө етәксеһе Михаил Алексеев юҡ ителгән. Курск өлкәһендә ҡамауҙа ҡалғандар араһында утыҙға яҡын НАТО офицеры булыуы асыҡланған. Улар Украина Ҡораллы көстәре менән командалыҡ иткән, НАТО спутниктарынан килгән мәғлүмәттәр буйынса Рәсәйҙең төпкөл территорияларына һөжүм менән идара иткән.

РФ Президенты ярҙамсыһы Юрий Ушаков Украинала ваҡытлыса тынлыҡ урынлаштырыуҙың еңелеп барыусы Киев режимына хәл йыйырға мөмкинлек бирергә маташыу ғына булыу ихтималлығы хаҡында АҠШ иғтибарына еткерелеүе тураһында белдерҙе һәм Рәсәйгә ваҡытлыса тынлыҡ түгел, ә оҙайлы һәм ышаныслы тыныслыҡ кәрәк, тип өҫтәне. Bloomberg Америка агентлығы белдереүенсә, Украина менән Евросоюз Украина конфликтын көйләү буйынса Рәсәй яғы тарафынан тәҡдим ителгән шарттарҙан баш тартыуы ихтимал. Ә шулай ҙа Көнбайышта айыҡ фекер йөрөтөүсе, Украина конфликтына объектив ҡарашлы тәжрибәле сәйәсмәндәр бар әле. Пентагондың элекке кәңәшсеһе, отставкалағы полковник Дуглас Макгрегор Deep Dive You Tube каналы эфирында белдереүенсә, әгәр АҠШ ысынлап та тыныслыҡ булдырырға теләй икән, Украинанан бөтөн хәрби көстәрен сығарырға тейеш: "Икенсенән, Украинаға хәрби ярҙамды туҡтатырға. Бөтөнләйгә. Беҙ шулай эшләһәк, НАТО ла беҙҙең өлгөгә эйәрәсәк. Шул саҡ ҡына беҙ Рәсәйгә ысынлап та тыныслыҡ теләүебеҙҙе күрһәтә алабыҙ". Рәсәйҙең ваҡытлыса тынлыҡ булдырыуҙан хәүефләнеүе нигеҙле, тине Макгрегор, шуға күрә килешеү төҙөгәндән һуң Киев режимы башҡаса баш күтәрмәһен өсөн Вашингтон мөмкин булғандың барыһын да эшләргә тейеш.

Махсус хәрби операция барышында РФ Ҡораллы көстәре яңы стратегия ҡулланырға ҡарар итте, ул "өсмөйөшлө һөжүм" тип атала. Һүҙ бында Рәсәй яугирҙары тарафынан пехотаны, пилотһыҙ осоу аппараттарын һәм планлаштырыусы авиация бомбаларын берҙәм йүнәлештә һәм ҡатнаш файҙаланыу хаҡында бара. Был стратегия НАТО ағзалары булған илдәрҙе хафаға һалды, сөнки был план Украина Ҡораллы көстәре өсөн билдәле ҡыйынлыҡтар тыуҙырасаҡ.

Әйткәндәй, көтмәгәндә, уйламағанда, АҠШ командованиеһы Дональд Трамп бойороғо менән Йеменға ҡаршы авиация уты асты. Американың Үҙәк штабы аңлатмаһы буйынса, был хәрби операция Иран тарафынан ярҙам күрһәтелеүсе Йемендағы "Ансар Аллаһ" (хуситтар) хәрәкәтенә ҡаршы йүнәлтелде һәм был һөжүм, Америка яғы аңлатыуынса, Вашингтон "мәнфәғәттәрен яҡлау" йөҙөнән - суднолар хәрәкәте хәүефһеҙлеген тәьмин итеү маҡсатынан эшләнә. Матбуғат сығанаҡтары мәғлүмәттәренә ҡарағанда, 2023 йылдың ноябренән алып хуситтар Ҡыҙыл диңгеҙҙә судноларға йөҙҙән ашыу һөжүм ойошторған булып сыға. Йеменда ҡорбандар бар, 17 мартҡа мәғлүмәттәр буйынса 53 кеше һәләк булған, улар араһында балалар, ҡатын-ҡыҙҙар бар; 98 кеше йәрәхәттәр алған. Берләшкән Милләттәр ойошмаһы Йеменға һөжүм утын туҡтатырға саҡыра.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА.**

---

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Бөрө ҡалаһы башлығы Виктория Бурдина һәм уның урынбаҫары Сергей Гайтанов ришүәт алыуҙа һәм уны алыуҙа аралашсылыҡ итеүҙә ғәйепләнеп, ҡулға алынды. Тәфтишселәр версияһы буйынса, уҙған йылдың декабрендә Бөрө ҡалаһы башлығы, башҡарылған эштәр проект-смета документацияһына тап килмәүенә ҡарамаҫтан, үҙенең урынбаҫары аша ҡала объектын төҙөкләндереү буйынса муниципаль контракттың башҡарылған эштәр акттарына ҡул ҡуйған өсөн подряд ойошмаһы вәкиленән ришүәт алған. Бынан тыш, 2023 йылдың июнендә ул "Коновалов йорто" мәҙәни мираҫ объектын түбәнерәк хаҡҡа - 3,1 миллион һумға һатҡан, объекттың баҙар хаҡы яҡынса 5,8 миллион һум булған.

✓Башҡортостанда яңы һәм реконструкцияланған объекттарыбыҙ - Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры, Октябрьский музыка колледжы, Альбанов исемендәге ҡотопсолар һәм Шаляпин исемендәге музыка музейҙары менән ғорурланалар. Евразия күсмә цивилизациялар музейының визит-үҙәге асылды, музейҙы булдырыу эштәре бара. Республикала күптән көтөлгән объектты - Өфө дәүләт циркын реконструкциялауға федераль аҡса йәлеп ителә. Эштәр 2026 йылда башлана. "2028 йылда уны яңыртылған килеш асыу өсөн барыһын да эшләрбеҙ", - тине Радий Хәбиров V "Арт-Ҡоролтай" мәҙәни форумының пленар ултырышында.

✓Башҡортостандан Махсус хәрби операция ветерандарының йыйылма командаһы Юграла ҡышҡы спорт төрҙәре буйынса беренсе Бөтә Рәсәй "Ватанды һаҡлаусылар Кубогы" ярыштарында ҡатнаша. МХО ветераны, республиканың йыйылма командаһы ағзаһы Олег Мөфтәхетдинов ҡышҡы спорт төрҙәре буйынса "Бөтә Рәсәй Ватанды һаҡлаусылар" кубогында икенсе алтын миҙал яуланы. Спортсылар командаһында шулай уҡ МХО ветерандары Радик Йосопов, Алексей Холопов бар. Улар биатлон, саңғы уҙышы һәм тау саңғыһы кеүек спорт төрҙәрендә ярыша.

✓Башҡортостанда төбәк сервис вәкиле итеп Альбина Ҡасимханова тәғәйенләнде, тип хәбәр иттеләр республика Хөкүмәтенең оператив кәңәшмәһендә. Рәсәй төбәктәрендәге сервис вәкилдәренең төп бурысы - граждандар өсөн социаль хеҙмәттәр күрһәтеү процесын мөмкин тиклем ябай һәм аңлайышлы итеү. Вәкилдәрҙе уҡытыу менән Стратегик инициативалар агентлығы (АСИ) шөғөлләнә. 2022 йылда АСИ көнүҙәк социаль мәсьәләләрҙе асыҡлау һәм хәл итеү өсөн төбәк сервис вәкилдәре институтын асыу тураһында иғлан итте, тип яҙғайны ТАСС.

***✓ Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығы уңайынан башҡорт кинорежиссеры, Рәсәйҙең Кинематографистар союзы ағзаһы Булат Йосоповтың "Фәрзәнә көнбайышҡа бара" хәрби-патриотик фильмының премьераһы көтөлә.***



ҠЫҪҠАСА

# ЫСЫНЛАПМЫ?

**Республика Урманды һаҡлау үҙәге мәғлүмәттәре буйынса, 2025 йылда Башҡортостанда юҡ итеүҙе талап иткән парһыҙ ебәк күбәләге усаҡтары табылмаған.** Был урмандарҙы ҡоротҡостарҙан ваҡытында һәм сифатлы эшкәртеү хаҡында һөйләй, тип хәбәр итте Башҡортостандың урман хужалығы министры Марат Шәрәфетдинов министрлыҡ коллегияһында. Башҡортостанда уҙғарылған урмандарҙы һаҡлау саралары 99,6 процент биологик һөҙөмтәлелек күрһәткән. 2024 йылда ебәк күбәләге менән көрәш 16 районындағы 187 мең гектар урманды солғап алған. Һуңғы 5 йылда Башҡортостанда парһыҙ ебәк күбәләге күпләп таралған 590 мең гектар майҙан эшкәртелгән. Парһыҙ ебәк күбәләге - япраҡлы һәм ҡайһы бер ылыҫлы ағастарға, ҡыуаҡтарға зыян килтереүсе хәүефле ҡоротҡос. Күпләп үрсеү ваҡытында ҙур майҙандарҙағы ағастарҙы юҡҡа сығара ала.

✓ **Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы авария комиссарҙарының эшмәкәрлеген көйләүсе закон сығарыу акттарына үҙгәрештәр индерергә һәм ошондай белгестәрҙең иҫәбен системаға һалырға планлаштыра.** Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, Башҡортостанда юл-транспорт ваҡиғаларының яртыһынан күбеһе ябайлаштырылған тәртиптә, европротоколдар буйынса рәсмиләштерелә, был дәүләт автоинспекторҙарын саҡырмаҫҡа мөмкинлек бирә. Тейешле документтарҙы тултырыу менән авария комиссарҙары шөғөлләнә. Процедураның яйлы булыуына ҡарамаҫтан, һорауҙар ҙа килеп тыуа. Әлеге ваҡытта теләһә кем үҙен авария комиссары тип атай алыуын иҫәпкә алғанда, ҡайһы бер "белгестәр" документтарҙы рәсмиләштергәндә яңылышырға мөмкин. Һуңынан страховка компаниялары түләүҙәрҙән баш тарта. Шуға күрә авария комиссары статусын ҡануни яҡтан нығытырға, махсус реестр булдырырға, дәүләт автоинспекцияһының авария комиссарҙарының һөнәри берләшмәһе менән үҙ-ара хеҙмәттәшлеген яйға һалырға, авария комиссарҙарын әҙерләү программаһын төҙөргә, автомәктәптәр программаһын үҙгәртергә тәҡдим ителә.

✓ **Башҡортостанда Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар эшҡыуарлыҡ өсөн льготалы заём алырға хоҡуҡлы.** Башҡортостан микрокредит компанияһынан хәбәр итеүҙәренсә, 27 февралдән МХО-ла ҡатнашыусылар һәм уларҙың хәләл ефеттәре өсөн ставка - 4,5 процент. Шулай уҡ уларға кредит юллауҙың ябайлаштырылған процедуралары тәҡдим ителә, был бизнесты башлау өсөн аҡсаны тиҙерәк алырға мөмкинлек бирә. Дәүләт ярҙамын алыу өсөн ойошманы республика биләмәһендә теркәргә, Рәсәй Хөкүмәте ҡарары менән раҫланған форма буйынса МХО-ла ҡатнашыуҙы раҫлаған белешмә кәрәк. Льготалы кредит физик йәки юридик шәхестәрҙең йәки шәхси эшҡыуарҙарҙың яуаплылыҡты үҙ өҫтөнә алыуы шарттарында, шулай уҡ транспорт йәки күсемһеҙ милек рәүешендә залог булғанда бирелә.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ЕҢЕҮ КӨНӨНДӘ...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Интерфакс"ҡа биргән интервьюһында республикала Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығына арналған саралар тураһында һөйләне. Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, республикала быныңөсөн махсус план әҙерләнгән. Унда төрлө саралар ҡаралған.**




Әйтәйек, Бөйөк Еңеүҙең 80 йыллығы уңайынан башҡорт кинорежиссеры, Рәсәйҙең Кинематографистар союзы ағзаһы Булат Йосоповтың "Фәрзәнә көнбайышҡа бара" хәрби-патриотик фильмының премьераһы көтөлә. Уның сюжеты Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында 400 һыйырҙы немец-фашист илбаҫарҙарынан азат ителгән Украинаға ҡыуып алып барған Учалы районы үҫмерҙәренең ҡаһарманлығына бағышлана. Әмир Абдразаҡов исемендәге "Башҡортостан" киностудияһы әлегә "Генерал Шайморатов" тигән исем аҫтында тулы метражлы анимация фильмын төшөрөү менән мәшғүл. Бер үк ваҡытта республикала яңы концерт программаһын, спектаклдәр әҙерләйҙәр. Бынан тыш, Армия мәҙәниәте көндәрен, "Геройҙар дәүере" патриотик йырҙар конкурсын, "Хәтер вахтаһы", "Хәтер шәме", "Үлемһеҙ полк", "Хәтер баҡсаһы" акцияларын үткәреү планлаштырыла. Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларҙың һәйкәлдәрен, обелисктарын, мемориалдарын һәм ҡәберлектәрен тәртипкә килтереү ҙә иғтибарҙан ситтә ҡалмай. "Төп саралар - тантаналы парад, тантаналы йыйылыш, байрам концерты һәм мемориалдарға сәскә һалыу 9 майҙа була", - тип яуапланы Радий Хәбиров журналистың һорауына.

## МУЗЕЙ ҘА КӘРӘК

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Миңлеғәле Шайморатов исемендәге МХО ветерандарын һәм инвалидтарын социаль яҡлау хәйриә фонды ойоштorған музей экспозицияһы менән танышты. Бында ул легендар комдив исемен йөрөткән Ирекле батальон ветерандары советы активы менән осрашты.**

Музей экспозицияһын булдырыу эше батальон ветерандары тәҡдиме менән 2023 йылдың көҙөндә башланған. Улар үҙҙәре бина тапҡан, ремонт эшләгән. Бында хәрби подразделениеның флагтары, ҡорал макеттары, яугирҙарҙың шәхси әйберҙәре, амуниция, ветерандар һәм хәрбиҙәр йыйған боеприпас ярсыҡтары бар. М.Шайморатов исемендәге батальон ветерандары советы рәйесе вазифаһын башҡарыусы Дмитрий Жуков бында МХО ҡатнашыусылары һәм ветерандары, һәләк булған хәрбиҙәрҙең ғаилә ағзалары йыйылыуы хаҡында һөйләне. Хәйриә фонды директоры, генералдың туғаны Марат Ғәҙелшин әйтеүенсә, фонд ойоштороу идеяһы - Беренсе ирекле батальон яугирҙарыныҡы. Ул ваҡытта "Ватанды һаҡлаусылар" дәүләт фонды ла булмай әле. Хәҙерге көндә Хәйриә фонды Башҡортостан яугирҙары булған подразделениеларға гуманитар йөк әҙерләп ебәреү менән шөғөлләнә. Фонд аҡсаһы иҫәбенә квадрокоптерҙар, ретрансляторҙар, бәйләнеш станциялары, дронға ҡаршы ҡоролмалар һатып алына. Бында шулай уҡ йәш быуын менән патриотик эшкә ҙур иғтибар бүленә.

## ЕТЕШТЕРӘБЕҘ ҘӘ...

**Өфөнөң 2014 йылда ойошторолған "ЭлКом" предприятиеһы электр бүлеү һәм көйләү аппаратураһы етештереү менән шөғөлләнә. Сәнәғәттең төрлө тармаҡтары, шул иҫәптән нефть-газ өсөн металл шкаф корпустарын етештереүҙең беренсе сираты 2020 йылдың декабрендә "Зубов" технопаркында асылды.**

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров һәм Рәсәйҙең сәнәғәт һәм сауҙа министры урынбаҫары Иван Куликов компанияның етештереү эшмәкәрлеге менән танышты. Компанияның генераль директоры Илшат Шәйхетдинов һүҙҙәренсә, улар технологик процестарҙы комплекслы автоматлаштырыу өлкәһендә заманса ҡарарҙар әҙерләү һәм индереү буйынса лидер булып тора. Өфө районының Зубов ауылы эргәһендә төҙөлгән "БИТ" стена һәм иҙәнгә ҡуйыла торған электротехник корпустар етештереү заводына "Элком" 650 миллион һумға яҡын инвестиция һалған, 120-нән ашыу юғары етештереүсәнле эш урыны булдырылған. Мәҫәлән, башланғыс этапта айына сервер шкафтары өсөн 20 корпус етештерелһә, бөгөн иһә 400-гә яҡын. Әйткәндәй, элегерәк быларҙың барыһы ла сит илдән килтерелә ине. "Яңы производствоны йылдамыраҡ үҫтереүгә Көнбайыш санкциялары этәргес бирҙе, - тип билдәләне Илшат Шәйхетдинов "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы журналисы менән әңгәмәлә. - Беҙ заводтың артабанғы сираттарын төҙөүгә инвестиция һалыуҙы дауам итергә булдыҡ, сөнки баҙар шуны талап итә".

## ҠЫТАЙҘАР МЕНӘН...

**Республика йортонда Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Рәсәй-Ҡытай индустриаль паркының башҡарма етәксеһе Хао Лянюань ханым менән осрашты. Көн тәртибендә - Ҡытай Халыҡ Республикаһы (КХР) менән хеҙмәттәшлекте үҫтереү мәсьәләләре. Башҡортостан Башлығы Ҡытай Халыҡ Республикаһы менән мөнәсәбәттәрҙең әһәмиәтен билдәләп, был илде төбәктең төп тышҡы иҡтисади партнерҙарының береһе булыуын әйтте.**

Хао Лянюань ханым Рәсәй-Ҡытай индустриаль паркының берлектәге проекттарҙы тормошҡа ашырыуҙағы ҡаҙаныштарын билдәләне һәм Рәсәй субъекттары менән иҡтисади бәйләнештәрҙе артабан киңәйтеүҙең мөһимлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды. Ул шулай уҡ Ҡытай индустриаль паркында Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән продукция менән павильондар төҙөү пландары тураһында һөйләне, был сауҙа һәм мәҙәни алмашыуҙар үҫешендә мөһим аҙым булырға тейеш. Осрашыу аҙағында индустриаль парк етәксеһе Башҡортостан вәкилдәрен май айында Шэньчжэнь ҡалаһына сауҙа-иҡтисади хеҙмәттәшлек буйынса икенсе Рәсәй-Ҡытай конференцияһына саҡырҙы. Был сара инвестициялар йәлеп итеү һәм ике яҡлы иҡтисади бәйләнештәрҙе нығытыу мөмкинлектәрен тикшереү майҙансығы булмаҡсы.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда 2025 йылға йорттарҙы капиталь ремонтлау планы әҙерләнде, тип хәбәр итә республиканың Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы. Эштәр исемлеге милек хужаларынан иғәнәләр йыйыу кимәлен иҫәпкә алып төҙөлгән. Документҡа ярашлы, 600 күп фатирлы йортта дөйөм суммаһы 5 миллиард һумға ремонттың 653 төрөн башҡарыу планлаштырыла.

✓Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы власть органдарында вазифа биләүсе сит ил агенттары тип танылған кешеләрҙең вәкәләттәрен ваҡытынан алда туҡтатыу тураһында закон проектын март айында аҙаҡҡы уҡыуҙа ҡарай. Һөҙөмтәлә "Башҡортостан Республикаһы Башлығы тураһында" һәм "Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутатының статусы тураһында" республика закондары үҙгәртелә. Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, бындай ҡарар милли именлек мәнфәғәттәре менән бәйле, сөнки сит ил йоғонтоһо аҫтындағы вазифалы кешеләрҙең йәшерен мәғлүмәттән ил мәнфәғәттәренә зыян килтереүе ихтимал.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә Дәүләкән районының Алға ауылында булған фажиғәле хәлгә комментарий бирҙе. "Бөгөн төндә Дәүләкән районында сыҡҡан янғында биш сабыйҙың һәм бер ирҙең ғүмере өҙөлдө. Фатирҙа янғын тураһында хәбәр иткән прибор эшләп киткән, күршеләр уны ишетеп, утты һүндергән. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, һуң булған", - тип белдерҙе республика етәксеһе.

✓Мәктәптәрҙә һуңғы ҡыңғырау байрамы - 24 майҙа, ә сығарылыш кисәләре 28 июндә була, тип хәбәр итәләр Рәсәй Мәғариф министрлығынан. Сығарылыш кисәләрен уҙғарғанда мәктәптәрҙә Рәсәй флагын күтәреү һәм гимнын башҡарыу, күп быуынлы һәм күп балалы ғаиләләрҙең вәкилдәрен ҡотлау, ата-әсәләрҙең, шул иҫәптән дәүләт наградалары менән бүләкләнгәндәрҙең, МХО-ла ҡатнашыусыларҙың сығышы ҡаралған. Бынан тыш, төбәктәргә инвалид һәм һаулыҡ мөмкинлеге сикләнгән уҡыусылар өсөн хәүефһеҙлек сараларын тәьмин итеү бурысы йөкмәтелә. Әйткәндәй, быйыл Башҡортостанда 9-сы класты - 50 меңдән ашыу, ә 11-се класты 15,5 меңгә яҡын уҡыусы тамамлай.

✓Башҡортостандың агросәнәғәт комплексы продукцияһын етештереүселәре алты йыл "Халыҡ-ара кооперация һәм экспорт" милли проектын ғәмәлгә ашырған осорҙа сит илгә поставканы 2,8 тапҡырға арттырған: әгәр 2019 йылда республика агросәнәғәт комплексында экспорт күләме 330,9 мең тонна ($112,6 миллион) тәшкил итһә, 2024 йылда күрһәткестәр 620 мең тоннаға ($320,9 миллион) тиклем артҡан. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Лайыҡлы һәм һөҙөмтәле хеҙмәт һәм уңышлы эшҡыуарлыҡ" милли маҡсаты сиктәрендә "Халыҡ-ара кооперация һәм экспорт" милли проекты тормошҡа ашырыла, тип хәбәр иткәйне "Башинформ".

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# КИЛӘСӘККӘ ЭШЛӘҮСЕ ОҪТАЛАР



(Башы 1-се биттә).

Бәйгелә ҡатнашыусылар ҙа, еңеүселәр ҙә бихисап булды, әммә гәзит уҡыусыларыбыҙҙы бигерәк тә "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы" бәйгеһе еңеүселәре ҡыҙыҡһындырғанын беләбеҙ. Бына улар: Хәйбулла районы Аҡъяр ауылының 1-се дөйөм белем биреү мәктәбе уҡытыусыһы Венера Йәрмөхәмәтова һәм Өфө күп профилле һөнәри колледж уҡытыусыһы Фәнзил Санъяров "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы" төбәк-ара конкурсының лауреаттары тип иғлан ителде. Стәрлетамаҡ ҡалаһының 23-сө күп профилле полилингваль мәктәбе уҡытыусыһы Айһылыу Таймасова - өсөнсө, баш ҡаланың 24-се белем биреү мәктәбе уҡытыусыһы Гөлшат Вәлиуллина икенсе урынды яуланы. ***Өфө ҡалаһының 2-се "Смарт" гимназияһында балаларҙа тыуған теленә һөйөү тәрбиәләүсе Наҙгөл Хәбибуллина "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы-2025" төбәк-ара конкурсының абсолют еңеүсеһе тип иғлан ителде.***

Наҙгөл Хәйбулла районы ҡыҙы М. Аҡмулла исемендәге БДПУ-ның башҡорт филологияһы факультетын тамамлаған. Талантлы уҡытыусы шулай уҡ университеттың М.Аҡмулла исемендәге премияһына лайыҡ булды. БДПУ ректоры Салауат Сәғитов "Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы" конкурсының бер нисә номинацияһында еңеүселәргә шулай уҡ бүләктәр тапшырҙы: "Һеҙ бөтәгеҙ ҙә башҡорт халҡының күңел донъяһын, рухын, уның моң ҡоралы - ҡурайҙы яҡшы беләһегеҙ. Тәү ҡарамаҡҡа, ул ябай ғына һымаҡ, оҫталарға үҫемлектән ҡурай яһап, уйнап ебәреүе бер ни түгел. Бының өсөн әллә ниндәй көс һалыу кәрәкмәй ҙә һымаҡ. Ләкин уны ҡурай дәрәжәһенә күтәрер өсөн ысын оҫта булырға кәрәк. Бөгөн был залда "тап шундай оҫталар" тип аталырға хаҡлы булғандар йыйылған. Һеҙ бәләкәй балаларҙан ысын кеше яһай беләһегеҙ. Һеҙ уларҙың йөрәгендә моң уғылып торһон һәм уларҙы ғүмер буйы һөйөү оҙата барһын өсөн бөтәһен дә эшләйһегеҙ. Һеҙгә бының өсөн ҙур рәхмәт!" - тине Салауат Тәлғәт улы еңеүселәргә ҡотлап.

Йыл һайын был мәртәбәле конкурс үҙ эшенең оҫталарын, ысын талант эйәләрен асыҡларға ярҙам итә. "Уҡытыусы" тигән һүҙ "Киләсәк" тигән төшөнсәгә барып бәйләнә. Балалар - беҙҙең киләсәк. Ил яҙмышы, тел яҙмышы тигән саҡта беҙ педагогтың да хеҙмәтен күҙ уңында тотабыҙ. Киләсәк менән серләшеүсе, киләсәккә эшләүсе оҫталар бит улар. Шуға ла уларҙың иңендә оло яуаплылыҡ ята. Был турала конкурстың абсолют еңеүсеһе Наҙгөл Исмәғил ҡыҙы ла бик асыҡ итеп еткерҙе.

- Бөгөн ошо күркәм залда иле, теле өсөн янған ил улдары, ил инәйҙәре алдында ғорурланып та, тулҡынланып та баҫып торам. Тыуған телемә, остаздарыма рәхмәтлемен! Республика етәкселеге, Мәғариф һәм фән министрлығы башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү өсөн ҙур көс һала, был беҙҙе дәртләнеп эшләргә әйҙәй. Теленә, иленә хеҙмәт иткән кеше генә бәхетле була. Тыуған башҡорт телебеҙ мәңге йәшәһен!

Наҙгөл Хәбибуллинаны оло еңеүе менән ҡотлайбыҙ! Яңы иждаи асыштар, хеҙмәт ҡаҙаныштары теләйбеҙ.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА.**

ҺЕҘҘЕ БОРСОЙМО?

# ЕР УБЫЛА ТОРА...



**Яңыраҡ Өфөнөң Интернациональ урамында ер убылып, Лада Калина машинаһының 8 метр тәрәнлеккә төшөп китеүе тураһында һәр кем ишетеп беләләр. Әйткәндәй, ваҡыты-ваҡыты менән төбәктең баш ҡалаһында бындай күренештәр күҙәтелеп тора. Бындай осраҡтар ниндәй йышлыҡта ҡабатланырға мөмкин, күп ҡатлы йорттарҙа йәшәүселәргә хәүефләнергә урын бармы, ер убылыуы мөмкинлеген алдан белергә мөмкинме? Ошо һәм был темаға ҡағылышлы башҡа һорауҙарға 20 йылдан ашыу эш тәжрибәһе булған инженер-эҙләнеүсе Павел Челпанов яуап бирә.**

- Өфөлә карст соҡорҙары тураһында ишетмәгән кеше юҡтыр, моғайын. Ҡаланың бөтә биләмәһе лә карст йоғонтоһона дусар. Карст соҡорҙары - улар таштарҙың һыу менән иретелеүе һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән бушлыҡтар. Интернациональ урамындағы соҡор нәҡ ошондай карст күренеш менән бәйле. Ләкин бындай соҡорҙар башҡа сәбәптәр арҡаһында ла килеп сығырға мөмкин, мәҫәлән, техноген сәбәптәр йәки торба үткән урындарҙа. Бушлыҡтарҙың ҡасан һәм ҡайҙа барлыҡҡа килеүен алдан аныҡ ҡына әйтеп булмай. Тик ниндәйҙер бер биләмәлә был процестың ни тиклем әүҙем булыуын күҙалларға мөмкин. Ғәҙәттә, бындай бушлыҡтар төҙөлөш башлар алдынан алып барылған тикшереүҙәр ваҡытында асыҡлана. Тикшереүҙәр карстланған тоҡомдар барлығы, һыу хәрәкәте һәм ул тоҡомдарҙың ирeү мөмкинлеген асыҡлауға ҡайтып ҡала. Әгәр ҙә бындай тоҡомдар булып та, уларҙы иретеүсе һыу юҡ икән, тимәк, процесс әүҙем түгел. Ләкин яуым-төшөм йәки коммуналь авариялар һөҙөмтәһендә һыу китеүе хәлде үҙгәртергә мөмкин. Ҙур ҡалаларҙа, ғәҙәттә, бындай аварияләр тау тоҡомдарын йыуған һыуҙың яҡынса 50 процентын тәшкил итә.

Тотош Өфөнө алып ҡарағанда, Инорс биҫтәһендә был йәһәттән хәл бер ни тиклем яҡшыраҡ, ә ҡаланың башҡа урындарында хәл төрлөсә. Ҙур хәүеф янаған биләмәләр ҙә бар. Ундай урындар тураһында тулы мәғлүмәт йыйылған һәм ул мотлаҡ рәүештә төҙөлөш эштәре барышында иҫәпкә алына.

Күп ҡатлы йорттар һәм биналар бындай осраҡтарҙан һаҡланған. Төҙөлөш башлар алдынан төрлө эҙләнеүҙәр үткәрелә, һаҡлау саралары ойоштороla. Карстарҙан һаҡланыу өсөн бушлыҡтарҙы махсус иретмәләр менән тултырыу (инъекциялау), йорт нигеҙҙәрен төҙөүҙә проектлы хәл итеү йәки был ике ысулды берләштереү ҡаралған. Был ысулдар, әгәр ҙә карст соҡоро барлыҡҡа килә ҡалһа, йортто һаҡлап ҡалырға булышлыҡ итергә һәм соҡорҙо юҡ итеү мөмкинлеген булдырырға ярҙам итә. Хәҙерге ваҡытта төҙөлөш технологиялары һәм алымдары алға киткән, шуға күрә карст хатта метро төҙөүгә лә ҡамасау итә алмай. Бында башлыса мәсьәлә иҡтисади йәһәттән маҡсатҡа ярашлы булыуға ҡайтып ҡала. Шулай ҙа Көнсығыш сығыу юлы миҫалында карст проблемаһын хәл итеү мөмкин икәнлеген күрергә була.

ҠЫҪҠАСА

# ТАЛПАНДАР УЯНА

**Быйыл ҡыштың йылы булыуы һәм яҙҙың иртә килеүе арҡаһында талпандар ғәҙәттәгенән иртәрәк уянырға мөмкин, тип белдерә белгестәр.** Ҡағиҙә булараҡ, талпан тешләүҙең тәүге осраҡтары апрелдә теркәлә, ә мөрәжәғәт итеүселәрҙең һаны иң күбе майға тура килә, ә мартта бер-нисә осраҡ була. Быйыл иһә яҙҙың иртә килеүе арҡаһында талпандар менән осрашыу ҙа иртәрәк буласаҡ. Ҡан һурғыстарҙан һаҡланыу өсөн ябыҡ кейем кейеү, үҙ-үҙеңде һәм ғаилә ағзаларын даими тикшереп тороу кәрәк. Шулай ҙа табиптар фекеренсә, талпан энцефалитетын иҫкәртеү өсөн иң яҡшыһы - вакцинация эшләтеү. 2024 йылда 9 меңгә яҡын кеше талпандан тешләнгән. Был 2023 йылға ҡарағанда 18 процентҡа кәмерәк. Белгестәр бындай һөҙөмтәне һалҡын ямғырлы йәй менән генә түгел, ә биләмәләрҙе сифатлы акарицид менән эшкәртеү, шулай уҡ кешеләрҙең шәхси профилактика тураһында белеме артыуы менән бәйләй.

✓ **Росреестр ҡайһы бер киң мәғлүмәт сараларында баҫылған 2025 йылдың 1 мартынан Рәсәйҙә дача участкаларында урынлашҡан айырым капиталь ҡаралтыларға: йортҡа, мунсаға, гаражға һәм башҡаларға мотлаҡ һалым индерелеүе тураһында хәбәрҙәрҙе кире ҡаҡты.** Йәнәһе лә капиталь нигеҙле объекттарҙы Росреестрға теркәргә кәрәк, юғиһә, Федераль һалым хеҙмәте декларация биреүҙән баш тартҡан өсөн һалым һәм штраф тәғәйенләй. "Хәбәрҙәр ысынбарлыҡҡа тап килмәй", - тип белдерҙеләр Росреестрҙа. Хәбәр ителеүенсә, 2025 йылдың 1 мартынан ике федераль закон үҙ көсөнә инде, уларҙың береһе шәхси торлаҡ төҙөлөшө һәм баҡсасылыҡ өсөн бирелгән ер участкаларын үҙләштереүгә ҡағыла. Икенсе закон "төҙөнөң - рәсмиләштер" принцибын ғәмәлгә индерә, уға ярашлы, төҙөлгән биналарҙы уларға хоҡуҡ алғандан һуң ғына файҙаланырға мөмкин. "Был федераль закондар капиталь төҙөлөш объекттарына ҡарата яңы һалымдар, шулай уҡ яңы яуаплылыҡ төрҙәрен йәки ер участкаларын файҙаланмаған өсөн штрафтар индереүҙе күҙ уңында тотмай. Хужалыҡ ҡаралтыларына һалым тәртибе Һалым кодексында күптән билдәләнде һәм үҙгәрешһеҙ ҡала", - тип тиелә ведомство белдереүендә.

✓ **Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы һәләк булған яугирҙарҙың ғаилә ағзаларына өҫтәмә социаль ярҙам саралары тураһында республика законына үҙгәрештәр индереү тураһында закон проектын әҙерләй.** Бер тапҡыр бирелә торған ике миллион һум күләмендәге түләүҙе алыусылар һанын һәләк булған хәрби хеҙмәткәрҙең бөлөғ булған балалары (әгәр улар берҙән-бер ғаилә ағзалары булһа) иҫәбенә киңәйтергә тигән тәҡдим бар. Был хаҡта Башҡортостан Дәүләт Йыйылышының матбуғат хеҙмәте хәбәр итә. Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, бөлиғ булмаған балалар матди ярҙам алыуға өҫтөнлөклө хоҡуҡҡа эйә. Закон проекты март аҙағында пленар ултырышта ҡарала.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә Шаҡша күперендә 15 апрелгә тиклем транспорт хәрәкәтен ваҡытлыса сикләү индерелде. Баш ҡала хакимиәте хәбәр итеүенсә, был инженер коммуникацияларын ҡуйыу менән бәйле. Сикләү ике йүнәлештә лә ситтәге уң һыҙаттарҙа иртәнге 9-ҙан киске 5-кә һәм киске 8-ҙән таңғы 6-ға ҡәҙәр ғәмәлдә була.

✓Өфөнән МХО биләмәһенә сираттағы гуманитар йөк оҙатылды. Был хаҡта баш ҡала хакимиәте башлығы Ратмир Мәүлиев хәбәр итте. Эшҡыуарҙар, ойошмалар, ҡала халҡы һәм йәмәғәтселәр йыйған кәрәк-яраҡтар Донецк Халыҡ Республикаһында һәм Запорожье өлкәһендә хәрби бурыстарын үтәгән яугирҙарға тапшырылды. Бынан алдараҡ Өфөнөң Дим районында ла ҙур гуманитар йөк әҙерләнеләр. "Купец" позывнойлы МХО яугир ҡыҫҡа ваҡытлы ялдан һуң уны хеҙмәт итеү урындарына алып китә.

✓"АРТ-ҡоролтай" форумы сиктәрендә илдең музей хеҙмәткәрҙәрен, тыуған яҡты өйрәнеүселәрҙе, ғалим-тарихсыларҙы, йәмәғәт ойошмалары вәкилдәрен берләштергән "Ватан геройҙары: тарихи мәғрифәтселек һәм музей саралары менән патриотик тәрбиә" секцияһы үтте. Сараның модераторы, Башҡортостан Республикаһы Милли музейы директоры вазифаһын башҡарыусы Рөстәм Исхаҡов белдереүенсә, "ултырыш музейҙарҙа Бөйөк Ватан һуғышы тураһында тарихи хәтерҙе һаҡлау мәсьәләләренә, бөгөнгө көндә илебеҙ һағында ҡыйыу торған батырҙарға һәм уларҙың ғаиләләренә иғтибар бүлеүгә көсәйтеүгә, патриотик тәрбиә биреүҙә музейҙарҙың ролен ҡарауға" йүнәлтелде.

✓Өфөнән 500-гә яҡын уҡыусы тематик поезда герой-ҡала Волгоградҡа сәйәхәткә юлланды. Был - Рәсәй тимер юлдарының Еңеүҙең 80 йыллығына арналған бер проекты. Йәш пассажирҙарҙы хәрби-тарихи йәмғиәт реконструкторҙары оҙатып бара, юлда улар Бөйөк Ватан һуғышының дәһшәтле ваҡиғалары хаҡында һөйләй. Көнө буйына улар Волгоград буйлап экскурсияла йөрөй һәм герой-ҡаланың иҫтәлекле урындары менән таныша. Апрель айына ла Өфө - Волгоград - Өфө тематик поездарында шундай уҡ сәйәхәт планлаштырыла.

✓Ҡазанда Татар КВН лигаһының "Әйҙә, ШаяРТ!" фестивале уҙҙы. Был фестиваль 2025 йылғы миҙгелде башлап ебәрҙе. Унда Ҡазандан, Татарстандың һәм Башҡортостандың төрлө райондарынан йәмғеһе 21 команда ҡатнашты. Башҡортостандың КВН командаһы был фестивалдә гран-при алды. Фестивалдән һуң иң яҡшы командалар телевизион миҙгелгә һайлап алына. Башҡортостан командаһы һайлап алыуҙың алдан үткәрелгән этабында еңеү яуланы һәм сирекфиналға сыҡты, уйын 4 июндә була.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Алдашыусыларҙың алымдары өс нигеҙгә ҡоролған. Кешелә ҡурҡыу хисе тыуҙыралар; ҡарарҙы уйлап ҡабул итеү өсөн ваҡыт ҡалдырмайҙар; башҡалар менән аралашырға, кәңәш һорарға мөмкинлек бирмәйҙәр.*



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

## Ҙур ҡарабаш аҡсарлаҡ

**(Черноголовый хохотун)**



Беҙҙең төбәктә иң эре аҡсарлаҡ, ҡанатын йәйеп ебәрһә, киңлеге метр ярымға етә. Башы - ҡара, шуның менән танылып тора ла инде. Күҙҙәре тар ғына аҡ төҫтәге ярымҡайма менән уратып алынған. Ҡанатының осо аҡ, ҡара табы бар. Суҡышының төбө һары, ҡалған яғы - ҡыҙыл. Тәпәйҙәре һары. Тыныс ҡош, тауышы шым ғына эт лауылдағанға оҡшап китә.

Азовтан алып Тываға тиклемге дала күлдәрендә, диңгеҙ ҡултыҡтарында йәшәй.

Урал аръяғында һирәк күренгән ҡош, 1974 йылда Әбйәлил районының Үләнде күлендә осраны. Силәбе күлдәрендә иһә йыш күрергә була, өлкән ҡоштар менән бер рәттән йәш ҡоштар ҙа осрай, был уларҙың ошо ерҙәрҙә оя ҡороп, бала сығарып йәшәүе хаҡында ла "һөйләй". Беҙҙең мәғлүмәттәргә ярашлы, ҙур ҡарабаш аҡсарлаҡ Урал аръяғының Ҡарағайлы, Сыбаргүл, Талҡаҫ күлдәрендә 1990 йылдарҙан башлап оя ҡороп йәшәй, шулай ҙа уларҙың һаны аҙ - 1-2 пар ғына. 2001 йылда Маҡан һыуһаҡлағысында ла күрҙек. Ә бына осоп китеп барышлай улар йыл һайын августа Талҡаҫҡа туҡтап китә.

Башҡортостан был төр ареалының төньяҡ сиге булып тора. Ҙур ҡарабаш аҡсарлаҡты республикала апрелдең өсөнсө декадаһында яңғыҙ ҙа, парлап та күрә алаһығыҙ. Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың Ҡыҙыл китаптарына индерелгән.

## Күк аҡсарлаҡ

**(Сизая чайка)**



Тауышы көслө, сәбәләнеп ҡысҡырыуы әллә ҡайҙан ишетелә. Башы аҡ, арҡаһы, ҡанаттары күк, башҡа ошондай төҫлө аҡсарлаҡтарҙан бәләкәйерәк булыуы менән һәм түңәрәк башы менән айырылып тора.

Айырым парҙар Урал аръяғы күлдәрендә осрай. Йылға-күлдәр боҙҙан әрселгәнсе үк ҡайта. Ояһын түңгәләктәргә ҡора, 3 йомортҡа һала.

Туҡланыуы төрлө, һыуҙа йәшәгән умыртҡаһыҙҙарҙы ла, ваҡ балыҡты, бәпкә, кимереүселәрҙе лә ашай, яҙғы сәсеү мәлендә ер һөргән трактор артынан йөрөп селәүсендәрҙе лә сүпләй. Июль аҙағында күк аҡсарлаҡтар ҙурыраҡ туптарға туплана башлай. Ҡышлау урындары - Балтика һәм Скандинавиянан Урта диңгеҙгә тиклем. Ҡайһылары Ҡара һәм Каспий диңгеҙендә ҡышлай.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*ТАҒЫ ИҪКӘРТӘБЕҘ!*

**Эске хеҙмәт полковнигы, Башҡортостан Республикаһы буйынса Эске эштәр министрлығының мәғлүмәт һәм йәмәғәтселек менән бәйләнеш бүлеге начальнигы Максим Родионов, баш ҡала журналистары менән осрашып, телефон аша мутлашыуҙарға ҡаршы көрәш тураһында мәғлүмәт менән уртаҡлашты. Ул республикала мутлашыусылар тоҙағына эләккән ҡорбандар һанының кәмемәүен, көн һайын миллиондар менән иҫәпләнгән аҡсаның бурҙар кеҫәһенә инеп ятыуын һәм, ниләһе бигерәк аянысл, күп осраҡта оло быуын кешеләренең алданыуын билдәләп үтте.**

# ТЕЛЕФОНҒА КИЛГӘН КОДТАРҘЫ...

## бер кемгә лә әйтмәгеҙ



Еңел аҡса табыу юлын эҙләүселәр бер урында тормай, әленән-әле уғрылыҡтың яңы ысулдарын уйлап сығара. Эске эштәр министрлығының яуаплы хеҙмәткәре телефон аша мутлашыуҙың киң таралған бер нисә алымы тураһында һөйләне.

Беренсеһе. Заман енәйәтселәре үҙҙәрен Күп функциялы үҙәк белгесе тип таныта йыш ҡына. Зыян күреүселәрҙең береһенә, кемдәрҙер Дәүләт хеҙмәттәре порталы аша уның исеменә 2-НДФЛ белешмәһе эшләтеп алып, кредит юллаған, тип шылтыраталар. Артабан "икенсе белгес" менән тоташтыралар, уныһы ҡорбанының персональ мәғлүмәттәрен һорап ала, беҙ кешеләрҙе кредит алдыртырға, аҡса урларға маташыусыларҙан аралайбыҙ, урланған аҡсаны кире ҡайтартабыҙ, ти ул. Икенсе көнөнә шул уҡ "белгес"тең әйтеп тороуы буйынса зыян күреүсе банктың мобиль ҡушымтаһына инә һәм алдан хупланған кредитты биреүҙәренә риза икәнен раҫлай. Шулай итеп, 280 мең һум аҡсаны икенсе банк иҫәбенә күсерә, был аҡсалар аҙаҡ сит ҡалалағы банкомат аша ҡулаҡсаға әйләндерелә.

Икенсе миҫал. Ҡатын кешегә таныш түгел номерҙан ҡустыһы булып шылтыраталар. Йәнәһе, уның улы ауыр хәлгә тарыған, уға ашығыс 300 мең һум аҡса кәрәк икән. Зыян күреүсе үҙенең банк картаһынан был сумманы күсерә. Икенсе көнөнә "ҡустыһы" тағы шылтырата, тағы ла бурысҡа 200 мең һум аҡса биреүен үтенә. Ҡатын туғандарынан, күршеләренән был сумманы бурысҡа ала һәм алдаҡсылар әйткән банк иҫәбенә күсерә. Торараҡ ул ҡустыһына элек гел аралашҡан телефон номеры буйынса шылтыратып, хәлен белешә, бурысын ҡасан ҡайтарасағын һорай. Туғаны бер ниндәй ҙә аҡса һорамағанын әйтә...

Өсөнсө осраҡ. "WhatsApp" мессенджеры аша таныш булмаған номерҙан шылтыратып, үҙҙәрен Дәүләт хеҙмәттәре буйынса белгес тип танытала, персональ мәғлүмәттәрегеҙ юйылған, ә алдаҡсылар, бынан файҙаланып, һеҙҙең исемгә кредит алыуы бар, тиҙәр. Быға юл ҡуймаҫ өсөн уны Үҙәк банк белгесе менән тоташтырырға тәҡдим итәләр. Зыян күреүсе ризалаша. Үҙәк банк "белгесе"нең өйрәтеп тороуы буйынса ул мобиль ҡушымта аша "Ренессанс Кредит" банкында кредит документтары тултыра, телефонға килгән барлыҡ пин-кодтарҙы әйтә, шулай итеп, яуыздар уның банк иҫәбенән 450 мең һум аҡсаһын урлай.

Икенсе бер ҡатынға коллегаһынан 13 фотоһүрәт һәм беркетелгән файл менән "Асып ҡара әле" тигән хәбәр килә. СМС асылғандан һуң экранда "загрузить" тәҙрәһе барлыҡҡа килә. Зыян күреүсе уға баҫа һәм телефонын һалып ҡуя. Бер нисә сәғәт үткәс, банктың онлайн ҡушымтаһын тикшерә һәм үҙенең иҫәбенән 250 мең һумдан ашыу аҡсаның юғалыуын асыҡлай. Хәбәрҙе асып, ул вирус программаһын үҙенә ҡуйған, был иһә енәйәтселәргә, банк ҡушымтаһына инеп, аҡса урларға мөмкинлек биргән.

Йыш ҡына электр селтәрҙәре компанияһы вәкиле булып шылтыраталар һәм электр иҫәпләгес приборҙы алмаштырыу кәрәклеге тураһында белдерәләр. Хеҙмәттең бушлай булыуын, тейешле документтарҙы үҙҙәре еренә еткереп эшләйәсәктәрен, бының өсөн иҫәпкә ҡуйыу мотлаҡ икәнен әйтәләр. Хәҙер һеҙгә смс килә, ундағы һандарҙы беҙгә хәбәр итеүегеҙ ҙә етә, тиҙәр. Асылда, ул һандар - Дәүләт хеҙмәттәрендәге һеҙҙең битегеҙгә инеү өсөн ебәрелгән пин-код. Артабан енәйәтселәргә һеҙҙең исемдән кредит юллауы бер ни тормай.

Рәсәй почтаһынан, кеҫә телефоны операторҙарына булышлыҡ итеү хеҙмәтенән, тип тә шылтыратыуҙары ихтимал. Хатта коммуналь түләүҙәрҙең ялған квитанцияларын тараталар.

- Ни өсөн шундай ҙур сумманы хатта кредит алып бурҙарға күсерҙең, нисек алданылар һуң? - тип алданған оло йәштәге ирҙән һорайым, - ти Максим Родионов.

- Юғалып ҡалдым шул, улар бит "ФСБ"нан тип шылтыратты, һинең аҡсаны ниндәйҙер бурҙар сит илгә күсерергә йыйына икән, был бит һинең иҫәптәге аҡса, тимәк, һиңә енәйәт эше асыуҙары ихтимал, тип аңлаттылар. Шуға ашығыс рәүештә банктағы аҡсамды улар күрһәткән икенсе иҫәпкә күсерҙем, - тип яуаплай ул.

Мутлашыусылар 1 мартта үҙ көсөнә ингән Дәүләт хеҙмәттәре порталы аша кредит юллауҙы тыйыуҙы ла алдашыу өсөн ҡуллана башлаған. Шылтыратып, улар үҙҙәрен Дәүләт хеҙмәттәре хеҙмәткәрҙәре итеп таныта һәм, порталдағы шәхси кабинетта үҙ-үҙеңә кредит алыуҙы тыйыу дөрөҫ башҡарылмаған, ти. Ғаризаны төҙәтер өсөн енәйәтселәр һылтанма ебәрә - ул фишинглы: кеше уның аша үткәндән һуң, "Дәүләт хеҙмәттәре"н имитациялаған сайтҡа эләгә, битте асыу өсөн үҙенең мәғлүмәттәрен индерә һәм мутлашыусыларға эләгә. Аккаунтҡа ингәндән һуң, енәйәтселәр ситтән тороп банк ҡушымталарында авторизация үтә һәм банк иҫәптәрен ҡулға төшөрә.

Енәйәти был ысулдың икенсе варианты ла бар: ебәрелгән һылтанма буйынса гаджетҡа зарарлы программа ҡуйыла. Уның ярҙамында енәйәтселәр банк иҫәбенә ингәндә ҡулланылған смс һәм кодтарҙы уҡый.

Нишләп һуң кешеләр мутлашыусылар тоҙағына эләгә, үҙе күрмәгән, белмәгән кешегә ышана һәм ҙур суммала аҡсаны билдәһеҙ иҫәптәргә күсерә? Алдашыусыларҙың алымдары өс нигеҙгә ҡоролған. Улар һөйләшеү башлағанда уҡ кешелә ҡурҡыу хисе тыуҙыралар; ҡарарҙы уйлап ҡабул итеү өсөн ваҡыт ҡалдырмайҙар; ҡорбанға башҡалар менән аралашырға, кәңәш һорарға мөмкинлек бирмәйҙәр. Шуға уяу булырға, шикле телефондан шылтыратыуҙарҙы алмаҫҡа, алған хәлдә лә, сәйер тойолған тәҡдимдәр ишетһәгеҙ, һөйләшеүҙе дауам итмәҫкә кәрәк. Шуны беләү мотлаҡ: Эске эштәр министрлығы, Дәүләт хәүефһеҙлеге һәм башҡа дәүләт органдары бер ҡасан да телефон аша мәсьәләне хәл итмәй.

Бер кемгә лә бер ҡасан да телефонға килгән кодтарҙы әйтмәгеҙ - ошо ябай ҡағиҙәне тотоу һеҙҙе ҙур бәләләрҙән ҡотҡарыр.

**Байгилде МОТАЛЛАП.**

*ГЕРОЙҘАР ДӘҮЕРЕ*

# ҠАСЫП БУЛҺА ЛА БАРАМ...



**"Махсус хәрби операциянан ҡайтҡан егеттәргә йүнәлеш бирергә, тәжрибәм менән уртаҡлашырға ниәтләйем", - ти Ейәнсура районының Өмбәт ауылынан МХО-ла ҡатнашыусы Рәүф Баев. Олпат яугир республикабыҙ хәрбиҙәре өсөн БР Башлығы Радий Хәбиров башланғысы менән булдырылған "Башҡортостан геройҙары" кадрҙар программаһына ҡушылды.**

Рәүф Баев 2023 йылдың йәйендә "Башҡортостан" полкы составында Махсус хәрби операцияға юллана. 70-се тиҫтәһен ваҡлаған уҙаманды тәүҙә бармаҫҡа өгөтләйҙәр, хәрби комиссариаттан кире ҡайтаралар. "Ҡасып булһа ла барам, тигәйнем. Ниһайәт, минең теләгемә ҡаршы килмәнеләр, - ти сал сәсле яугир. - Егеттәр күпләп һәләк була бит, шул хәлдәрҙе телевизорҙан ҡарайым да, йөрәк әрней. Шуға ла түҙмәнем, мин дә барырға булдым МХО-ға. Сөнки аҙмы-күпме тәжрибәм бар, ҡасандыр беҙҙе йәшерен лагерҙа Афған һуғышына әҙерләгәйнеләр. Әммә 12 балалы ғаиләнән булғас, игеҙәк туға-

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**Генерал Владимир Афанасьевич Обручев**

**(1842 - 1851 йылдарҙа Ырымбур губернаторы булған)**

Ошондай бер осраҡты күрһәтеп китәйем. Эске Бүкәй урҙаһы ханы Йәнгир (Джангер) Бүкәев, батша ғали йәнәптәре Николай Павловичтан үҙенең ғаилә ағзаларын да ханлыҡ дәрәжәһендә тотоуҙы үтенә һәм уға улдарының да ошондай баһала ҡалдырылыуы хаҡында ышаныслы итеп яуап ҡайтарыла. 1849 йә иһә 1850 йылда Йәнгирҙең улы Сәхиб-Гәрәй паж корпусы курсын тамамлай һәм үҙенә тоғро булған кешеләр аша, батша ғали йәнәптәренең вәғәҙәһенә ярашлы, урҙала ошоға тиклем вафат булған атаһы урынын алыу теләге хаҡында хәбәр итә. Сәхиб-Гәрәйгә кенәз дәрәжәһе һәм лейб-гвардия гусар полкы корнеты званиеһы бирелгәс, ул күпмелер ваҡытҡа үҙенең буласаҡ бурыстары һәм урҙа хәлдәре менән танышыу өсөн Ырымбурға килергә тейеш була. Уны аҡса менән тәьмин итеү мәсьәләһе килеп тыуа. Әйтергә кәрәк, Йәнгир хан йылына ҡырғыҙҙарҙан йыйылған 300 мең һумдан ашыу ассигнацияларҙы, бер кем алдында ла отчет бирмәйенсә, тулыһынса үҙ ҡарамағына ала һәм ошо килем иҫәбенә эске идаралыҡты тота. Уның вафатынан һуң был тәртип үҙгәртелә: йыйылған зәкәт, ҡаҙна һалымы рәүешендә хөкүмәт ҡарамағына тапшырыла һәм билдәле бер сығымдар өсөн тотонола башлай; шуға күрә Обручев Сәхиб-Гәрәй кенәзгә уның дәрәжәһенә лайыҡлы түләү тәғәйенләү менән бер нисек тә ризалашмай. Лебедевтың икенсерәк фекерләүен иғтибарға алмай, үҙенекен итә һәм кенәзде 1 мең һумдан да артыҡ булмаған, бәлки, унан да аҙыраҡ сумма менән тәьмин итеү хаҡында ҡарар сығара. Эш эске урҙа буйһонған дәүләт милеге министерлығына барып етә, һәм унан беренсе бите "биш йөҙ һум" тигән һүҙҙәр менән тамамланған ҡағыҙ килеп төшә. Обручев Лебедевты саҡыртып ала һәм уның менән килешмәйенсә дөрөҫ эшләүе хаҡында белдерә. Лебедев, конвертты губернаторҙан элегерәк асып уҡығанлыҡтан, ошолай тип яуап ҡайтара: "Һеҙ уҡып бөтөрмәгәнһегеҙ, икенсе битте асһағыҙ, башҡа нәмәне күрерһегеҙ". Обручев ҡараһа, 500 һум аҡсаның бер йылға түгел, бер айға тәғәйенләнгәнен күрә. Ошонан һуң шикле осраҡтарҙа ул Лебедев әйткәндәргә ҡолаҡ һалып эш итә башлай.

Ниндәй ҙә булһа эштәргә тотонғанда һәм уларҙы үҙе белгәнсә йүнәлтеп ебәргәндә Обручев үҙен бәйһеҙ тота, быны Ырымбур казак ғәскәренең дежур штаб-офицеры, подполковник Иван Иванович Кориндың эше яҡшы күрһәтә.

Ырымбур линияһы булдырылыу менән унда почта йөрөтөүҙе тәьмин итеү, хеҙмәти йөкләмә булараҡ, барса башҡорт халҡының бурысы итеп ҡарала. Башҡорттар билдәле бер станцияларға барса сбруйы һәм оҙатып йөрөүселәре менән талап ителгән тиклем арбалы, ҡышын саналы аттар биреп, аттарҙы һәм кешеләрҙе үҙ иҫәбенә тоторға тейеш була. Ысынында башҡорттар почта сабыуҙы урындағы халыҡҡа тапшыра, ошо эшкә ризалашҡандарға аттарын биреп тороп, уларҙы ҡарау хаҡын да түләгәс, өйҙәренә ҡайтып китә.

Ошондай тәртип 1835 йыл уртаһына тиклем ғәмәлдә ҡала. Почтаны һәм юлаусыларҙы яллап эшләгән ямщиктар ташый; почта станциялары (өйҙәре) булмай; почта ташыу эше, ямщиктарҙың формаһы һәм йөк арба-саналарының үлсәмдәре буйынса билдәле бер ҡағиҙәләр ҡабул ителмәгән була - кем нимәһе бар, нисек етте, шулай ташый.

1835 йылда Перовскийҙың юллауы буйынса почта аттарын натураль рәүештә алып тороу бөтөрөлә, уның урынына башҡорттарға йән башына 80 тин ассигнация (23 тин) түләү индерелә. Почта ведомствоһы Ырымбур линияһында ла дөйөм ҡағиҙәләр индерергә теләй, әммә был осраҡта, башҡорттарҙан йыйылған барса сумма ла туранан-тура тәғәйенләнеше буйынса тотонолмағанлыҡтан, ҡыйынлыҡтарға осрай: күп кенә аҡса башҡорт ғәскәренең эске идаралығына китә.

Идаралыҡ өсөн почта станцияларын иң түбән хаҡҡа биреү отошлораҡ була, һәм ул махсус чиновниктар аша почта тотоусыларға түләнә; почта ведомствоһының шундай ниәте арҡаһында был ҡағиҙәләр урындарҙа үтәлә алмай, әммә ул линия станцияларын тотоусыларға ҡарата талаптарын үҙгәртмәй, почта сабыуын теүәл үтәтеү маҡсатында уларҙы төрлө яҡтан ҡыҫымға ала. Эш шуға барып етә, сауҙалашыу (торги) юлы менән дә, ҡарарҙар буйынса ла почта станцияларын бер кем дә түбән хаҡҡа алырға теләмәй; урындарҙағы кешеләргә станцияларҙың ысын хаҡын билдәләү мөмкин булмай: мәҫәлән, билдәле бер үлсәмле йөк арба-саналары талап ителә, урындарҙа шундайҙары булмағас, уларҙы ситтән килтерергә кәрәк була һәм башҡалар.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы бар).**

---

ным да хеҙмәт итеп йөрөгәс, мине алмаҫҡа ҡарар иттеләр. Унда ла бик барғым килгәйне. Совет заманында тыуған иле өсөн йәнен бирергә әҙер быуын үҫеп сыҡҡайны. Бөгөн беҙҙең йәштәргә шундай ҡиммәттәрҙе аңлау етмәй, улар араһында МХО-ла кемдәр менән һуғышҡаныбыҙҙы ла белмәгәндәр бар".

Рәүф Баев Ҡыҙыл Лиман һәм Луганск йүнәлешендә минометсы булып хеҙмәт итә. Батальонда иң олоһо булған яугирҙы хөрмәт итеп "Бай" позывнойы менән йөрөтәләр. Ул генерал Шайморатов ордены менән бүләкләнә. "Күбеһенсә йәш егеттәр менән хеҙмәт иттем. Һөжүмгә барған штурмовиктарға терәк булдыҡ, елкәбеҙгә һалып, снарядтар ташыйбыҙ, урынлаштырабыҙ. Һәр ҡайҙа ла командир менән кәңәшләшеп эшләнек", - ти яугир.

Рәүф Баев МХО-ға тиклем колхозда эшләй, республикабыҙ һыуһаҡлағыстарын төҙөүҙә ҡатнаша. Ә уға тиклем газ тәьминәте ойошмаларында водитель булып эшләй, Төмән өлкәһенә, Ямал-Ненец автономиялы округына һәм Украинаға газ үткәрә. "Беҙҙең егеттәр МХО-нан ҡайта башлаясаҡ, бергәләп тормошто рәтләргә, илебеҙҙе алға сығарыу өсөн тырышырға кәрәк. Был йәһәттән йәш кадрҙарҙы үҫтереү мотлаҡ. Шуға күрә "Башҡортостан геройҙары" программаһы бик ваҡытлы булдырылды. Минең тәжрибәм алғы һыҙыҡтан ҡайтҡан МХО ветерандары өсөн әһәмиәтле булыр тип ышанам", - ти Рәүф Баев.

**Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, 24 февралдә республикала МХО-ла ҡатнашыусылар өсөн "Башҡортостан геройҙары" кадрҙар проекты старт алды. Был хаҡта республика етәксеһе Радий Хәбиров хәбәр итте. Программаның маҡсаты - МХО яугирҙары араһынан яңы быуын идарасылар әҙерләү. Проектта ҡатнашыу өсөн Махсус операцияла ҡатнашҡан һәм урта һөнәри йәки юғары белемгә эйә булған һәр кем ғариза бирергә хоҡуҡлы.**

**Инсаф ХУЖАБИРГӘНОВ.**

---

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## БЕР КЕМ ДӘ, БЕР НӘМӘ ЛӘ ОНОТОЛМАҪ!

Бөйөк Ватан һуғышында яуланған Еңеү байрамына 80 йыл тулыуҙы билдәләү тарихта бик тә иҫтәлекле ваҡиға булып ҡаласаҡ. Ҡан ҡойошло, ҡәһәрле яу йылдарында СССР тип аталған тыуған илебеҙҙең барса халыҡтары ҙур юғалтыуҙарға дусар була: һуғыш яландарында, әсирлектә 12 миллионға яҡын һалдат һәм офицер һәләк була, хәбәрһеҙ юғала. Башҡортостандан фронтҡа алынған кешеләрҙең 300 меңдән ашыуы тыуған яҡтарына кире ҡайтмай. Шуға күрә ағымдағы йылды шәхсән ватаныбыҙ өсөн һәләк булғандарға арналған Хәтер һәм ҡәҙер йылы, тип атар инем. Һәр беребеҙ ҡаһарман нәҫелдәштәрен, яҡындарын, яҡташтарын ҙурлап иҫкә алһа, улар рухына салауат доғалары ҡылһа, яуҙарҙа башын һалғандарҙың рухы алдында сауаплы булырбыҙ.

Бына тағы ла шуныһы үтә мөһим: республикабыҙҙың киң матбуғат саралары Башҡортостан батырҙары хаҡында фәһемле мәғлүмәттәрҙе һәр даим халыҡҡа еткереп тора, уларға арналған китаптар баҫыла, сәнғәт әҫәрҙәре ижад ителә. Үҙебеҙҙең "Киске Өфө" гәзитендә 5 йылдан ашыу ваҡыт арауығында 112-се (16-сы Чернигов) Ленин, Ҡыҙыл Байраҡ, Суворов һәм Кутузов орденлы Башҡорт гвардия атлылар дивизияһының тулы хроникаһы - "Ҡаһарманлыҡ тарихы" тип исемләнгән яҙмалар баҫылып сыҡты. Гәзитебеҙ биттәрендә байтаҡ ҡына яугирҙарыбыҙҙың исем-шәрифтәре иҫкә алынды, уларҙың батырлыҡтарына дан йырланды.

Данлы дивизиябыҙ яугирҙарының исемдәрен мәңгеләштереү йәһәтенән Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы (конгресы) һәм Башҡортостан Республикаһының "Башҡорт энциклопедияһы" дәүләт автоном ғилми учреждениеһы тарафынан әҙерләнгән, "Шаймуратовцы - воины легендарной 112-й Башкирской кавалерийской дивизии: биографический справочник", тип аталған баҫманы билдәләп үтеү фарыз. Ошо биографик белешмәлә барлығы 2700 һалдат һәм офицер тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәт бирелә. Әммә 1943 йылдың февраленән исеме 16-сы гвардия атлылар дивизияһы тип үҙгәртелгән хәрби соединение составында хеҙмәт иткән байтаҡ ҡына яугирҙарыбыҙҙың исем-шәрифтәре ошо баҫмаға инмәй ҡалған. Был белешмә тулыландырып сығарылыр тигән ышаныста ҡалайыҡ.

Дивизиябыҙҙың 78 яугирына Советтар Союзы Геройы исеме бирелә, 5 кавалерист - Дан орденының тулы кавалеры, унан башҡа 3 860 рядовой, сержант һәм офицер илебеҙҙең орден һәм миҙалдары менән бүләкләнә. Ватан азатлығы өсөн йәнен дә йәлләмәгән, Дон ярҙарынан Эльбаға тиклем меңәр саҡрым арауыҡта мәңгелек төйәген тапҡан ҡаһармандар хаҡында беҙ барыһын да беләбеҙ, тип әйтә алмайбыҙ әле. Әүәл илебеҙҙә Бөйөк Ватан һуғышы менән бәйле "Бер кем дә, бер нәмә лә онтолмаған" тигән лозунг популяр булды. Ә онотола барған исемдәр ҙә юҡ түгел. Дивизиябыҙ яугиры, Баҡалы районының Иҫке Соҡор ауылы егете, 294-се полктың 3-сө эскадроны политругы Ҡәйүмов Мирғәсим Ҡәйүм улы 1942 йылдың 29 сентябрендә хәҙерге Липецк өлкәһенең Михайловка ауылы янында дошман дзотының амбразураһын күкрәге менән ҡаплай. Уның тиңһеҙ ҡаһарманлығы ваҡытында тейешлесә баһаланмай ҡалған. Ошондай баһадирҙарыбыҙ үҙ исемдәрен тарихҡа ал ҡандары менән яҙып ҡалдырған. Улар хаҡындағы изге хәтирәләр хәҙерге замандаштарыбыҙҙың да, киләсәк быуындарыбыҙҙың да күңелдәрендә һаҡланыр тигән өмөттә ҡалайыҡ. Рафаэль Сафиндың һәләк булғандар исеменән яҙған шиғри мөрәжәғәте лә ошо хәҡиҡәткә дәлилдер:

*"Һеҙҙән беҙгә бер ни кәрәк түгел,*
*тик шуға һеҙ ҡолаҡ һалығыҙ:*
*онотмағыҙ беҙҙе, онотмағыҙ!*
*Йышыраҡ беҙҙе иҫкә алығыҙ!*

*Ҡояшлы ла булыр көндәрегеҙ,*
*аяҙ күкте ҡаплар болот та.*
*Онотмағыҙ беҙҙе! Онотһағыҙ,*
*ҡайталмабыҙ ҡаҙҙар булып та".*

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Аҙағы).**

*✓ Ауылда тыуып үҫкән кешегә ҙур ҡалала үҙ кеше булып китер өсөн иң тәүҙә үҙеңдә күрһәтә белеү фарыҙдыр, икенсенән, ҡурҡмаҫҡа өйрәнеүең дә кәрәк.*



# ӨФӨ - ӘБДЕЛНАСИР

**Тамырҙары Хәйбулла районының Әбделнасир ауылынан булған был быуын вәкилдәре һәр ҡайһыһы төрлө юлдар менән баш ҡалабыҙ Өфөгә килеп яҙмыш бәйләгән, юғары уҡыу йортонда белем эстәгән, хеҙмәт юлын тапҡан, ғаилә ҡорған, балалар үҫтереп, тамыр йәйгән. Альмира Рәдиф ҡыҙы ҠОЛДӘҮЛӘТОВА-ЮЛДЫБАЕВА - бизнес леди, "IQ -лидер" уңышлы балалар мәктәбе етәксеһе, Айнур Мансур улы ҒҮМӘРОВ - химия фәндәре кандидаты, Республика инженер лицей-интернаты уҡытыусыһы, Башҡорт дәүләт медицина университетының дөйөм химия кафедраһы доценты, Башҡортостан Республикаһы Олимпиада хәрәкәте наставниктары ассоциацияһы наставнигы, Илдар Морат улы ҒӘБИТОВ - инженер механик, Гөлсәсәк Айҙар ҡыҙы ХӘЙРУЛЛИНА-ФӘЙЗУЛЛИНА - Шамонино ауылының "Аҡбуҙат" балалар баҡсаһында музыка етәксеһе, Айгөл Риф ҡыҙы МИҢНУЛЛИНА - ультрамарафонсы, марафонсы. Уларҙы берләштереүсе, үҙҙәре әйткәнсә, баш ҡалабыҙҙың "Әбделнасир" ауылына туплаусы, бер маҡсатлы итеүсе көс, моғайын да, халҡыбыҙ яҙмышы өсөн борсолоуҙыр. Хәйер, быларҙың барыһы ла улар менән ҡорған әңгәмәлә.**

**Егеттәр, ҡыҙҙар, тыуған ауылығыҙҙан ҡасан сығып киттегеҙ, нисек Өфөгә килеп төпләндегеҙ, баш ҡалабыҙ һеҙҙе нисек ҡаршы алды? Ниндәй ауырлыҡтар аша үтергә тура килде?**

**Альмира:** Мин Әбделнасирҙа тыуҙым. Алты йәшкә тиклем шунда йәшәнек тә, Целинный ҡасабаһына күстек. Унда балалар баҡсаһы, ҙур мәктәп бар ине. Артабан, 2003 йылда, Сибай институтын тамамлап, ҡулға диплом алғас, Өфөгә килдем. Өфөлә мин билдәле йәмәғәт эшмәкәре һәм эшҡыуар, отставкалағы милиция полковнигы Риф Шәрифрахман улы Иҫәнов етәкләгән "Урал" муниципаль-унитар предприятиеһының кадрҙар бүлегендә белгес булып эш башланым. Ул минең беренсе директорым, уҡытыусым да булды. Тәүге осорҙа Өфө миңә шул тиклем ҙур, кешеләре бихисап күп булып күренде. Әммә бәхетемә күрә Риф ағай һымаҡ кешеләрҙең осрауы Өфөнө яулауҙа ҙур терәк булды.

Ике йылдан Риф ағайҙы "Урал" башҡорт халыҡ үҙәгенә рәйес итеп һайланылар һәм мин Үҙәктең Ленин урамындағы офисында эш башланым. Ике йыл "Урал" үҙәгендә эшләгәс, "Халыҡтар дуҫлығы" йортона директор урынбаҫары булып эшкә күстем һәм унда ун алты йыл хеҙмәт иттем. Унда эшләгәндә биш директор алмашынды. Бигерәк тә Шәрифулла Алсынбаев, Вилмир Аҙнаев, Азат Ибраһимов кеүек шәхестәр менән ижтимағи эштә ҡайнау мине Өфө стихияһына йылдам алып инде, унда эшләгәндә бихисап кешеләр менән таныштым. Шул йылдарҙа күп проекттар тормошҡа ашырылды һәм беҙҙең командабыҙ төп ойоштороусылар булды. Мине уратып алған һәм илһамландырған кешеләргә рәхмәтлемен.

2009 йылда Рушан менән өйләнештек, беҙҙең ике ҡыҙыбыҙ бар. Шамонино ауылы буйынса матур ғына программа тормошҡа ашырыла башлағас, шунда эләгеп, уйламағанда өйлө лә булдыҡ. Бер генә урамлы бәләкәй генә Әбделнасир ауылынан сыҡҡан кеше өсөн был ҙур уңышҡа өлгәшеү булды.

Ауылда тыуып үҫкән кешегә ҙур ҡалала үҙ кеше булып китер өсөн иң тәүҙә үҙеңдә күрһәтә белеү фарыҙдыр, икенсенән, ҡурҡмаҫҡа өйрәнеүең дә кәрәк. Был йәһәттән атайымдың һәм әсәйемдең кәңәштәре ярҙам итте. Сөнки улар беҙ бәләкәй саҡта: "Бер нәмәнән дә ҡурҡмағыҙ, кешеләргә кешелекле булһағыҙ, улар һеҙҙе ситкә тибәрмәҫ", - тип өйрәтә торғайны. Хәҙер үҙем педагог-психолог булараҡ, атайымдың кәңәштәренең мөһимлеген яҡшы аңлайым. Тап шул кәңәштәр ярҙамында беҙ Өфө кешеләре булып киттек.

Хәҙер үҙебеҙҙең бизнесыбыҙ бар, матур итеп балалар менән эшләйбеҙ. Кеше үҙен, ниндәйҙер ауырлыҡтарҙан ҡурҡып, сикләргә тейеш түгел.

**Айнур:** Мин 1999 йылдан алып Өфөлә йәшәйем. Целинныйҙа алтынсы класты тамамлағандан һуң Республика башҡорт-төрөк лицей-интернатына уҡырға индем. Целинный мәктәбендә отличник инем, лицей-интернатта ла тик отличниктар уҡый ине. Һигеҙенсе класта уҡығанда химия фәненең үҙемдеке икәнен аңлап ҡалдым. Ҡайны предметты үҙеңдеке итеп ҡабул итеүең уҡытыусыңа бәйле, әлбиттә. Минең ҡыҙыҡһыныуыма ла химия уҡытыусыһы, Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының халыҡ уҡытыусыһы Әғәҙуллина Лиза Ҡыям ҡыҙы сәбәпсе булды. Уҡытыусым ул саҡта 42-се лицейҙа эшләп, беҙҙең лицейға дәрес бирергә генә килеп йөрөнө. 2004 йылда мин республика олимпиадаһында 3-сө урын яулап, тәүге еңеүгә өлгәштем. Ул саҡта медицина университетына уҡырға инеүе бик ауыр ине һәм лицейҙы тамамлағас, атай-әсәйемдең өгөтләүе буйынса Башҡорт дәүләт университетының химия факультетына имтиханһыҙ уҡырға индем. Уны тамамлағас, 2009 йылда, тыуған лицейыма химия уҡытыусыһы булып эшкә ҡайттым.

Шул саҡта, лицейҙа уҡытыуҙан тыш, параллель рәүештә Өфө ғилми үҙәгенең Органик химия институтына аспирантураға индем. 2016 йылда кандидатлыҡ диссертацияһы яҡланым. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, мин үҙемде барыбер ҙә мәктәптә эшләгән химия уҡытыусыһы итеп һанайым. Күп кенә уҡыусыларым медицина буйынса юғары уҡыу йорттарына, классик вуздарҙың химия факультеттарына уҡырға инде. Араларында Мәскәү дәүләт университетында, Мюнхенда, Америкала диссертация яҡлаусылар бар.

Бер саҡ башыма идея килде: беҙгә уҡыусыларыбыҙҙы ситкә ебәрергә түгел, ә Өфөнө фән үҙәге итеп төҙөп, уларҙы үҙебеҙҙә ҡалдырырға кәрәк. Был идеяға юғары уҡыу йорттары ҡушылды, улар үҙҙәренең стипендияларын булдырҙы. 2018 йылда олимпиадала еңгән күп кенә уҡыусыларым Өфө нефть университетына уҡырға инде. Улар араһында Халыҡ-ара Менделеев олимпиадаһында Алтын миҙал яулаған Учалы егете Тимур Маннанов та булды. Шул саҡ технология факультеты деканы Рәхимов мине лә уҡыусыларым менән бергә уҡытырға саҡырҙы. Базовый һаналған был факультетты ваҡытында Мортаза Рәхимов тамамлаған. Мин ул кафедрала өлкән уҡытыусы булып өс йыл эшләнем. Шул уҡ ваҡытта параллель рәүештә үҙем уҡыған лицейҙа хеҙмәт иттем. Әле булһа шунда эшләйем.

Шул уҡ 2018 йылда олимпиадалар хәрәкәтенең ассоциацияһын төҙөнөк, мин уның учредителе булып сығыш яһаным. Лиза Ҡыям ҡыҙының өлгөһөндә студенттар командаһын барлыҡҡа килтерҙек. Унда хәҙер минең уҡыусыларымдың уҡыусылары ҡатнаша, улар араһында Вадим Харисов та бар. Ул Башҡортостан йыйылма командаһы өсөн яңы таланттар әҙерләй. Үткән йыл медицина университеты ла таланттар әҙерләү буйынса көрәшкә ҡушылып, эшкә саҡырҙы. Хәҙер мин химия буйынса республика йыйылма командаһының баш тренеры булып торам. Был йүнәлештә беҙ Татарстан һәм башҡа төбәктәр менән конкуренциялабыҙ.

**Айнур, әгәр ҙә тормош юлыңда Лиза Ҡыям ҡыҙы осрамаған булһа, яҙмышың башҡасараҡ булыуы мөмкин инеме?**

- Моғайын да, барыбер уҡытыусы булыр инем, әммә шундай тиҙлектә уңыштарға өлгәшә алмаҫ инем. Асылда, педагогик династиялар ҡан принцибы буйынса тапшырыла, дауам ителә. Ә беҙҙең Лиза Ҡыям ҡыҙы менән рухи принципта ҡоролған династия килеп сыҡты. Уның уҡыусылары күп булды, әммә методик китапхана асҡысын ул шәхсән миңә тапшырып ҡалдырып китте. Ул үткән йыл 83-сө йәшендә баҡыйлыҡҡа күсте. Уға үҙен алмаштыра алмауым хаҡында ла әйткәйнем. Шуға күрә уны алыштырыр өсөн бер нисә уҡыусым менән команда барлыҡҡа килтерҙем. Тимәк, уның эше әле лә дауам итә.

**Илдар:** Целинный урта мәктәбен тамамлағас, атайым: "Һин Өфөгә уҡырға бараһың, ағайың да унда уҡып йөрөй", - тип, мине баш ҡалаға ҡоҙаланы. Ауыл хужалығы институтының механика факультетына уҡырға индем. Ҡулға диплом алғас, ауылға ҡайтып китергә теләк булһа ла, Өфөлә тороп ҡалдым. Өсөнсө курста уҡ баш ҡалала ауыл хужалығы техникаһын хеҙмәтләндереү буйынса эш урыны тапҡайным инде. Ике йыл эшләгәс тә, районға ҡайтып, шул уҡ йүнәлеш буйынса эшләп алдым. Яҙмыш кире Өфөгә алып килде һәм ҡалала тыуып үҫкән ҡыҙға өйләндем. Ҡыҫҡаһы, Өфөгә кейәү булып төштөм. Институтта уҡыған йылдар менән бергә иҫәпләһәм, Өфөлә сирек быуат ғүмер һөрәм. Әллә ҡаланың ситендә торғанғамы, эштәрем ҡала урамына түгел, баҫыуҙарға бәйле булғас, үҙемде ҡала кешеһе тип һанамайым да. Күп эштәрем тыуған яҡтарыма, Хәйбуллаға, Урал аръяғына бәйле. Ул яҡтарға күп йөрөргә тура килә.

**Гөлсәсәк:** Мин дә Әбделнасирҙа тыуып үҫтем. Бейеү маһирҙары Фәйзуллиндар затынанмын. Олатайым Фәйзуллин Айытбай Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт бейеү ансамблендә солист булып эшләгән, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы. Хәҙер ул да Шамонино ауылында йәшәй. Туғандарым араһынан Өфөгә иң һуңғы килгәне миндер, баш ҡалаға килеүемә 7 йыл ғына әле. Стәрлетамаҡта мәҙәни-ағартыу техникумын тамамлағандан һуң мине Целинныйға эшкә ебәрҙеләр. 2005-2006 йылдарҙа мәктәптә сәнғәт ойоштороусыһы булып бер йыл эшләгәндән һуң, Целинныйҙың үҙем өсөн бәләкәй икәнлеген тоя башланым, конкурстарҙа ҡатнашҡы, уңыштарға өлгәшке килә. Балаларға бер бейеү өйрәтеп, Аҡъярға барып сығыш яһап ҡайтыу ғына миңә әҙ тойола ине. Күңелем оло сәнғәт көҫәй. Артабан Сибайҙа параллель рәүештә өс урында: профессиональ белем биреү лицейында, медицина лицейында, сәнғәт йортонда йәштәрҙе бейергә өйрәттем. Бейеү коллективтарым республика, Рәсәй кимәлендәге төрлө конкурс-фестивалдәрҙә еңеүсе, лауреат булды.

Артабан кейәүгә сыҡҡас, Әбйәлил районының Әхмәт ауылында йәшәнек. Ике балабыҙ булғас, кире Сибайға күсергә булып, ипотекаға фатир алырға уйланыҡ. Документтар тапшырһаҡ та, нишләптер, банктар хупламаны. Бәхтиһәң, бындай ҡаршылыҡ

## Йүгереп кенә

беҙгә Өфөгә килергә сәбәп булған икән. Сөнки Өфөгә килгәс, банктар ипотекабыҙҙы хупланы. Ирем ауылда йәшәүҙе хуп күргәс, йортто Шамонинонан алдыҡ. Ҡыҫҡаһы, ауылдан ауылға күстек. Ауылдағы балалар баҡсаһына ла бейеү өйрәтеүсе кәрәк булып сыҡты. Шул мәлдән алып "Аҡбуҙат" балалар баҡсаһында эшләп йөрөйөм. Балаларыбыҙ ҙа шул балалар баҡсаһына йөрөп, хәҙер мәктәптә уҡыйҙар.

**Айгөл:** Минең әсәйем сығышы менән Әбделнасирҙан. Целинныйҙа йәшәнек. 1997 йылда Өфөгә Республика иҡтисад лицейына уҡырға килдем. Унда ике йыл уҡып сыҡҡас, Өфө нефть техник университетының инженер-механиктар әҙерләү факультетына уҡырға индем. Университеттан һуң нефтехимия тармағына ҡараған фирмала менеджер булып эшләй башланым. Буласаҡ тормош иптәшемде университетта осраттым, хәҙер өс бала үҫтерәбеҙ.

Бала саҡтан спортҡа ылыҡтым. Мәктәптә уҡығанда йүгереү, саңғы буйынса призлы урындар алып, район үҙәге Аҡъярҙа Целинный мәктәбе өсөн сығыш яһаным. Артабан Баймаҡта зона ярыштарына ла бара башланым. Унда ла алдынғыларҙан булдым. Өфөлә лицейҙа уҡығанда ла команда өсөн йүгерҙем, саңғыла шыуҙым.

Балаларым тыуғас, 20 йылға йүгереүем туҡталып торҙо. Өсөнсө балама бер йәш тулғанда кире йүгерә башланым. Тәүҙә 5 саҡрымға йүгерһәм,

***✓ Ун бер йыл ауыл мәктәбендә уҡып, туған әҙәбиәтте дәрестә өйрәнеп, башҡортса һөйләшә лә белмәй инем. Өфөгә килеп, саф башҡортса һөйләшкән егеттәр менән аралашып, башҡортса һөйләшергә өйрәндем.***

# АРАҺЫ

## бараһы...



***Әле килеп техник прогресс шундай тиҙлектә бара: бер нисә йылдан шул уҡ Хәйбуллаға ике-өс сәғәттә капсулаға ултырып, поезд менән осоп барып етергә мөмкин буласаҡ. Ул осраҡта мин мотлаҡ рәүештә Хәйбуллала, шул уҡ Әбделнасирҙа йәшәйәсәкмен. Мин ауылдан Өфөгә өс-дүрт көнгә килеп, ял көндәренә тыуған яғыма ҡайтасаҡмын. Был көн ҡотолғоһоҙ рәүештә киләсәк. Хәҙер деурбанизация процесы башланды. Элек кешеләр Урал аръяғынан, Ирәндек буйынан белем алыр өсөн, тормош кимәлен күтәрер өсөн ҡалаларға юлланһа, хәҙер кире ағым башланасаҡ. Ул сағында шул уҡ концерт, спектакль премьераһын ҡарарға Өфөгә генә түгел, Ирәндек буйҙарынан шул уҡ Мәскәүгә лә барып, шул уҡ көндә кире әйленеп ҡайтыу мөмкин буласаҡ. Ул сағында, һеҙ әйткәнсә, фән үҫеше ауылды һаҡларға булышлыҡ итәсәк.***

яйлап арттыра барып, 21 саҡрымға еткерҙем. Иң яратҡан дистанциям да - 21 саҡрым. Тәүге тапҡыр Өфө халыҡ-ара марафонында ҡатнашып, 42 саҡрым йүгереп, өсөнсө урынды яуланым. Был араны 3 сәғәт тә 28 минутта үттем һәм 2-се разрядлы спортсы булып киттем. Шәхси тренерым булмаһа ла, үҙаллы әҙерләнеп, төрлө дистанцияларҙа призлы урындар алып торам, Аллаға шөкөр. Үткән йәй Өфөлә үткән ҙур масштаблы ярышта ҡатнашып, 34 градуслы эҫелә 64 саҡрым үттем. 5 йүгереүсе араһында ҡатын-ҡыҙҙарҙан мин генә инем. Финишҡа өсәү генә килеп еттек. Алдағы йылдарҙа Мәскәү, Санкт-Петербург, Сочи ҡалаларында һәм Төркиәлә марафон дистанцияһында ҡатнашырға ниәт бар, Аллаһ бойорһа.

**Айгөл, һиңә шундай һорау: йүгергән саҡта башыңда ниндәй уйҙар ҡайнай, ғөмүмән, ул саҡта нимәләр хаҡында уйлап буламы**

- Нәҡ шуның өсөн дә яратам мин йүгереүҙе. Үҙ-үҙең менән диалог башлана. Уйҙар үҙ урынын таба. Төрлө һорауҙарға яуап табырға мөмкинһең.

**Ирең, балаларың йүгереүеңә нисек ҡарай?**

- Башта улар мине ситтән генә күҙәтһә, тәүҙә балаларым, аҙаҡ ирем дә миңә эйәреп йүгерә башланы. Күнекмәгә бишәүләп сығып китәбеҙ. Ярыштарҙа ла бишәүләшеп ҡатнаша башланыҡ. Мәҫәлән, 2023 йылда Өфөлә уҙған халыҡ-ара марафонда ҡатнашып, бишебеҙгә 47 саҡрым үттек.

**Барығыҙға ла шундай ҡыҙыҡлы һорау: бына һеҙ бишәүләшеп Өфөнән тыуған ауылығыҙ Әбделнасирға тиклем йүгереп ҡайта алыр инегеҙме?**

**Айнур:** Быны тормошҡа ашырыу анһат. Бының өсөн иң тәүҙә маршрут төҙөп, юлда туҡланыу, йоҡлау урындарын билдәләп сығырға ғына кәрәк.

**Айгөл:** Яндекс буйынса ҡарағанда Өфөнән Әбделнасирға 467 километр. Әгәр ҙә 6 көндә үтәм тиһәң, көнөнә 77 саҡрым йүгерергә кәрәк буласаҡ.

**Илдар:** Донъяла бит эшләй алмаҫтай эштәр булмай, маҡсат ҡуйһаҡ, булдырабыҙ.

**Гөлсәсәк:** Ҡайҙалыр уҡығайным: атаҡлы бейеүсебеҙ Мөхәмәт Иҙрисовтың сәхнәлә бейегән аҙымдарын ғына иҫәпләгәндә лә, Башҡортостандан Парижға барып етергә мөмкин булыр ине. Йүгереүгә килгәндә, аяҡтар һау булһа, үтмәҫлек аралар булмайҙыр ул.

**Альмира:** Мөжәүир хәҙрәт Өфөнән Баймаҡҡа йәйәүләп бер аҙнала ҡайтҡан, тиҙәр. Беҙ, күмәкләһәк, биш көндә ҡайтып етербеҙ, тимен.

**"Теләһә ниндәй талант үҙ кимәлендәге аралашыу мөхитендә йәшәмәһә, һулый", тигән Флобер. Һеҙ Өфөгә килеп, үҙегеҙҙең тамырығыҙҙан айырылдыҡ, тип иҫәпләмәйһегеҙме?**

**Илдар:** Киреһенсә булды шикелле. Мин ун бер йыл ауыл мәктәбендә уҡып, туған әҙәбиәтте дәрестә өйрәнеп, аңлауын аңлаһам да, башҡортса һөйләшә лә белмәй инем. Өфөгә килеп, саф башҡортса һөйләшкән егеттәр менән аралашып, улар менән бергә йәшәп, башҡортса һөйләшергә өйрәндем.

Хәҙер бына Сибайға, Хәйбуллаға, Баймаҡҡа командировкаға ҡайтһам, минең һөйләшкә ҡарап күптәр: "Һинең диалектың бер кешенекенә лә оҡшамаған, ҡайһы яҡтың башҡорто булаһың?" - тиҙәр. Мин "Целинный" тигән һүҙ урынына "Сиҙәм" тиһәм, бер Хәйбулла кешеһе: "Беҙҙең хәйбуллалар улай һөйләшмәй", - тип аптырай. Күрәһең, мин Өфөгә килеп, әҙәби башҡорт телендә һөйләшергә өйрәнгәнмендер инде.

**Альмира:** Мин дә Өфөгә килеп башҡортса һөйләшә башланым. Төҫөмә ҡарап, мине татар милләтенән тип әйтеүселәр ҙә осрай. Саф башҡортса һүҙ ҡушһам, тағы аптырайҙар.

**Илдар:** Еңгәйҙәр, ҡайынбикәләр, ҡайынеңгәләр, ҡоҙалар, ҡоҙасалар тигән һүҙҙәрҙе лә тәүге тапҡыр ауыҙ тултырып Өфөлә әйтә башланыҡ.

**Гөлсәсәк:** Мөхит тигән һүҙегеҙ менән тулыһынса килешәм. Халыҡ та бит юҡҡа ғына: "Кемдең арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырларһың", - тимәгән.

**Айнур, һиңә химик булараҡ һорауым бар. Тургеневтың "Атайҙар һәм балалар" романы геройы Базаров "Уртаса химик һәр бер шағирҙан егерме тапҡыр файҙалыраҡ", тигән. Беҙ ауыл мәктәбендә хатта химия дәрестәрен дә башҡортса уҡыныҡ. Бына һин химия дәресен башҡортса үткәрә алыр инеңме?**

- Башҡортса үткәрә алмайым, ә бына төрөксә, инглиз телендә үткәрер инем. Сөнки мин үҙем дә ун йыл элек Бөрйән районы һылыуына өйләнгәндән һуң ғына башҡортса һөйләшергә өйрәндем. Совет осорондағы химия дәреслектәренең авторҙары башҡорттар булмаған, шуға күрә лә уларҙы башҡорт теленә тәржемә генә иткәндәрҙер. Әгәр ҙә революцияға тиклем иҫке төрки телендә химия дәреслектәре сыҡҡан булһа, химия дәресен башҡортса үткәреү күпкә еңелерәк булыр ине. Шуға күрә яһалма рәүештә терминология булдырһаҡ, ул камил булмаҫ ине.

Интернетта һис юғы бер класс өсөн химиянан башҡортса контент бармы? Юҡ. Мин был мәсьәләне күтәреп матбуғат баҫмаларына барып ҡараным, миңә 90-сы йылдарҙа был йәһәттән проблема булмауы, хәҙер улай түгеллеге хаҡында зарландылар ғына. Минең ҡарсәйемдең яратҡан һүҙе булған: "Минең менән минеңсә, нимес менән нимессә һөйләш", тигән ул. Үкенескә күрә, минең химиянан башҡортса белемем "баҡыр-көкөрт комбинаты" тигәндән ары уҙмай. Әгәр ҙә ихтыяж булһа, мин бар тырышлығымды һалып, химиянан бер курс башҡортса дәрестәр үткәрер инем. Беҙ бер ваҡытта ла ризыҡты десерттан башлап ҡабул итмәйбеҙ. Иң тәүҙә базовый аҙыҡты ҡабул итәбеҙ ҙә, һуңынан ғына десертҡа тотонабыҙ бит.

**Химия дәресен башҡортса үткәреү бер нәмә, ә ниңә бөгөн башҡорт балаһының теле урыҫса асыла һуң?**

**Айнур:** Был ата-әсәләрҙең позицияһылыр, уларҙың кәмһенеү комплексынан килеп сығалыр. Бала - ул һығылмалы пластик материал. Уны ниндәй мөхиткә урынлаштыраһың, ул шуға әүерелә.

**Альмира:** Беҙ Шамониноға күскәндә "Росинка" тигән балалар баҡсаһы эшләй башланы. Унда бер башҡорт төркөмө лә булманы. Беҙҙең Сәлимә ҡыҙыбыҙ башҡортса белә ине, балалар баҡсаһында теле урыҫсаға күсте. Ырымбур башҡорто булған ирем Рушан менән исемлек тотоп алып, адрестар буйлап йөрөргә тотондоҡ. Шунда атаһы ла, әсәһе лә башҡорт булған йәш ғаилә башлыҡтары: "Беҙҙең балаларыбыҙ русса һөйләшәсәк, сөнки үҙебеҙ акценттан азат түгелбеҙ", - тинеләр. Һәр бер йортта түгел, әлбиттә, өй аша беҙгә ошо һүҙҙе әйттеләр. Беҙгә, бигерәк тә Ырымбурҙа тыуып үҫеп, башҡорттарҙы эҙләп Башҡортостанға килгән иремә был һүҙҙәрҙе ишетеүе бик ауыр булды. Ул хатта уларҙың шулай тип әйтеүҙәренә ғәрләнде. Беҙ барыбер ҙә юғалып ҡалманыҡ, ике башҡорт төркөмөнә балалар туплай алдыҡ. Һәм был төркөмдәр әле лә яҡшы эшләй. Шуға күрә мин Айнурҙың һүҙҙәре менән килешәм: ата-әсәләрҙең кәмһенеү комплексы арҡаһында балалар манҡорт булып үҫә.

**Илдар:** Балаға ниндәй китапты уҡытһаң, ул шул китап телендә һөйләшә башлай. Тимәк, беҙгә балаларыбыҙҙың зауығына тура килгән, уға ҡыҙыҡлы булған китаптар, йәнһүрәттәр сығарырға кәрәк.

**Гөлсәсәк:** Мин балалар баҡсаһында бишенсе йыл эшләйем. Мин килгән йылда балалар башҡортса матур һөйләшәләр ине. Һуңғы ике йылда ата-әсәһе башҡорттар булған ғаиләнән дә балалар русса һөйләшеп киләләр. Өс йәшлек балаларға йыр өйрәткәндә ҡайһы бер һүҙҙәрҙе русса аңлатырға тура килә. Яңыраҡ ауылдан күсеп килеүселәрҙең балалары башҡортса яҡшыраҡ һөйләшә барыбер ҙә.

**Айгөл:** Мин бер нисә ярышта беҙҙең башҡорт милли биҙәүесе булған селтәр кейеп йүгерҙем. Хәҙер ҙурыраҡ араға, 42 саҡрымға йүгерә башлағас, махсус рәүештә селтәр төшөрөлгән футболка эшләтеп алдым. Хатта башҡортса интервью биргәнем дә бар ярыш барышында, сөнки ул ваҡытта милли биҙәүесле кейемдә ҡатнашыусылар һирәк ине. Яңыраҡ бер проектта волонтер булып ҡатнаштым. Унда шуны аңланым: хәлдәребеҙ ул тиклем үк хөрт түгел икән. Хәҙер башҡортса интонацияларҙы дөрөҫ ҡуйып, балаларҙы башҡортса һөйләшергә өйрәтер өсөн йәнһүрәттәр төшөрөүселәр барлыҡҡа килде. Шундай программа ла бар бит: ниндәй генә текст булмаһын, ютобта шул һүҙҙәр башҡортсаға тәржемә ителә. Иҫ китмәле проект!

**Альмира:** Беҙҙең ҡыҙҙарыбыҙ Мостай Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһында уҡый. Нурания ҡыҙыбыҙ былтыр "Шаяниум"да ҡатнашты һәм башҡортса һөйләшергә, аралашырға теләге ныҡлап уянды. Апаһы Сәлимә быйыл сығыш яһарға әҙерләнә. Балаларға шундай ҡыҙыҡлы проекттар кәрәк, бындай саралар аша улар туған теленә тағы ла нығыраҡ ылыға.

**Гөлсәсәк:** Ике туған һеңлемдең ире икенсе милләттән. Һеңлем малайҙарын балалар баҡсаһының башҡорт төркөмөнә бирергә булғас, ире быны теләмәне һәм малайҙары рус класында уҡый башланы. Бер ай уҡығас, малайҙары өйҙәренә ҡайтып һүгенгән. Әсәһе: "Ҡайҙан өйрәндең?" - тип һораһа, теге балалар баҡсаһында бер малайҙан отоуын әйткән. Һүгенеүе икенсе, өсөнсө тапҡыр ҡабатланғас, малайҙарын башҡорт төркөмөнә бирҙеләр һәм ул һүгенеүҙән туҡтаған.

**(Дауамы 10-сы биттә).**

*✓ Әле килеп техник прогресс шундай тиҙлектә бара: бер нисә йылдан шул уҡ Хәйбуллаға ике-өс сәғәттә капсулаға ултырып, поезд менән осоп барып етергә мөмкин буласаҡ.*



ӨФӨЛӘРҘӘ БАР БЕР АУЫЛ

# ӨФӨ - ӘБДЕЛНАСИР АРАҺЫ

## Йүгереп кенә бараһы…

(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

**Беҙ барыбыҙ ҙа ауылдарыбыҙҙы ҡалдырып, Өфө кешеһе булып киттек, әммә ауылдарыбыҙ йәйләп юҡҡа сыға башламаҫмы? Иң тәүҙә ауылдарҙан йәштәр китә, улар киткәс, балалар һаны кәмеү һөҙөмтәһендә мәктәптәр ябыла. Ауылдарыбыҙҙы нисек итеп һаҡлап ҡалырға мөмкин тип иҫәпләйһегеҙ? Әллә был хәл кире ҡайтарып булмаҫлыҡ күренешкә әүерелдеме?**

**Илдар:** Беҙ был мәсьәлә буйынса егеттәр менән йыш һөйләшәбеҙ. Туғанлыҡ принцибы буйынса ҡоролған ауылдарыбыҙҙың юҡҡа сыға барыуында иҡтисади сәбәптәрҙән тыш, башҡалары ла бар. Шул уҡ ике, өс туғандарҙың да аралашмауы, араларҙың һыуыныуы, балаларының хатта бер тапҡыр ҙа осрашмауы хафалы күренеш. Әгәр ҙә бер ауылда торһаҡ, ҡайнашып йәшәһәк, бәлки, улай булмаҫ ине.

Минең ауылда ҡалырға ниәтем бар ине, әле лә юҡ түгел. Мәҫәлән, минең ҡала эсендә бер эшем дә юҡ, үҙем ҡалала йәшәһәм дә. Ауылда йәшәп тә әлеге эштәремде башҡарырлыҡ мөмкинлектәрем бар. Бәлки, ҡасандыр, бәлки, яҡын арала ҡайтып та китермен, кем белә.

Дөрөҫөн әйткәндә, мине ауылдан үҙем теләп түгел, көсләп сығарып ебәрҙеләр. Әммә шул саҡта ла ситтә белем алып, һөнәр үҙләштереп, ауылыма кире ҡайтып, ауылдаштарыма, туғандарыма, йәмәғәтселеккә, мәхәлләгә файҙалы кеше булырға тигән ниәтем дә бар ине.

Ауылда фермерҙар мыжый, эшләрлек кеше юҡ, тиҙәр. Мин уларға: "Ауылда эшләрлек кешеләр булһын өсөн нимәләр эшләнегеҙ, ни өсөн ундайҙарҙы үҙегеҙ тәрбиәләмәйһегеҙ?" - тигән һорау бирәм. Әбит Башҡорт дәүләт аграр университетында ауылда эшләрлек кешеләрҙе йәлеп итергә өйрәтәләр, уҡыталар. Быны өсөн фәндең иң һуңғы ҡаҙаныштарын файҙаланалар. Тимәк, был йүнәлештә ауылда бер нәмә лә эшләнмәй. Әбеҙ иһә, үҙебеҙ бер нәмә лә эшләмәйенсә, "ауылда эшләрлек кеше юҡ" тип кенә әйтәбеҙ ҙә, белгестәрҙе ҡүктән төшөр тип көтөп ултырабыҙ. Элек ҡала балалары икмәкте ағас башында үҫә тип белһә, хәҙер иһә ауыл балаларының күбеһе икмәктең ҡайҙа үҫкәнен әйтә алмай. Шулай уҡ һыйырҙың нисек һауылғанын да ауыл балаларының күбеһе белмәй. Ауыл малайҙарының утын яра белмәүенә лә хәҙер аптырарлыҡ түгел.

**Айнур, фәнде үҫтереү юлы менән хәҙерге ауылды һаҡлап ҡалып буламы?**

**Айнур:** Бында, киреһенсә, фәндең үҫеше урбанизация процесын шәбәйтә генә. Техник прогресс фән артынан эйәреп бара. 1954 йылда Хәйбулла далаһында энтузиаст-коммунистар Целинный ауылына нигеҙ һалған. Совхоз үҙәгендә йәшәүселәрҙең һаны бер мәл ике меңгә яҡын кешегә барып еткән. Хәҙер иһә ауыл хужалығы техникаһы менән компьютер аша идара итәләр, ерҙе һөрөү, сәсеү, уңыш йыйыу техникаларының заманса моделдәренең гектар ҡеүәте йөҙҙәрсә тапҡыр артты һәм ауыл хужалығында эшләр өсөн кеше күп талап ителмәй. Прагматик яҡтан ҡарағанда, элек ауыл ҡаланы туйындырыу өсөн кәрәк булды. XX быуатта иһә ауыл хужалығы индустрияләштырылды, әммә был процесс оҙайлы барыуы һөҙөмтәһендә ауылдар һаҡланып килде.

Әле килеп техник прогресс шундай тиҙлектә бара: бер нисә йылдан шул уҡ Хәйбуллаға ике-өс сәғәттә капсулаға ултырып, поезд менән осоп барып етергә мөмкин буласаҡ. Ул осраҡта мин мотлаҡ рәүештә Хәйбуллала, шул уҡ Әбделнасирҙа йәшәйәсәкмен. Мин ауылдан Өфөгә өс-дүрт көнгә килеп, ял көндәренә тыуған яғыма ҡайтасаҡмын. Был көн ҡотолғоһоҙ рәүештә киләсәк. Хәҙер деурбанизация процесы башланды. Элек кешеләр Урал аръяғынан, Ирәндек буйынан белем алыр өсөн, тормош кимәлен күтәрер өсөн ҡалаларға юлланһа, хәҙер кире ағым башланасаҡ. Ул сағында шул уҡ концерт, спектакль премьераһын ҡарарға Өфөгә генә түгел, Ирәндек буйҙарынан шул уҡ Мәскәүгә лә барып, шул уҡ көндә кире әйләнеп ҡайтыу мөмкин буласаҡ. Ул сағында, һеҙ әйткәнсә, фән үҫеше ауылды һаҡларға булышлыҡ итәсәк.

Атайым Мансур, ауыл хужалығы институтында ветврачлыҡҡа уҡып сыҡҡас, шундуҡ баш ветврач булып китә. Ул минә шундай фатиха бирҙе: "Өфөгә уҡырға бар һәм шунда тороп ҡал. Һандуғастар һайрар ер түгел бында. Ҡасандыр совхоз гөрләп эшләп торҙо, әммә барыһы ла емерелде..." Мин үҙ тормошомда нимәгәлер өлгәшкәнмен икән, былар барыһы ла атайымдың программаһы буйынса. Мин Урал аръяғы буйынса күп йөрөйөм һәм күп кенә уңышлы эшләгән фермерҙарҙы, йылҡысыларҙы беләм. Улар үҙ хужалығын совет осорондағы совхоздар кимәлендә юғары тота. Әгәр ҙә фермерлыҡта юғары уңышҡа өлгәшкән хәлдә лә, унда элекке совхоздарҙағы кеүек кешеләр күп кәрәкмәй. Хәйбулла районында, мәҫәлән, ер аҫты байлыҡтарын табыу, эшкәртеү йүнәлешендә генә эш урындары булдырып, ауылдарҙы һаҡлап ҡалыу мөмкинлеге ҙур. Ундағы карьерҙарҙа, асылда, урындағы халыҡ хеҙмәт итә. Хәҙерге заманда кемдәр эш булмауы арҡаһында ярлы йәшәй икән, былың сәбәптәрен үҙҙәренең мейеһендә эҙләһен.

Мин ике аҙна элек Ҡаҙағстанда Аҡмулла эҙҙәре буйлап йөрөнөм. Минең, уҡытыусылыҡ эшендә өлгәшкән башҡорттоң уңыштарын ҡаҙаҡтар юғарыраҡ баһалай, бында ҡал, беҙҙең балаларҙы уҡыт, һинә бөтә шарттарҙы тыуҙырабыҙ, тиҙәр. Беҙҙә лә революцияға тиклем ундай меценаттар булған. Әгәр ҙә бөгөн дә һәр бер бай үҙенең байлығының ун процентын ғына балаларыбыҙға белем биреү өсөн һалһа, тыуған илебеҙ, республикабыҙ, шул уҡ Урал аръяғы Дубайға әүерелер ине. Беҙҙә "минеке" тигән тойғо юғарыраҡ шул. Әгәр ҙә был тойғо күп кешелә булһа, улар үҙенекен үҫтерер өсөн нығыраҡ тырышыр ине. Ә беҙ хатта башҡортса һөйләшергә оялабыҙ.

**Ә һеҙҙең быуын нимәгә өлгәшә алыр тип уйлайһың?**

**Айнур:** Бына һеҙ, Әхмәр ағай, һеҙҙең быуын үҙегеҙгә бирелгән күп кенә мөмкинлекте ҡулығыҙҙан ысҡындырғанһығыҙ. Мин хәҙер ҡырҡ йәшлектәргә һәм унан кесе йәштәрҙәгеләргә генә иҫәп тота алам. Рәсәйҙә һәр ваҡыт ике мәсьәлә-һорау торған һәм тора: "Кем гәйепле?" һәм "Нимә эшләргә?". Миненсә, был һорауҙарҙы оноторға кәрәк, гәйепләләрҙе эҙләргә лә кәрәкмәй, ә үҙең алдыңа алған тармаҡ буйынса туҡтауһыҙ эшләргә һәм маҡсатҡа өлгәшергә генә кәрәк.

**Һеҙгә ошолай ойошорға, шартлы итеп әйткәндә, "Әбделнасир" ауылы ойоштороорға нимә сәбәпсе булды?**

**Альмира:** Беҙ яҡташтар ойошмаһы ла түгел, әммә ошолай барбыҙ. Быйыл Целинный ауылы төҙөлөүгә 70 йыл тулды. Ошо уңайҙан Хәйбулланан беҙгә делегация килде. Улар араһында элекке совхоз эшселәре, сәнғәт әһелдәре, спортсылар бар ине. Беҙ ошо состав менән уларҙы ҡаршы алдыҡ һәм уларға кофе-брейк эшләнек. Улар быны көтмәгәйне, шул тиклем ҡыуандылар. Шул саҡта беҙ ҙә әгәр ҙә бергәләшһәк, нимәләр эшләй алыуыбыҙҙы аңлап ҡалдыҡ. Маҡсаттарыбыҙ ҙа барлыҡҡа килде. Хәҙер Целинный мәктәбендә музей эшләргә ниәт иттек. Был идея миндә әллә ҡасандан бирле йәшәй.

**Айнур:** Музей экспонаттарын туплау - бер нәмә, был эште техник яҡтан тормошҡа ашырыу, артабан музейҙы эшләтеү өсөн сығымдар талап ителәсәк. Был эшкә яҡташтарыбыҙ һәм ауылдаштарыбыҙ ҙа ҡушылыр, тип ышанабыҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП:**

**Айнур әйтеүенсә, 1954 йылда төбәктең Әбделнасир һәм башҡа ауылдарының энтузиаст-коммунистары Целинный ауылына нигеҙ һалып, үҙҙәренең яҡты киләсәген шул ауылға бәйләп өмөтләнгән. Бөгөн иһә уларҙың балалары һәм ейәндәре Өфө ҡалаһын яулап, тыуған телендә һөйләшергә өйрәнеп, рухи "Әбделнасир" ауылын барлыҡҡа килтергән, ата-олаталары кеүек улар ҙа сиҙәм аҡтарып, киләсәктең орлоҡтарын шунда һалып ҡалдырырға тырыша. Бындай күсәгилешлелек һаҡланғанда, иншаллаһ, ауылдарыбыҙ ҙа, халҡыбыҙ ҙа йәшәр, тип ышанайыҡ!**

Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ
әңгәмә ҡорҙо.

МӘҘӘК ХӘЛДӘР

# ИКЕ МЕҢ ҺУМЛЫҠ КӘСЕП,

## йәки алтмыш һумлыҡ файҙа



Оло юлға бер югереп сығып, бер кирегә югергеләгән, үҙе аяуһыҙ ҡул болғаған юлсыны алыҫтан шәйләп киләм. Ҡулдарын бәйһеҙ арҡан шикелле арҡыс-торҡос болғауына ҡарағанда бер аҙ эсеп алғанға ла оҡшай төшә. Ни эшләргә? Ултыртмай ғына эргәһенән зыйтлап ҡына үтеп китергәме? Әллә был шайтан алғыры юлаусы эргәһенә туҡтарғамы? Ултыртып алһаң, эскән кеше менән бергә барыуҙары, ай-һай, енел эш түгел. Моғайын, район үҙәгенә хәтлем баралыр ул. Ә уға хәтлем апаруҡ ҡына ара. Кәм тигәндә лә сәғәт самаһы ваҡыт барыр кәрәк.

Төплө генә ҡарарға килмәгәнгә микән, машинам ризаһыҙ ғына шығырлап, уның эргәһенә туҡтаны. Дөрөҫөн әйткәндә, аптыраған көндән ултыртып алдым. Үҙегеҙ беләһегеҙ, быйыл ҡыш йылы килә. Ә шулай ҙа йылы ҡышты һыуыҡ йәйгә тиңләп булмай. Аллам һаҡлаһын, тайып китәр... ҡолап китәр... тора алмаҫ... туңып ятыр... Ҡуй, мәйтәм, бындай гонаһты алмайым әле үҙемә.

Юлаусыны әйтәм, юл ситендә оҙаҡ тапанып тороп, өшөп бөткән. Аяҡтарын бергә ҡуйып, яурындарын көмөрәйтә биреп, бер аҙ алға иңкәйә төшөп, ике усын ауыҙ тапҡырына ҡуйып, оҙаҡ ҡына бөршәйеп барҙы ул. Ниһайәт, йылынып китте. Хәҙер "бисара" егеттең яурындар турайҙы, аяҡтар алға һонолдо, ҡараштар осҡонланды, иң мөһиме, тел асылды. Аптырарһың, бая ғына ләм-мим барған кеше хәҙер хәбәрҙе ҡоя ғына бит, әй!

- Рәхмәт, ағай, һиңә... берәү туҡтамай... һин ултыртып алдың... һәйбәт кеше икәнең йөҙөңә сыҡҡан... ҡарашың яғымлы... һинең һымаҡ һәйбәт кешеләр бик һирәк... һин дә мин, тигәндәй...

Ошолай мине маҡтай-маҡтай барған егет ҡапылдан ғына туҡтап ҡалды. Хатта уның шым ҡалыуына мин аптырап киттем. Шул арала ул минә ҡеүәһе менән боролоп ултырҙы. Шунан күкрәк тултырып тын алды. Һәм ҡыуаныслы, дөрөҫөрәге, тантаналы тауыш менән ошолай әйтеп ҡуйҙы.

- Ә... мин... һиңә... юл... хаҡын... түләйем!

Шуныһы ҡыҙыҡ. Һәр һүҙгә айырым баҫым яһап әйтә. ("Хәҙер... сәхнә түренә... эстрадабыҙҙың... йондоҙон... саҡырабыҙ!" - тигән әртисең ары торһон). Үәт, исмаһам, әйтте һүҙ, тип уйлап ҡуйҙым мин. Мәйтәм, хәҙерге заманда кем түләмәй? Бушты атаһын күмәкләп әллә ҡасан уҡ "күмеп" ҡуйҙыҡ бит. Хәҙер уны иҫкә алған кеше лә юҡ. Ирекһеҙҙән, мин көләп ебәрҙем. Әйткәндәй, әгәр ул егет миңә, мин һиңә юл хаҡын түләмәйем, тиһә, мин ысынлап аптырар инем. Мин генә түгел, хатта һеҙ ҙә аптырар инегеҙ. Минең ихлас көлөүгә был егет аптырай төштө.

ӘҘИБӘГӘ ӨС ҺОРАУ

**Илдә барған хәл-ваҡиғаларға битараф булмаған, донъяға һөйөү менән баҡҡан ҡәләм оҫтаһы, педагогик хеҙмәт ветераны Миңзәлә Хәлилованың исеме йәмәғәтселеккә яҡшы таныш. Инде байтаҡ тормош тәжрибәһе туплаған әҙибә һуңғы йылдарҙа сағыу ижад емештәре менән бүлешә, ауыл ерендә йәшәп, әҙәбиәткә, әҙәби һүҙгә тоғролоҡ һаҡлағандар, һис шикһеҙ, һоҡланыу тойғоһо ғына уята. Миңзәлә Вәсил ҡыҙы, "Дим" әҙәби берекмәһе етәксеһе булараҡ, башҡорт әҙәбиәтен үҫтереүҙә, йәш быуында һүҙ сәнғәтенә һөйөү тәрбиәләүҙә әүҙем эштәр алып бара. Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, яҙыусы Миңзәлә ХӘЛИЛОВАға өс һорау менән мөрәжәғәт иттек.**

# МИН ДОНЪЯҒА...

## балалар күҙе менән ҡарайым



**➔ Уҡытыусы ғүмер буйы балаларҙы уҡыта, уларға һабаҡ бирә. Шул уҡ ваҡытта үҙе лә һабаҡ ала бит инде. Миңзәлә, һеҙгә тормош биргән иң ҙур һабаҡ нимә булды?**

- Тормош юлымда минең һәр саҡ һөйбәт кешеләр осрап торҙо. Баймаҡ районының Байыш һигеҙ йыллыҡ, Сибай ҡалаһының интернат-мәктәбендә беҙҙе үҙ эшен яратҡан, ғүмерҙәрен балалар тәрбиәләүгә бағышлаған уҡытыусылар уҡытты. Мин режиссер булырмын тип уйлап йөрөгәндә, БДУның филология факультеты студенттары Сибайға практика үтергә килеп төштө. "Миңзәлә, һин БДУ-ға башҡорт-рус бүлегенә уҡырға бар, үкенмәҫһең! Һин уҡытыусы булырға тейешһең!" - Сәрүәр апай Суринаның һүҙҙәре мине ошо уҡыу йортона инергә этәргес булды. Үкенмәйем, мин дүрт тиҫтәнән ашыу йыл уҡытыусы булып эшләйем, Сәрүәр апайға шул тиклем рәхмәтлемен. Мәктәп коллективым да минең барлыҡ башланғыстарымды күтәрмәләп торҙо.

Әсәйемдең йомарт, ҡунаҡсыл булыуын мин үҙемә маяҡ итеп алғанмын. 18 йыл бергә ғүмер иткән ҡәйнәм Фәтиха Әбкәрим ҡыҙының матур кәнәштәре, өйрәткәндәре - үҙе бер тормош мәктәбе булды. Хатта уҡыусыларымдың ихласлығын, ябайлығын күңелем түрендә һаҡлайым. Мин балаларҙы уҡытып ҡына ҡалмайым, уларҙан да нимәләрҙер өйрәнәм, һабаҡ алам. "Бала күңеле аҡ ҡағыҙ, ни теләйһең, яҙ ҙа һыҙ!" тигән бит халыҡ мәҡәле. Балалар менән эшләүе, бер яҡтан, ауыр булһа, икенсе яҡтан, мауыҡтырғыс та! Мин донъяға ла улар күҙлегенән ҡарарға тырышам.

**➔ Туған телде үҫтереү, аралашыу даирәһен киңәйтеүгә бәйле борсолоуҙар ишетелеп тора. Башҡорт телен, әҙәбиәтен уҡытҡандар бөгөн яуаплы бурыс атҡара. Ғөмүмән, туған телдең дәрәжәһен күтәрер өсөн бөгөн нимәгә иғтибар бирергә кәрәк?**

- Мин дүрт тиҫтәнән ашыу йыл балаларға туған тел, әсә теле, башҡорт теленән белем биргән ветеран уҡытыусымын. 44 йыл дауамында тел һағында торам, уҡыусыларымда туған телгә һөйөү тәрбиәләйем, күңелдәренә изгелек орлоҡтары сәсәм. Шуға күрә туған тел яҙмышы мине һәр саҡ уйға һала, борсой..

Беҙ үҙебеҙ - тик башҡортса ғына аралашып, башҡорт мөхитендә үҫкән һәм тәрбиәләнгән быуын. Рус теле дәрестәрен иҫәпләмәгәндә, тик ҡалаға барғанда ғына рус телен ишетә инек. Унда ла башҡортса һөйләшкәнде ишетһәләр, урамда беҙҙе "нацмендар" тип, шартлатып әрләп китеүселәр ҙә булғылай торғайны. Эйе, шундай заманалар булды, туған телдә һөйләшергә лә ояла торған замандар...

Һуңғы йылдарҙа туған телебеҙгә мөнәсәбәт ыңғай яҡҡа үҙгәргәйне. Юғары уҡыу йорттары башҡорт теле уҡытыусыларын күпләп әҙерләне, дәрестәр һаны ла артып киткәйне. Туған телдә ниндәй генә саралар ойошторолманы! Балалар һәм уҡытыусылар Мәрйәм Бураҡаеваның "Тормош һабаҡтары" китабын ниндәй ихлас ҡабул итте. Башҡорт халҡының йолалары, ырыуҙар тарихы һ.б менән таныштı. Ә бөгөнгө көндә ниндәй хәлдә туған телебеҙ яҙмышы, башҡорт теле уҡытыусыһының хәл торошо?

Мин ябай ғына ауыл мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте, рус теле һәм әҙәбиәте дәрестәрен алып барам. Ике телде сағыштырып уҡытыр өсөн был бик ҙур мөмкинлек бирә. Әлеге мәлдә тел дәрестәренең, башҡорт телен өйрәнергә теләүсе балаларҙың һаны кәмеүе ҙур борсоуға һала. Ауыл ерҙәрендә лә рус телендә аралашыусы балаларҙың артыуы күҙәтелә. Хатта балалар баҡсаһында ла рус теленә өҫтөнлөк бирелә. Нисек был көрсөктән сығырға һуң? Ниндәй ысулдар уйлап табырға? Был һәр уҡытыусының алдында торған риторик һорау.

Туған телгә һөйөү иң тәү сиратта ғаиләлә башланырға тейеш. Әгәр ғаилә ағзалары үҙ-ара туған телдә һөйләшһә, бала уны күңеленә һеңдереп үҫә, әсәйҙең бишек йыры аша туған телгә һөйөү ҙә күсә. Балалар баҡсаһына барғансы ул тыуған телендә аралашһа, унда башҡорт төркөмөнә эләкһә, артабан ул туған телен онотмаясаҡ.

Ошондай ваҡытта ауыл мәктәбе уҡытыусыларына бигерәк тә еңел түгел. Күп кенә башҡорт мәктәптәрен филиалға әйләндереү процесы бара, бер нисә йылдан инде улар ябылыуға дусар ителәсәк. Быға тыуымдың кәмеүе лә ҙур сәбәп булып тора, ауылда эш урындары юҡ, йәштәр ҡалмай. Һуңғы йылдарҙа уҡыусыларҙың ҡала интернат-мәктәптәренә күпләп китеүе күҙәтелә. Нимә ылыҡтыра уларҙы? Беренсенән, ул ҡала мәктәптәре бай йыһазландырылған, балаларға үҫешеү өсөн мөмкинлек күп. Икенсенән, ата-әсәләрҙең үҙҙәренә уңайлы - балаға дәрес әҙерләшергә лә, тәртибен контролдә тоторға ла кәрәк түгел, йома барып ала ла, ял көндө кире алып барып ҡуя, улар өсөн бик ҡулай! Өсөнсөнән, ауыл мәктәптәрендә балалар һаны аҙ булыуға һылтанып, хатта оло кластарҙы ҡушып уҡытыу күҙәтелә.

Мин ауыл мәктәптәре ябылыу сәбәбен шунда күрәм. Мәғариф министрлығына уйланыу өсөн урын бар. Эйе, ауыл мәктәбен ябыу кем өсөндәр отошлолор, ләкин был осраҡта ауыл, ауыл халҡы яҙмышы тураһында ла уйларға кәрәктер. Мәктәп булмаһа, мәҙәниәт усаҡтары ла ябылыу ҡурҡынысы алдына баҫасаҡ, сөнки ауылда уҙғарылған сараларҙың уртаһында ла мәктәп, уҡытыусылар, уҡыусылар йөрөй. Мәктәп бөтһә, ауылға ла бөтөү ҡурҡынысы янай. Ә был башҡорт халҡының киләсәге өсөн дә ауыр буласаҡ. Башҡорт халҡы ауылдарҙа күберәк йәшәй, тел дә ана шул ауылдарҙа һаҡлана.

Минең уйым буйынса, был проблеманы хәл итер өсөн ауыл мәктәптәренең матди-техник базаһын нығытырға (интерактив таҡталар, компьютерҙар менән тәьмин итергә); ҡушып уҡытыуға юл ҡуймаҫҡа (класс-комплект 7 баланан торорға тейеш тигәндә оноторға) һәм уҡытыусы хеҙмәтенең ауырлығын күрә белергә һәм ваҡытында баһаларға кәрәк.

**➔ Миңзәлә, уҡытыу менән бергә, һеҙ бит ижадтан айырылғанығыҙ юҡ. Уңыш-ҡаҙаныштарың тураһында ла ишетеп торабыҙ. Дәүләкән яғында ижадсылар осрашыуы ла даими үткәрелеп тора, тимәк, әҙәби мөхит бар тип әйтә алабыҙ. Шәхсән үҙеңдә ижадҡа килтергән сәбәптәрҙе белге килә. Ниндәй темаларҙы яҡтыртыу һинең өсөн мөһим булып ҡала?**

- Мин ижадҡа мәктәп йылдарында шиғырҙар менән килдем. 2001 йылда "Аҡ елкән" исемле китабым баҫылып сыҡты. 2018 йылда "Төштәге осрашыу" исемле хикәйәләр йыйынтығымды ҡулыма алдым. 2023 йылда балалар баҡсалары һәм башланғыс класс уҡыусылары өсөн өс телдә "Ҡояш балалары" исемле китабым, 2024 йылда "Ҡояшҡа табынам" шиғырҙар йыйынтығы донъя күрҙе. Шулай уҡ шиғырҙарым, хикәйәләрем республика гәзит-журналдарында баҫыла килә. Минең әҫәрҙәремдең геройҙары - беҙҙең арабыҙҙа йәшәгән ябай хеҙмәт кешеләре, ҡатын-ҡыҙҙар. Биш балаға өләсәй булараҡ, әкиәттәр, балалар өсөн хикәйәләр ҙә яҙғылайым. Улар балалар өсөн гәзит-журнал биттәрендә баҫылып тора. Һуңғы йылдарҙа илдә барған хәлдәргә бағышланған әҫәрҙәр байтаҡ яҙылды. Бөйөк Ватан һуғышы темаһына "Һуңлап килгән бәхет" исемле повесым "Ағиҙел"журналында баҫылып сыҡты. Кесе улым Луганск ҡалаһында командировкала булғанда уға арналған шиғырҙарым арыу ғына йыйылды, уларҙа әсәй булараҡ, үҙемдең бөтә яныу-көйөүҙәрем шиғыр булып түгелде.

Дәүләкән ҡалаһының Әхиәр Хәким музейы эргәһендә "Дим" әҙәби берекмәһе эшләй, үҙем 2018 йылдан шул берекмәнең етәксеһемен. Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Әхиәр Хәким нигеҙ һалған түңәрәк ағзаларының альманахтарын сығарабыҙ. Музей етәкселеге менән берлектә бик күп әҙәби саралар, яҙыусылар, күренекле шәхестәр менән осрашыуҙар ойошторабыҙ. Шуныһы ҡыуаныслы: был сараларҙың барыһында ла мәктәп уҡыусылары әүҙем ҡатнаша.

Һорауҙарҙы
Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА
бирҙе.

---

- Нимә, түләй алмай, тейһеңме? (Ирендәре бер аҙ бүлтәйә төшә). Хәҙер түләйем! (Тауышында бер аҙ ғәрләнеү сифаттары һыҙатланып ҡала). Минең атайым шулай булды... мин үҙем шулаймын... минең балам шулай буласаҡ... беҙҙе ауылда шулай тип йөрөтәләр... (Егеттең борсағы алманан да эре былай).

Шул арала был егет биленә аҫып алған бәләкәй сумкаһынан йомарлап аҡса килтереп сығармаһынмы! Берәү әйтмешләй, уш китте, әй. Гел меңәрлек тә биш йөҙлөк! Минең аптыраулы ҡарашты күргән егет тағы маһайып китте. Ул хәбәрҙе киренән тетә башланы.

- Аҡса мине тапмай... мин аҡсаны табам... мин шулай эшләйем... мин былай эшләйем... оҫтамын... эшләгән ерҙә ауыҙға ғына ҡарап торалар... көнөнә биш мең эшләү миңә чипух....

Аптырағандан, мин уфтанып ҡуям.

- Түләү кәрәкмәй. Исмаһам, шул аҡсаңа балаларыңа күстәнәс алып ҡайтыр инең. Аҡса эшләү менән меней ул... юлда уҡ уны туҙҙырып йөрөгәс... өйгә алып ҡайтып еткермәгәс...

Ярай, ҡалған яғын яҙып тормайым әле. Беҙҙең һөйләшеүҙең ошо юңәлештә барғанын үҙегеҙ ҙә аңлағанһығыҙҙыр инде. Район үҙәгенә етәрәк, был егет ошолай хәбәр һалды:

- Алмайым, тейһең инде... һе... ә уны мин дә кире алмайым...

Егет ҡулындағы аҡсаларын тегеләй тулғандырып, былай болғандырып барҙы-барҙы ла (нишләп улайталыр инде), ике ҡағыҙ аҡсаны һайлап алып, уларҙы машинаның ҡумтаһына (йәғни, бардачогына) һалды. Юҡ, һалманы, ә ташланы. Шунан бардачокты шап иттереп ябып ҡуйҙы...

Шул арала район үҙәгенә килеп еттек. Егет төшөп ҡалды. Мин ары киттем. Ярай, мәйтәм, минән бурыс төштө. Үҙемсә, бар хәлемсә аңлатырға, ул аҡсаларҙы алмаҫҡа тырыштым. Әммә килеп сыҡманы. Аҡсаларҙы көсләп бирҙеләр. Ә шулай ҙа күңелдә бер нәмә өйкәп тик тора - был егет күпме аҡса ташланы икән бардачокка? Былай иҫәп ябай. Ике меңәрлекте ташлаһа, тимәк, ике мең ята бардачокта. Меңәрлек һәм биш йөҙлөк булһа, мең ярым була инде. Әгәр ике биш йөҙлөк булһа, мең һум аҡса ҡалдырған була был егет. Ярай, мәйтәм, күпме булһа ла насип иткәне шулдыр инде. Берәү әйтмешләй, насип нәмә ауыҙҙы ҡайырып инә ул! Тик торғанда нишләптер күңел күтәрелеп китте. Мәйтәм, моғайын да бардачокта кәм тигәндә лә мең һум аҡса ятҡанға түгелдер инде. Ҡышҡы көн матур бит ул. Моғайын, шуға күңел күтәрелеп киткәндер. Мәйтәм, тукта, юл ыңғайы заправкаға инеп сығайым әле.

Бына әле ошо юлдарҙы яҙып ултырам, ә үҙем был хәлде иҫкә төшөрөп, көлөп ултырам. Нимәһенә көләһең, тапҡанһың көлөр нәмә, тейһегеҙме?! Ә хәҙер һеҙ үҙегеҙ көлмәй ҡарағыҙ әле. Сөнки бардачокта... ун һәм илле һумлыҡ ҡағыҙ аҡсалар ята ине!

Әғләм ШӘРИПОВ.

***✓ Ерҙе, күктәрҙе һәм ундағы бар нәмәне фәҡәт Аллаһ Тәғәлә ҡасандыр барлыҡҡа килтергәнен һәм һәр саҡ ана шулай ғәжәп төҙөк килеш тотоп торғанын танырға теләмәгәндәр ҙә барҙыр, бәлки.***

*ИНТЕРНЕТТАН*



# ТЕЛЕФОНДАН МУЗЫКА ТЫҢЛАМА!

■ Ҡолаҡсындар ишетеү һәләтен түбәнәйтә, тип яҙа News.am һәм миҫал итеп Эребрулағы университет дауаханаһының аудиология клиникаһы профессоры Клас Меллер һүҙҙәрен килтерә: "Беҙ насар ишетеүсе тотош быуын үҫеп килеүен аңларға тейешбеҙ. Был проблема улар ҡартайғанға тиклем үк барлыҡҡа киләсәк". Быны раҫлап, Меллер мәктәп уҡыусылары менән үткәрелгән һынауҙарҙың һөҙөмтәһен күрһәтә. Даими рәүештә телефондан музыка тыңлау сәбәпле, 400 баланың 3 проценты ҡолағында шау барлыҡҡа килеүен билдәләгән. Уларҙың проценты ҙур булмаған кеүек тойолһа ла, Меллер фекеренсә, был балаларҙың йәше хәүефләнергә урын ҡалдыра. Эске ҡолаҡҡа йүнәлтелгән тауыш ни тиклем көслөрәк була, шул тиклем насарыраҡ, был тауыштың ҡолаҡ тишегенә ҡуйылған аппараттан килеүе тағы ла ҙурыраҡ ҡурҡыныс тыуҙыра.

■ Бөтөн Рәсәй йәмәғәт фекерен өйрәнеү үҙәге яңы һорау алыу үткәргән һәм рәсәйлеләрҙең үҙ сәләмәтлегенә ниндәй мөнәсәбәттә булыуын асыҡларға тырышҡан. Яуап биреүселәрҙең 84 проценты үҙенең тәненә һаҡсыл ҡарауын белдергән. Һаҡсыл ҡарау, тигәнде нисек аңлайһығыҙ, тигән һорауға уларҙың 38 проценты табипҡа йөрөүҙәре һәм уларҙың кәңәштәрен тотоуҙары, 36 проценты насар ғәҙәттәре булмауы, ҡалған бер өлөшө телевизорҙан сәләмәтлек тураһында тапшырыуҙар ҡарауы тураһында белдергән. Яуап биреүселәрҙең дүрттән бер өлөшө йыл һайын диспансерлаштырыу үтә. 22 процент рәсәйле йылына бер тапҡыр булһа ла яҡшы итеп ял итә, ә һәр бишенсе рәсәйле физкультура һәм спорт менән шөғөлләнә. Шул уҡ ваҡытта дөрөҫ туҡланыуҙы сәләмәт булыуҙың бер сараһы икәнен 25 процент ҡына рәсәйле таныған. 8 процент яуап биреүсе витаминдар һәм биологик аҙыҡ өҫтәмәләре ҡабул итә. 15 процент рәсәйле һаулығы тураһында бөтөнләй хәстәрлек күрмәй. Ҡатын-ҡыҙҙар үҙ сәләмәтлегенә иғтибарлыраҡ, ирҙәр иһә спорт менән йышыраҡ шөғөлләнә.

■ Америка табиптары иҫкәртә: күп ҡулланһаң, хатта иң файҙалы ризыҡтар ҙа организмға зыян килтерә ала. Мәҫәлән, кишер һуты башҡа йәшелсә һуттарынан тәме буйынса айырылып тора, шуға ла ғалимдар уны ашҡаҙан аҫты биҙе, эсәк сирҙәре мәлендә эсмәҫкә кәңәш итә. Баҡтиһәң, кишерҙә шәкәрҙең төрлө төрҙәре бар икән, айырыуса шәкәр диабеты сирлеләренә кишер ашау тыйыла. Кишер һутын йыш эскән саҡта ашҡаҙан аҫты биҙенә өҫтәмә көсөргәнеш була. Ҡайһы саҡта был һут яҡшыраҡ үҙләштерелһен өсөн уға һөт өҫтө өҫтәйҙәр, әммә бында ла сама белергә кәрәк. Быларҙан тыш, кишерҙәге бета-каротин йөҙҙөң төҫөн үҙгәртеүе ихтимал. Шуға ла был һутты аҙнаһына бер тапҡыр эсеү ҙә етә.

■ Фастфуд менән артыҡ мауығыу балаларҙа астма һәм экзема сирҙәренең барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ итә. Ғалимдар раҫлауынса, был ризыҡтарҙағы зарарлы матдәләр ауыр формалағы астманың барлыҡҡа килеү хәүефен үҫмерҙәр араһында - 38, ә 6-7 йәшлек балалар араһында 27 процентҡа күтәрә. Ул шулай уҡ экзема һәм риниттың сәбәпсеһе булып тора. Фастфудты емеш-еләк, балыҡ, ҡуҙаҡлылар менән алыштырыу уның эҙемтәләрен кәметеүгә һәм был сирҙәрҙе иҫкәртеүгә булышлыҡ итә, ти белгестәр.

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

**Үҙебеҙ күреп өйрәнмәгән, йәғни ғәҙәти булмаған берәй нәмәне "аномаль" күренеш тип атайбыҙ. Әйтәйек, бер тауыҡ йомортҡа һалған һәм уның ҡабығында ғәрәпсә "Аллаһ" тигән һүҙгә оҡшаған яҙыуы бар. Йә иһә, яңы тыуған бер быҙауҙың йә кәзә бәрәсенең арҡаһына ла тап ана шулай тип яҙылған. "Мөғжизә бит был!" тибеҙ. Йә булмаһа, берәү бүре өйөрө ҡыуып килгән мәлдә, башҡа сара тапмай, ултырып доға ҡылғас, йыртҡыстарҙың кинәт кенә боролоп китеүен ниндәйҙер бер әҙәм ышанмаҫтай хәбәр итеп һөйләй башлай. Бер нисә йыл элек өлкә гәзиттәребеҙҙең береһендә берәүҙе кашалот йотоп, оҙаҡламай кит аулаусыларҙың ул хайуанды тотоп, эсен ярғандан һуң был кешенең иҫән булыуы хаҡында мәҡәлә уҡығайным. Шундай "аномаль" күренештәр тураһында берәй гәзиттән йә башҡа сығанаҡтан уҡығандан һуң ғына бәғзе берәү: "Үәт бит, ә! Ай-һай, ниндәйҙер бер юғары көс барҙыр. Был тигенгә түгелдер… " тип фекер йөрөтә башлай.**

# НИӘТТӘРЕБЕҘ ДӨРӨҪ БУЛҺЫН!



Әҙәм балалары тыуғандан алып күрә килгән ошо яҡты донъяға шул тиклем нык күнегеп киткәнбеҙ. Барлыҡ күренештәр - беҙҙең өсөн ғәҙәти. Иртәнсәк ҡояш ҡалҡыуы, көнө буйы ерҙе яҡтыртып, йылытып тороуы, унан кискә табан байыуы ла беҙҙең иғтибарыбыҙҙы әллә ни йәлеп итмәй. Ер аҫтынан урғылып сығып, һис туҡтауһыҙ тиҫтәләр, хатта йөҙәр йылдар буйы ағып ятҡан саф һалҡын шишмә, күктән яуған ямғыр, беҙҙең өсөн баҫыуҙа икмәк үҫеүе, башҡа ашамлыҡтар, емеш-еләктең нисек яралып сығыуы, унан ғәйәт тәмле булып бешеүе беҙҙе ғәжәпләндермәй. Ниһайәт, үҙебеҙҙең тәнебеҙ төҙөлөшө, йөрәк тибеше, ағзаларыбыҙ буйлап ҡан йөрөүе, беҙҙең ашаған тәм-томобыҙҙың ҡаныбыҙға һеңдерелеп, тәнебеҙгә таралып, күҙәнәктәребеҙҙе һәр саҡ туҡландырып тороуы, беҙҙең үҫеүебеҙ, бер-беребеҙ менән аралашыуыбыҙ, бер-беребеҙгә, балаларыбыҙға ҡарата һөйөү тойғолары булыуы ла беҙҙе артыҡ уйландырмай. Ә тән туҡымаларыбыҙҙы төҙөүсе һәр бер күҙәнәктең төҙөлөшөн, уның нисек эшләүен күҙ алдына ла килтерә алмайбыҙ. Микробиология өлкәһендәге ғалимдар ул хаҡта ентекләп яҙғандарҙы уҡығандан һуң да был ҡатмарлы физик һәм химик процестар үҙенән-үҙе булып тора һәм тап ана шулай булырға тейеш, тип кенә уйлайбыҙ. Ҡыҫҡаһы: беҙҙе ҡапыл да бер ни менән дә аптыратып булмай. Барыбыҙ ҙа быны һәр саҡ булып килгән нормаль күренеш тип атайбыҙ. Башта иҫкә алған яҙыулы йомортҡа, кәзә бәрәстәренең үҙҙәренең донъяға нисек яралыуы хаҡында хатта уйланып та тормайбыҙ.

Ҡәҙерле туғандар, әле һанап кителгән, беҙҙе уратып алған бына ошо нәмәләрҙең барыһы ла бөйөк мөғжизә икәне хаҡында уйланғанығыҙ бармы? Ерҙе, күктәрҙе һәм ундағы бар нәмәне фәҡәт Аллаһ Тәғәлә ҡасандыр барлыҡҡа килтергәнен һәм һәр саҡ ана шулай ғәжәп төҙөк килеш тотоп торғанын танырға теләмәгәндәр ҙә барҙыр, бәлки. Ни өсөн күптәребеҙ иң башта иҫкә алып кителгән "аномаль" күренештәргә йә унан-бынан ишеткән караматтарға ғына хайран ҡалабыҙ? Әлбиттә, улар ҙа мөғжизә, тик нишләптер ошондай осраҡтарҙа беҙ бөтә донъяны яралтҡан Аллаһтың Үҙен телгә алыу урынына, Уны "ниндәйҙер бер юғары көс" тигән сәйер исем менән атай башлағанбыҙ, хатта Уның барлығы хаҡында бер аҙ икеләнә биреп, "Барҙыр" тип фаразлайбыҙ ғына? Быуаттар буйы беҙҙең ата-бабаларыбыҙ ундай икеле һүҙҙәр һөйләү түгел, ул хаҡта уйларға ла ҡурҡҡан. Аллаһ Тәғәләнең барлығына һәм берлегенә, изге Ҡөрьән аяттарына йәне-тәне менән ышанып йәшәгән бит улар. Бына ошо мәсьәләләрҙә икеләнеү диндә рөхсәт

*БАҠСА*

# ПОМИДОР ҺӘМ БОРОСТО...

## нисек дөрөҫ үҫтерергә?

**Һәр баҡсасы йәшелсәнең үҫеше һәм уңышы орлоҡто дөрөҫ сәсеүҙән тора икәнен белә. Нисек итеп помидор һәм боростан яҡшы уңыш алырға? Баҡсасылар, моғайын, Башҡорт дәүләт аграр университеты эксперттары әйткәненән үҙенә кәрәкле мәғлүмәтте таба алыр.**



### Ниндәй тупраҡ яҡшыраҡ?

Помидор һәм борос сәсеү өсөн органик матдәләргә бай тупраҡ кәрәк. Иң уңайлыһы - йәшелсә үҫтереү өсөн тәғәйенләнгән әҙерҙе ҡулланыу. "Үҫенте өсөн һауытта мотлаҡ тишек эшләгеҙ, артыҡ һыу ағып сығырға тейеш. Тупраҡты һауытҡа тултырып һалығыҙ, сөнки һыу һиптәндән һуң ул ултыра", - тип аңлатты Башҡорт дәүләт аграр аниверситетының үҫемлекселек, үҫемлектәр селекцияһы һәм биотехнологиялар кафедраһы доценты Азат Вәлитов.

Шулай итеп, орлоҡто сәсеү алдынан тупраҡты яҡшы дымландырырға кәрәк. Һыу тотҡарланып торорға тейеш түгел, юғиһә, орлоҡ шытмаҫҡа мөмкин.

### Орлоҡто ниндәй тәрәнлектә сәсергә кәрәк?

Борос һәм помидор орлоғон 1 сантиметрҙан 1,5 сантиметрға тиклем тәрәнлектә сәсергә. Сәскәс, пленка менән ҡаплайҙар һәм йылы урынға ҡуялар. Үҫенте барлыҡҡа килһен өсөн оптималь температура 24-26 градус.

Помидор өс-биш көн үткәс шыта, ә бына борос һәм баклажан оҙағыраҡ - 10 көнгә тиклем көтөргә тура киләсәк. Температура 20-22 градусҡа тиклем төшһә, 10-14 көндән һуң, 17 градустан түбән температурала өс аҙнанан һуң шыта.

"Пленканы тәүге шытымдар барлыҡҡа килгәс үк алығыҙ, - тип кәңәш итә Башҡорт дәүләт аграр университетының ғилми-консультация баҡса үҙәге хеҙмәткәре Алһыу Вәлиева. - Әгәр бөтәһе лә шытҡанын көтһәк, тәүгеләре һуҙылып үҫәсәк".

ителмәй, уның өсөн әҙәм балаһы ололарҙан оло гонаһҡа батыуы ихтимал, әғүҙү билләһ! (Әйткәндәй, башта иҫкә алған һымаҡ, хатта унан да былайыраҡ "мөғжизәләр", караматтар хаҡында Ҡөрьән аяттары ла күп. Юныс бәйғәмбәрҙе кашалот йотоп, уның эсенән тере сыҡҡанлығы, Муса бәйғәмбәр таяғы менән һуҡҡан таштан шишмә урғылыуы, Ибраһим бәйғәмбәрҙе усаҡҡа атҡас, уның янмай ҡалыуы һ.б. Быларҙың береһе лә әкиәт түгел, барыһы ла фәҡәт Аллаһ Тәғәләнең ихтыяры менән булған нәмәләр тип кенә аңлау кәрәк).

Барлыҡ ғаләмдәр Раббыһы был донъяла әҙәм балалары йәшәһен өсөн булдырған шул бихисап ниғмәттәрҙән тыш, фәҡәт Үҙенә ғибәҙәт ҡылып йәшәргә лә бойорған. Әммә күпселек уны "кәрәкмәгән нәмә" тип һанай һәм быға ла күнегеп бөткәнбеҙ. Мәҫәлән, үҙен мосолманға һанаған кеше мотлаҡ үтәргә тейешле ғибәҙәттәр - намаҙ, ураҙа хаҡында һөйләй башлап, бәғзеләр уның "организмға булған файҙаһы" тураһында ғына һүҙ алып барырға тырыша: ***"Көнөнә әллә нисәмә мәртәбә әйелеп, сәждә ҡылыу, беҙҙең баш мейеһенә ҡан йөрөү процесына ыңғай тәьҫир итә, бил быуындарының ауыртмауына ла булышлыҡ яһай. Ә ураҙа тотоу тәндәге артыҡ шлактарҙан ҡотолдора, ҡанда шәкәр һәм зарарлы холестерин күбәйеүен иҫкәртә, артыҡ һимереүҙән һаҡлай, һ.б..."***

Һүҙ юҡ, тәнебеҙ менән ғибәҙәт ҡылыуҙың организмға файҙаһы булыуы - һис шикһеҙ. Аллаһ Тәғәлә беҙгә бер ниндәй ҙә зарарлы булған нәмәләрҙе бойормай. Әммә, хөрмәтле дуҫтар, ана шул ғибәҙәттәрҙең төп маҡсаты - Аллаһ Тәғәләгә тәҡүәлек (бирелгәнлек, тоғролоҡ) күрһәтеү. Уның әмеренә итәғәтлек итеү, Уға баш эйеү, ғөмүмән, үҙеңдең иман килтереүеңдә, мосолманлығыңды Аллаһ алдында иҫбатлау. Фәҡәт ана шундай ниәт менән генә үтәргә тейешбеҙ бына ошо ғибәҙәттәребеҙҙе. ***Беҙ ҡылған ғәмәлдәрҙең төп асылы - беҙҙең ниәтебеҙҙә. Әгәр ҙә беҙ намаҙҙы һәм ураҙаны тәнебеҙгә файҙа булһын тип кенә үтәйбеҙ икән, беҙҙең ниәтебеҙ дөрөҫ булмай. Бындай ниәт менән ҡылынған ғәмәл - физик күнегеүгә һәм диетаға ултырыуға тартым. Бәйғәмбәребеҙ с.ғ.с., уның сәхәбәләре, беҙҙең боронғо ата-бабаларыбыҙ ҙа бер ҡасан да намаҙ һәм ураҙаны физик күнекмә урынына йә ябығыу ниәтендә ҡулланмаған. Ошо хаҡта яҡшы итеп үйрәгебеҙгә һеңдереп ҡуйыйыҡ, ҡәҙерле туғандарым!***

Ошо юҫыҡта һүҙ башлағас, тағы бер мәсьәләгә ҡағылып китмәй булмай. Барыбыҙ ҙа белеүебеҙсә, мосолман кешеһе фәҡәт хәләл аҙыҡ менән генә туҡланырға тейеш. Үләкһә, ҡан, дуңғыҙ ите беҙҙең өсөн харам булыуы хаҡында белмәгән кеше юҡтыр. Хатта хәләл малдың да Аллаһ исемен иҫкә алмай ("бисмиллаһ" әйтмәй) боғаҙланғаны мөслимдәр өсөн тыйылған. Тик бына ошо хаҡта халыҡҡа аңлатыу алып барған бәғзе бер яҡташтарыбыҙ: ***"Сусҡа итен ашау бушҡа ғына тыйылмаған, сөнки унда "сусҡа цепене" (свиная цепень) тип аталған паразит булыу ихтималлығы бар. Шундай зарарланған итте ашаған кеше "тениоз" сирен эләктереүе мөмкин. Икенсенән, уның майының составында зарарлы холестерин күп. Был - ҡан тамырҙарының тарайыуына, йәғни атеросклероз сиренә булышлыҡ итә..." - тип медицина фәнен ҡулланып иҫбатлай башлай.*** Үҙем табип булараҡ та: "Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ", - тип кенә әйтер инем, әммә минең башҡасараҡ фекерем дә бар шул. Беҙ ул аҙыҡтарҙан тәнгә зарары булған өсөн түгел, ә фәҡәт Аллаһ Тәғәлә ана шул нәмәләрҙе харам тип әйткәне өсөн генә тыйылырға тейешбеҙ (Ҡөрьән-Кәрим. Әл-Маидә сүрәһе, 3-сө аят). "Айырма ниҙә?" тиер бәғзе берәү. Ә бына ниҙә: эш уға ҡалһа, һарыҡ ите составында ла зыянлы холестерин сусҡа итенә ҡарағанда аҙыраҡ түгел! Икенсенән, эре мөгөҙлө малда ла "үгеҙ цепене" (бычий цепень) була. Ул хатта, сусҡаныҡынан мәртәбәләргә оҙон булып (ун мертға етә!), әҙәм балаһының эсәге буйында йәшәй. Ул да, нәҡ сусҡа ҡорто һымаҡ уҡ, етерлек бешерелмәгән ит аша беҙҙең эсәк буйына килеп эләгә (медицинала был сир - "тениаринхоз" тип атала). Уға ҡалһа, балыҡтан да "дифиллоботриоз", "описторхоз" һымаҡ паразиттар менән зарарланыу ҡурҡынысы бар. Әммә беҙ һарыҡ, һыйыр итенән, балыҡтан баш тартмайбыҙ, сөнки улар - беҙҙең өсөн хәләл, йәғни Аллаһ тарафынан рөхсәт ителгән.

Бынан тыш, хәмер эсеү-эсмәү хаҡында ла сираттағы мәртәбә әйтеп китеүҙе үҙемдең бурысым тип һанайым. Бөтә донъяны баҫып алған был афәттең кешелек өсөн зыянлы булыуын бер кем дә инҡар итмәҫ. Был хаҡта бик күп яҙалар, "сама белеп" эсеүҙе пропагандалаусылар ҙа юҡ түгел. Әммә бына ошо мәсьәләлә лә беҙ Изге Китапта Раббыбыҙ тарафынан хәмерҙән бөтөнләйгә тыйылғанлығын белергә тейешбеҙ (Әл-Маидә сүрәһе, 90-91 аяттар). Ә бәғзе берәүҙән тағы: "Хәмерҙән ниндәй ниәт менән тыйылһаң да барыбер түгелме ни?.." - тиеүе лә бар. "Барыбер түгел!" тип һис икеләнмәй әйтер инем. Эш уға ҡалһа, диндең тыйыуын һанламай, араҡы йә шарапты 15-20 граммлап, кемдер әйтмешләй, "мәҙәни" формала йә "башҡаларҙы уважайт итеү" йөҙөнән генә "тотоп" ултырыуҙан организмға бер ниндәй ҙә зыян булмай. Әммә был - Аллаһ әмерен инҡар итеү һәм оло гонаһ булаcаҡ. Тап бына шуға күрә лә беҙ хәмерҙән ҡәтғи баш тартыуҙы маҡсат итеп ҡуйырға бурыслыбыҙ һәм бында тик Раббыбыҙ әмеренә генә нигеҙләнергә тейешбеҙ. Аллаһ Тәғәлә барыбыҙға ла иман, тәҡүәлек насип итһен. Амин.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы хәрби табип.**

## Сәсеү өсөн оптималь ваҡыт

Орлоҡ сәсеүҙең дөрөҫ ваҡытын иҫәпләп сығарыу еңел. Йылылыҡ һөйөүсе культураларҙы һәр төбәктә яҙғы ҡырау ҡурҡынысы үткәс, асыҡ грунтҡа, теплицаға иртәрәк ултырталар. Шулай итеп, үҫентеләрҙе даими урынға ултыртыу датаһын һайлайбыҙ. Һайланған ултыртыу датаһынан үҫентеләрҙе үҫтереү өсөн кәрәкле көндәрҙе һанын кире иҫәпләйбеҙ, орлоҡтарҙы үҫтереү һәм үҫентеләр барлыҡҡа килеү өсөн кәрәкле тағы бер нисә көн өҫтәйбеҙ (ҡағиҙә булараҡ, был томат өсөн 4-5 көн йәки борос өсөн 9-14 көн).

Иҫәпләгәндән һуң туҡталған дата (плюс-минус аҙна) орлоҡтарҙы сәсеү өсөн оптималь ваҡыт булып тора. Үрсетмәләрҙе ултыртыуҙың оптималь йәше: томат өсөн 40-50 көн, борос өсөн 55-60 көн.

Башҡортостан өсөн борос ултыртыу өсөн иң ҡулай дата - марттың беренсе-икенсе декадаһы, томат өсөн - марттың икенсе-өсөнсө декадаһы.

## Ни өсөн пикировкалау кәрәк?

Ул башлыса томатҡа кәрәк, сөнки тармаҡлы тамыр системаһының үҫешен стимуллаштыра. Помидорҙы 1-2 ысын япраҡлы сағында пикировкалай башлайҙар. Уның өсөн тәүҙә мул итеп һыу ҡойорға кәрәк, шулай итһәң, уны ерҙән сығарыу еңелерәк буласаҡ. Иң уңайлыһы - тупраҡтан үҫентеләрҙе үткер булмаған бысаҡ йәки махсус кәрәк менән сығарыу. Артабанғы үҫеше өсөн томатҡа 6х6 йәки 8х8 сантиметр ҙурлыҡтағы һауыт етә.

"Пикировка алдынан үрсетмәне даими урынға ултырғансы үҫәсәк субстрат әҙерләргә кәрәк. Был осраҡта помидор һәм борос өсөн махсус тупраҡ йәки йәшелсә культуралары үҫентеләре өсөн универсаль тупраҡ ҡулланырға мөмкин. Улар өҫтәмә эшкәртеүҙе, эзбиз индереүҙе талап итмәй, кисәксәләрҙең оптималь ҙурлығына эйә һәм үҫентеләрҙе дөрөҫ үҫтереү өсөн бөтә кәрәкле туҡланыу элементтарын үҙ эсенә ала", - тип аңлатты Башҡорт дәүләт аграр университетының ғилми-консультация бакса үҙәге хеҙмәткәре Мария Әхмәтгәрәева.

Оҙон үҫкәндәрен пикировка ваҡытында айырым һауыттарға орлоҡ өләшенә тиклем ҡалдыралар. Тамыр эргәһендә һауа ҡалдырмағыҙ, юғиһә, үҫемлек тамырланмаҫҡа мөмкин. Помидор пикировканы еңел кисерә, ә борос күпкә ҡатмарлыраҡ үткәрә, шуға күрә уны шунда уҡ кассеталарға сәсеү яҡшыраҡ.

Ергә ултыртҡан мәлдә помидор, сорттарына ҡарап, биштән алып туғыҙға тиклем япраҡлы һәм формалашҡан сәскәле, борос һигеҙ-ун япраҡлы һәм тәүге төйөндәре булырға тейеш.

Күсереп ултыртыр алдынан бик үк һыу ҡоймағыҙ, шулай иткәндә, ҡыуаҡ һынмай. Үҫентеләрҙе алыр өсөн һауытты һаҡ ҡына әйләндерегеҙ һәм уның төбөнә бер аҙ һуғығыҙ. Әгәр үрсетмә кассетала үҫһә, аҫҡы тишеге аша өҫкә күтәреп алырға мөмкин", - тип йомғаҡ яһаны Башҡорт дәүләт аграр университетының үҫемлекселәк, үҫемлектәр селекцияһы һәм биотехнологиялар кафедраһы доценты Азат Вәлитов.

**Галина БАХШИЕВА әҙерләне.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

## Утыҙ икенсе хат "Сәнғәтте аңлау"

Портрет рәсем сәнғәте тураһында әйткәндәр пейзаждарға ла ҡағыла. Был да "портрет"тар, тик тәбиғәт портреттары. Бында ла оҡшатып төшөрөү кәрәк, әммә ошо урындың "рухын" аңлап, сағылдыра белеү ҙә мөһим. Әммә рәссам тәбиғәтте ныҡ ҡына "төҙәткеләп" тә сағылдыра ала - нисек итеп күрергә теләй, шулай төшөрөргә лә мөмкин. Шулай ҙа, әгәр рәссам ябай һүрәт төшөрмәй, ә тәбиғәттәге йәки ҡалалағы билдәле бер урынды күрһәтеүҙе маҡсат итеп ҡуя, шундағы үҙенсәлектәрҙе күрһәтә икән, был осраҡта оҡшашлыҡ булмауы ҙур етешһеҙлек.

Әгәр рәссам ябай пейзаж ғына түгел, ә яҙ матурлығын: ҡайындың йәш япраҡтарын, уның ҡайырыһының төҫөн, яҙғы күк йөҙөн сағылдырырға иткән һәм быларҙың барыһын да үҙе теләгән тәртиптә, һоҡланырлыҡ күренеш хасил итеп урынлаштырһа? Бындай тәжрибәгә сабыр мөнәсәбәт күрһәтергә һәм рәссамдең күңеленә ятмаған талаптарҙы ҡуймаҫҡа кәрәк.

Артабан төҫтәрҙе, композицияларҙы һәм һыҙыҡтарҙы ғына ҡатнаштырып, үҙенең ниндәйҙер идеяһын сағылдырырға тырышҡан, бөтөнләй бер нәмәгә лә оҡшарға ынтылмаған рәссамды күҙ алдына килтерһәк? Ул үҙенең ниндәйҙер кисерештәрен, донъяға ҡарашын күрһәтергә теләнә? Бындай тәжрибәләргә ҡул һелтәп кенә ҡуйырҙан алда тәрән уйланырға кәрәк. Беҙ бер күреүҙән аңламаған бөтә нәмә лә ситкә ташлап ҡуйылырға тейеш түгел. Бик күп хаталар яһауыбыҙ ихтимал. Сөнки етди, классик музыканы ла музыка менән шөғөлләнмәйенсә аңлап булмай. Етди рәсем сәнғәтен аңлау өсөн дә уҡырға кәрәк.

## Утыҙ өсөнсө хат "Сәнғәттә кешенеке тураһында"

Бынан алдағы хатта мин шулай тигәйнем: деталдәргә иғтибар итегеҙ. Хәҙер үҙенән-үҙе юғары баһаға лайыҡ деталдәр тураһында һөйләгем килә. Был деталдәр, ваҡ-төйәк кешенең ябай хис-тойғоларын, кешелеклелекте дәлилләй. Уларҙа кешеләр булмауы ла ихтимал, улар пейзажда, хайуандар тормошонда, йышыраҡ кешеләр араһындағы мөнәсәбәттә сағылдырылалар.

Боронғо урыҫ иконалары ныҡ "канонлы". Был традицион сәнғәт. Шуға ла уларҙағы ҡанундарҙан ситкә тайпылған барлыҡ нәмә ҡиммәтле булып тойола, рәссамдың төшөргән һүрәтенә кешеләрсә мөнәсәбәтен сағылдыра. "Христостың тыуыуы" тигән бер иконала ваҡиға малдар торған мәмерйәлә һүрәтләнә һәм шунда бәләкәй генә һарыҡ бәрәсе ҙурыраҡ бер һарыҡтың муйынын ялап тора, тип һүрәтләнгән. Бәлки, был ҡыҙы әсәһенә ирҡәләнеп торалыр? Был деталь икона төшөрөү буйынса ҡәтғи талаптарҙа күрһәтелмәгән, шуға ла айырыуса күңелгә үтеп инә. "Рәсми" нәмә араһында бына шундай һөйкөмлө деталь...

Никитниктағы Мәскәү сиркәүенең XVII быуатҡа ҡараған стена һүрәттәрендә трафаретҡа төшөрөлгән һүрәт араһында бер йәш ҡайын ағасы һүрәтләнгән, һәм ул шундай күңелгә ятышлы "урыҫ" ҡайыны, шунда уҡ рәссамдың урыҫ тәбиғәтен ни тиклем яратыуын аңлайһың.

Болгарияла Рильск монастырҙары монахтарының автобиографик әҫәрҙәре һаҡланып ҡалған. Шундай автобиографияларҙың береһе XIX быуатта монастырь өсөн хәйер йыйған монахтың ғүмере тураһында бәйән итә. Уның менән бик аяныс хәлдәр ҙә була: ҡайһы саҡ танауы алдында өйҙәрҙең ишектәре ябыла, төн ҡунып сығырға индермәйҙәр, ашарына булмай (монастырға тип бирелгән аҡсаларҙың тинен дә үҙенә тотонмай) һ.б. Бына ул яҙмаларының бер урынында шулай ти: "О, монастырым, монастырь, унда нисек йылы һәм туҡһың!" Был монахтың хикәйәте китапты таушалтҡан, тексын үҙгәрткән һәм башҡа насарлыҡтар ҡылған кешегә ҡәһәре менән тамамлана. Әммә аҙаҡ ул шулай тип дауам итә: "Мин быны яҙғанмын икән, минең турала яман йәки холоҡһоҙ тип, насар уйлап ҡуймағыҙ!" Күңелгә үтеп инерлек бит? Шуға иғтибар итегеҙ, был ҡәһәрҙәр тәртипһеҙ укыусыға йәки иғтибарһыҙ күсереп яҙыусыға төбәлгән һәм бик күп китаптарҙың аҙағында шулай тип теркәлгәндәр.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**



## 24 МАРТА
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.25, 0.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
11.55 Премьера. "Время героев". [16+]
13.00, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Триггер". Новые серии". [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Зацепка". [12+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Однажды в Залесье". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00 Т/с "Птица счастья". [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Специальный репортаж гибдд. [12+]**
**12.15 Квадратные метры. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.45 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Башҡорттар. [12+]**
**16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45, 20.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**18.00 Защитники Отечества. [12+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.30 Мы сделали всё из того, что могли…. [12+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00, 4.30 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Золотой фонд башкирского ТВ. [12+]**
**0.00 Т/с "Птица счастья". [16+]**
**2.15 Спектакль "Нәркәс". [12+]**
**5.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**

## 25 МАРТА
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Триггер". Новые серии". [16+]
0.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Зацепка". [12+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Однажды в Залесье". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.00 Т/с "Домочадцы". [12+]**
**11.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00 Тайм-аут. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 1.45 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 0.45 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Городок АЮЯ. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00, 22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**19.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**20.30 Д/с "Города-герои". [16+]**
**23.00 Бишбармаҡ. [12+]**
**2.15 Спектакль "Осень". [12+]**
**4.45 Письма солдатам. [12+]**

## 26 МАРТА
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Триггер". Новые серии". [16+]
0.10 Премьера. "Шоу Вована и Лексуса". [16+]
1.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Зацепка". [12+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Однажды в Залесье". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.15 Т/с "Домочадцы". [12+]**
**11.00 Дорога к храму. [6+]**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00 Дознание. [16+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Физ-ра. [6+]**
**15.30 Зерно. [6+]**
**16.00 Автограф. [12+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45, 0.00 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**18.00 Мать нации. [12+]**
**19.00, 4.00 Телецентр. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Защитники Отечества. [12+]**
**21.00 Спроси у Дубовского.**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Байыҡ. [12+]**
**2.30 Спектакль "Белые ночи Акмуллы". [12+]**
**5.00 Тайм-аут. [12+]**

## 27 МАРТА
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.00, 19.00, 22.45 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00, 17.00 Новости (с субтитрами).
15.30 "АнтиФейк". [16+]
17.15 "Давай поженимся!" [16+]
18.05 "Мужское / Женское". [16+]
19.50 "Пусть говорят". [16+]
21.00 "Время".
21.45 Т/с Премьера. "Триггер". Новые серии". [16+]
0.10, 3.05 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00, 3.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30, 2.10, 3.30 Т/с "Зацепка". [12+]
17.00 "Малахов". [16+]
21.30 Т/с "Однажды в Залесье". [16+]
23.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
4.29 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.15 Т/с "Домочадцы". [12+]**
**11.00 Моя планета - Башкортостан. [12+]**
**11.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 16.45 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на рус. яз.). [12+]**
**12.15, 0.00 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.00 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.00 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Сулпылар. [6+]**
**15.45 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Патриот РФ. [12+]**
**16.15 Дознание. [16+]**
**17.00 Простые истории: жить, работать, любить. [12+]**
**17.45 Криминальный спектр. [16+]**
**18.00 Йома. [6+]**
**19.00, 4.00 Телецентр. [12+]**
**19.45 Мама. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 "Башҡорт йыры" представляет… [12+]**
**21.00 Мать нации. [12+]**
**22.00, 5.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**2.30 Спектакль "Посетитель". [12+]**

## 28 МАРТА
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00 Телеканал "Доброе утро".
9.00 Новости.
9.05 "Модный приговор". [0+]
9.55 "Жить здорово!" [16+]
10.45, 11.20, 14.15, 16.55 Информационный канал. [16+]
11.00, 14.00 Новости (с субтитрами).
14.40 "АнтиФейк". [16+]
15.10 "Давай поженимся!" [16+]
16.00 "Мужское / Женское". [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 "Поле чудес". [16+]
21.00 "Время".
21.45 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.55 Премьера. "30 лет вместе". "Больше, чем спорт". [12+]
1.30 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 "Утро России".
9.00, 11.00, 14.00, 16.30, 20.00 Вести.
9.30 Доброе утро, республика! [12+]
9.55 О самом главном. [12+]
11.30, 21.10 Местное время. Вести-Башкортостан.
12.00, 18.00 "60 минут". [12+]
14.30 Т/с "Зацепка". [12+]
17.00 Прямой эфир. [16+]
21.30 "Один в один". [12+]
0.50 Х/ф "Абриколь". [12+]
4.38 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**10.00, 0.30 Т/с "Домочадцы". [12+]**
**11.00 Йома. [6+]**
**11.30, 16.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**11.45, 16.45, 21.15 Интервью. [12+]**
**12.00, 17.30 Новости СВО (на баш. яз.). [12+]**
**12.15 Криминальный спектр. [12+]**
**12.30, 5.30 Территория счастья. [12+]**
**13.30, 18.30, 22.30, 2.15 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**14.00, 1.15 Бәхет иле. [12+]**
**15.00 Гора новостей. [6+]**
**15.15 Тирмәкәй. [6+]**
**15.30 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**16.00 Аль-Фатиха. [6+]**
**17.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**17.45 Специальный репортаж гибдд. [12+]**
**18.00 Башҡорттар. [6+]**
**19.00 Честно говоря. [12+]**
**19.45 История одного села. [12+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Покупаем с Оксаной Масловой. [12+]**
**20.30 Мегасело. [12+]**
**22.00 СВОих не бросаем. [12+]**
**22.15 Письма солдатам. [12+]**
**23.00 Ете егет. [12+]**
**0.00 Ҡурай-шоу. [12+]**
**3.00 Спектакль "Аҫылйәр". [12+]**

## 29 МАРТА
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 "Умницы и умники". [12+]
9.45 "Слово пастыря". [0+]
10.00 Новости.
10.05 Д/с Премьера. "MONEYпуляторы". [16+]
10.45 "Играем свадьбу!" [12+]
11.45, 12.30 Поехали! [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.20 Премьера. "Они выбрали - Родину". [16+]
14.00 Д/ф Премьера. "Меня вела какая-то сила". К 100-летию со дня рождения Иннокентия Смоктуновского". [12+]
15.10 Х/ф "Берегись автомобиля". [12+]
16.55 "Кто хочет стать миллионером?" [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.25 Премьера. Праздничный концерт ко Дню войск национальной гвардии. [12+]
21.00 "Время".
21.35 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига. [16+]
23.55 Х/ф Премьера. "Брат и сестра". [18+]
1.50 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]

### РОССИЯ 1

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Суббота.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 "Формула еды". [12+]
9.25 "Пятеро на одного".
10.10 Сто к одному.
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 "Наши. Военкоры". [12+]
12.00 "Доктор Мясников". [12+]
13.00 Большие перемены.
14.35 Большой юбилейный вечер "Вокруг Альтова за 80 лет". [16+]
17.50 "Привет, Андрей!" [12+]
20.50 Местное время. Вести-Башкортостан.
21.00 Х/ф "Письмо в будущее". [16+]
0.35 Х/ф "Штамп в паспорте". [12+]
4.33 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30, 18.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Мегасело. [12+]**
**8.30 Аль-Фатиха. [6+]**
**9.00 Весело живем! [12+]**
**9.15 Ҡурай даны. [12+]**
**9.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.). [12+]**
**9.45 СВОих не бросаем. [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Книга сказок. [6+]**
**10.45 Әкиәтсе. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Преград. Net. [6+]**
**11.30 Ат уйнатып. [12+]**
**12.00 Елкән. [6+]**
**12.30 Ете егет. [12+]**
**13.30 Башҡорттар. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Все песни о прекрасном… [12+]**
**19.00 Мама. [12+]**
**19.15 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**20.00 Сәңгелдәк. [6+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Байыҡ. [12+]**
**22.00, 6.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.30, 2.45 Новости недели (баш. яз.). [12+]**
**23.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.45 "Башҡорт йыры" представляет… [12+]**
**0.30 Концерт Лилии Биктимировой. [12+]**
**3.30 Спектакль "Вот так случилось…." [12+]**
**5.45 Письма солдатам. [12+]**

## 30 МАРТА
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
6.55 "Часовой". [12+]
7.25 "Здоровье". [16+]
8.35 "Жизнь других". [12+]
9.30 "Мечталлион". Национальная Лотерея. [12+]
10.10 "Повара на колесах". [12+]
11.00 "Ураза-Байрам". Трансляция из Уфимской соборной мечети.
11.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Видели видео?" [0+]
13.30 Х/ф "Судьба резидента". [12+]
16.30 Премьера. "30 лет вместе". "История специальных проектов". [12+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
19.00 "Три аккорда". Новый сезон. [16+]
21.00 "Время".
23.00 Спецпроект. "30 лет вместе". "Что? Где? Когда?". [12+]
0.10 ПОДКАСТ.ЛАБ. [16+]
4.57 Перерыв в вещании.

### РОССИЯ 1

5.30, 1.35 Х/ф "Мама, я женюсь". [12+]
7.20 "В кругу друзей".
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 "По секрету всему свету".
9.00 Сто к одному.
10.00 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
11.00 Праздник Ураза-Байрам. Прямая трансляция из Московской Соборной мечети.
12.00, 14.00, 17.00 Вести.
12.30 "Наши. Военкоры". [12+]
13.00 "Доктор Мясников". [12+]
14.30 Местное время. Вести-Башкортостан.
15.00 "Парад юмора". [16+]
17.50 "Песни от всей души". [12+]
20.00 Вести недели.
22.30 Москва. Кремль. Путин.
23.00 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
3.16 Перерыв в вещании.

### БСТ

**7.00 Доброе утро! [12+]**
**7.30 Новости (на баш. яз.). [12+]**
**7.45 Тормош. [12+]**
**8.15, 18.45 Легенды Урала. [12+]**
**8.30 Күстәнәс. [12+]**
**9.00 "Ураҙа Байрамы". Прямая трансляция из Уфимской Соборной мечети "Ляля-Тюльпан". [12+]**
**10.00 М/ф "Мультфильмы". [6+]**
**10.30 Тирмәкәй. [6+]**
**10.45 Городок АЮЯ. [6+]**
**11.00 Гора новостей. [6+]**
**11.15 Сулпылар. [6+]**
**11.30 Зерно. [6+]**
**12.00 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**12.30 Новости недели (баш. яз.). [12+]**
**13.15, 4.45 Башкирские каникулы. [12+]**
**14.00 Дарю песню. [12+]**
**15.30 Дорога к храму. [6+]**
**16.00 Честно говоря. [12+]**
**16.45 "100 имён Башкортостана".**
**17.15 "Ураҙа Байрамы". Повтор трансляции из Уфимской Соборной мечети "Ляля-Тюльпан". [12+]**
**18.15 "Праздник веры и добра!" Концерт. [12+]**
**19.15 Әлләсе… [12+]**
**20.00 Патриот РФ. [12+]**
**20.15 Квадратные метры. [12+]**
**20.30 Автограф. [12+]**
**21.00 Дознание. [16+]**
**21.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**21.30, 6.00 Новости недели (на рус. яз.). [12+]**
**22.15, 5.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Концерт "Вечные песни Рима Хасанова". [12+]**
**0.30 Спектакль "Дачники". [12+]**
**2.45 Колесо времени. [12+]**
**3.45 Простые истории. [12+]**
**4.15 Моя планета - Башкортостан. [12+]**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1446 һижри йыл.*

| Март (Рамаҙан - Шәүүәл) | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|---|
| 24 (24) дүшәмбе | 5:08 | 5:21 | 7:10 | 13:30 | 17:33 | 19:38 | 20:25 |
| 25 (25) шишәмбе | 5:06 | 5:18 | 7:07 | 13:30 | 17:34 | 19:39 | 20:27 |
| 26 (26) шаршамбы | 5:03 | 5:15 | 7:05 | 13:30 | 17:36 | 19:41 | 20:30 |
| 27 (27) кесе йома | 5:01 | 5:12 | 7:02 | 13:30 | 17:37 | 19:43 | 20:33 |
| 28 (28) йома | 4:58 | 5:09 | 7:00 | 13:30 | 17:39 | 19:45 | 21:35 |
| 29 (29) шәмбе | 4:56 | 5:06 | 6:57 | 13:30 | 17:40 | 19:47 | 21:38 |
| 30 (1) йәкшәмбе | - | 5:02 | 6:53 | 13:30 | 17:42 | 19:49 | 21:40 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✔ *Бутан короллеге халҡы донъяла иң бәхетле кешеләр тип иҫәпләнә, улар - Тулайым Милли Бәхет коэффициенты буйынса алдынғылар.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# 20 МАРТ - ХАЛЫҠ-АРА БӘХЕТ КӨНӨ

**2012 йылда Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы ҡарары менән 20 март Халыҡ-ара бәхет көнө тип иғлан ителде. Был бәхет тойғоһоноң һәр кеше тормошонда ни тиклем мөһим урын биләп тороуын һәм бәхеткә ынтылыу планетабыҙҙағы барлыҡ кешеләр өсөн берҙәй булыуын таныу өсөн эшләнә.**

Был байрам бәхет кешелектең төп маҡсаттарының береһе булып тороуын күрһәтергә тейеш. Шуға бөтә илдәрҙе лә халыҡтың дөйөм именлеген ҡайғыртыу юҫығында әүҙемерәк эшләргә саҡыралар.

Шуныһы ҡыҙыҡ - Халыҡ-ара бәхет көнөн билдәләү идеяһын Гималайҙағы бәләкәй ил - Бутан тәҡдим иткән. Бутан короллеге халҡы донъяла иң бәхетле кешеләр тип иҫәпләнә, улар - Тулайым Милли Бәхет коэффициенты буйынса алдынғылар. Әйткәндәй, был "бәхет үлсәме" илдең 4-се короле тарафынан индерелә һәм илдең дәүләт философияһына әүерелә.

Шулай уҡ халыҡтың һәм тирә-яҡ мөхиттең етеш тормошон билдәләү маҡсатында 2006 йылда Халыҡ-ара бәхет индексы ҡабул ителә, ә 2012 йылдан алып 156 ил буйынса Бөтә донъя бәхет тураһында доклад уҡыла.

Һуңғы йылдарҙа иң бәхетле илдәр исемлегендә тәүге унау рәтенә Дания, Швейцария, Исландия, Норвегия, Нидерландтар, Швеция, Яңы Зеландия, Австрия һәм Люксембург инә. Рәсәй исемлектең уртаһындараҡ тора.

Бына шулай. Ә беҙ был башваткыста "бәхет" һүҙенә һәм төшөнсәһенә бәйле башҡорт халыҡ мәҡәлдәрен табырға тәҡдим итәбеҙ. Был һеҙгә борондан халҡыбыҙ бәхетте нисек аңлауын төшөнөргә ярҙам итер, моғайын.






Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**8-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Әкиәт. Алдар. Америка. Ҡарт. Кастро. Бабсаҡ. Ватт. Ер. Ҡасаба. Анонс. Аванс. Әлфинә. Брак. Бах. Арка. Бал. Аҙым. Сайт. Алма. Мари. Ыҙма. Йыр.

**Вертикаль буйынса:** Булатова. Ҡобағошова. Сабаҡ. Атаҡай. Аласыҡ. Имаметдинов. Асамай. Ирәбе. Бала. Щербаков. Әхмәтшин. Сафина. Тотҡа. Ольга. Әҙәм.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**21 март "Хыялый"** (С. Әбүзәр, А.Йәнбәков), лирик комедия. Рәзифә Динмөхәмәтованың юбилей бенефисы. 12+

**22 март "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия. 12+

**23 март "Йәш йөрәктәр"** (Ф. Бурнаш, Ф. Ғарипов), музыкаль комедия. 12+

**26 март "Һөйөү көсө"**, (Т. Дәүләтбирҙина), мелодрама. Салауат театры спектакле. 12+

### М.Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**21 март "У ковчега в восемь"** (У. Хуб, М. Кулбаев), балалар спектакле. 11:00. 6+

**22 март "Ханума"** (А. Цагарели, Р. Хәкимов), музыкаль комедия. 12+

**23 март "Всегда один"** (А. Поярков, Э. Шрайнер), трагифарс. 16+

**25 март "Ҡоҙалар-ҡоҙасалар"** (Х. Латыпова, С. Латыпов, И. Валеев), музыкаль комедия. Салауат театры спектакле. 12+

**26 март "Беҙҙең өйҙөң йәме"** (М. Кәрим, М. Кулбаев), иҫтәлектәр. 12+

**27 март "Ирония. Маска. Шутка"**, Бөтә донъя театр көнөнә ҡарата сара. 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**21 март "Снеговик и солнышко"** (А. Малахов). 18:00. 0+

**22 март "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков). 12:00. 0+

**23 март "Красная шапочка"** (Д. Гараева).12:00 һәм 15:00. 0+

**27 март "Урал Батыр эҙҙәре буйлап"**, интерактив квест. 16:00. 6+

### Х.Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**21 март "Мин - АЛМАС"**, Алмас Сирусиндың беренсе шәхсән концерты. 12+

**22 март "Ты помнишь..."**, 30 - 60 йылдар музыкала һәм шиғриәттә. 16+

**23 март ""Музыкальная алхимия Баха"**, Ҡаҙағстандың атҡаҙанған артисы Ғәбит Несипбаев, орган. 12+

**25 март "Стих в большом городе"**, музыкаль-поэтик спектакль. 16+

**26 март "АНИМЕ VS САУНДТРЕКИ"** музыкаль программаһы. 16+

**27 март "Һүҙем бар"** әҙәби-музыкаль кисәһе. Республиканың танылған сәхнә йондоҙҙары сығыш яһай. 16+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**27 март "Ҡыҙҙар килде ауылға"** (Н. Ғәйетбай), музыкаль комедия. 12+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**27 март "Дружная семья - опора России"**, Удмурт Республикаһының "Танок" дәүләт йыр һәм бейеү ансамбле концерты. 6+

### А. Мөбәрәков исемендәгет Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**24 март "Беҙҙең байлыҡ"** (А. Сәсәнбаев), комедия. 12+

**26 март "Их, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Буләков), лирик комедия. 12+

**27 март "Доктор"** (М. Икрамова), лирик комедия. 12+

### Сибай концерт-театр берекмәһе

**21 март** Фәйзи Ғәскәров исемендәге дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле концерты. 6+

**22 март "Эх, ҡайтһасы егет сағым..."**, концерт. 12+

**26 март "Дәртле-шаян ҡыҙҙар"** Азалия һәм Гүзәлиә Вәлиевалырҙың концерты. 12+

**27 март "Араларҙа - йылдар..."** Сибай филармонияһының тәүге ҡарлуғастары концерты. 12+

### БР Милли музейы

**21 март "Музей мафияһы"**, психологик уйын. 19:00. 14+

**22 март "Ғаилә шәмбеһе"** программаһы сиктәрендә "Шаян шарлауыҡтар". 15:00. 5+

**25 март "Йылдар һәм төҫтәр аша сәйәхәт"** - Башҡортостандың атҡаҙанған рәссамы Фәйзрахман Исмәғиловҡа 70 йәш тулыу айҡанлы уның эштәре күргәҙмәһен асыу. 6+

**25 март "Музей шаршамбыһы"** акцияһы сиктәрендә "Өләсәй һандығы" мәҙәни-ағартыу сараһы. 12:00. 6+

✓ **2025 йылда төбәктең мәҙәни сәйәсәте "Ғаилә" милли проектын тормошҡа ашырыуға йүнәлтеләсәк. Уның сиктәрендә республика халҡының ижади һәләттәрен күрһәтеүгә шарттар булдырыу күҙаллана.**



АФАРИН!

# МӘҘӘНИӘТ...

## йәмғиәтебеҙҙе берләштереүсе ул

**Өфөлә V халыҡ-ара "АРТ-Ҡоролтай" мәҙәни форумы үтте. Сара Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ярҙамында һәм ҡатнашлығында 2021 йылдан алып ойошторола. Уға мәҙәниәт эшмәкәрҙәре, йәмғиәт ойошмалары вәкилдәре, дәүләт һәм муниципаль мәҙәниәт учреждениелары етәкселәре, абруйлы ҡунаҡтар саҡырыла. Быйыл форумда Ҙур Мәскәү дәүләт циркының генераль директоры, Рәсәйҙең халыҡ артисы Эдгард Запашный, "Сириус" урта махсус музыка мәктәбе директоры Вадим Руденко (Сочи), "Сталинград һуғышы" музей-курсаулығы директоры Алексей Дементьев (Волгоград) һәм башҡа ҡунаҡтар ҙа ҡатнашты.**




Мәҙәни форумға Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы коллегияһы ултырышы старт бирҙе. Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафикова уҙған йылға йомғаҡ яһаны һәм 2025 йылға бурыстар билдәләне. Төп иғтибар 2019 йылдан 2024 йылға тиклем тормошҡа ашырылған "Мәҙәниәт" милли проекты йомғаҡтарына йүнәлтелде.

Форумдың "Бөйөк ил мираҫы - Рәсәйҙең мәҙәни суверенитеты нигеҙе" тип аталған пленар ултырышында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты һәм сығыш яһаны: "Башҡортостан дүртенсе йыл рәттән мәғлүмәт әүҙемлеге рейтингыһында лидер булып тора. Мәҙәни сараларға йөрөүселәр һаны буйынса беҙ Мәскәүҙән ҡала икенсе урынға сыҡтыҡ. Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға һәм уларҙың ғаилә ағзаларына мәҙәни сараларға йөрөү өсөн ташламалар индерҙек. Йыл ярым эсендә был ташлама менән 90 мең самаһы кеше файҙаланған, улар 12 мендән ашыу мәҙәни сарала булған", - тине Радий Хәбиров һәм республикабыҙҙың үҙенсәлекле мәҙәниәтен һаҡлау маҡсатында Башҡортостанда күләмле мәҙәни проекттар тормошҡа ашырылыуын билдәләне. Атап әйткәндә, "Китап-байрам" Халыҡ-ара китап йәрминкәһе, "Геройҙар ваҡыты" патриотик йыр конкурсы, "Әйҙә, уйнарға!" уйынсыҡтар фестивале, "Көҙ романтикаһы" классик музыка фестивале йылдан-йыл киң популярлыҡ яулай. Билдәләнеүенсә, төбәктә "Ауыл мәҙәниәте хеҙмәткәре" республика программаһы сиктәрендә 2021 йылдан алып 120 кеше ярҙам алған. Башҡорт теле, Милли кейем көндәренә Ҡурай һәм Милли бейеү көндәре өҫтәлде. Республика Башлығының ҡарары менән Башҡортостан дәүләт ҡурайсылар ансамбле ойошторолдо. Бөгөн ул ҙур сәхнәләрҙә әүҙем сығыш яһай. Әйткәндәй, "АРТ-Ҡоролтай" мәҙәни форумында Радий Хәбиров ансамбль етәксеһе Азат Айытҡоловҡа гастролдәргә йөрөү өсөн яңы автобус асҡысы тапшырҙы.

Пленар ултырышҡа йомғаҡ яһап, Башҡортостан Башлығы мәҙәниәттең бөгөнгө тормошта тотҡан ролен юғары баһаланы. "Мәҙәниәт, һис шикһеҙ, ҙур әһәмиәткә эйә. Ул кешелә йәмғиәтен, төрлө дин, милләт кешеләрен берләштерә. Һәм, әлбиттә, беҙ уға дәүләт сәйәсәтенең мөһим йүнәлештәренең береһе булараҡ ҡарайбыҙ", - тине ул. Шулай уҡ Радий Хәбиров йәш таланттарҙы үҫтереүҙә Сочи ҡалаһындағы "Сириус" махсус музыка мәктәбе директоры Вадим Руденко менән төҙөлгән хеҙмәттәшлек тураһында килешеүҙең әһәмиәтен дә баһалап үтте.

Әйткәндәй, ағымдағы йылдың 1 ғинуарынан Халыҡ-ара "Арт-Ҡоролтай" мәҙәни форумының эшен "Ғаилә" милли проектының "Ғаилә ҡиммәттәре һәм мәҙәниәт инфраструктураһы ("Ғаилә өсөн мәҙәниәт")" төбәк проекты дауам итә. Аныҡлап әйткәндә, 2025 йылда төбәктең мәҙәни сәйәсәте "Ғаилә" милли проектын тормошҡа ашырыуға йүнәлтеләсәк. Уның сиктәрендә мәҙәни инфраструктураны үҫтереү һәм республика халҡының ижади һәләттәрен күрһәтеүгә шарттар булдырыу күҙаллана. Шулай уҡ китапханаларҙы яңыртыу ҙа мәҙәниәт өлкәһендә башҡарыласаҡ төп эштәрҙең береһе буласаҡ. Республикала өс яңы моделле китапхана асыу планлаштырыла. Улар Ишембай районы Урман-Бишҡаҙаҡ, Ҡыйғы районы Үрге Ҡыйғы һәм Тәтешле районының Үрге Тәтешле ауылдарында уҙ ишектәрен асасаҡ. Мәҙәниәт учреждениеларын реконструкциялау һәм техник яҡтан йыһазландырыу ҙа алдынғы бурыстарҙан, тип билдәләнде. Быйыл Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры, Республика Хәрби дан музейы яңы ҡоламалдар менән йыһазландырыласаҡ, Салауат ҡалаһының балалар сәнғәт мәктәбендә, Миәкә үҙәк китапханаһында, Нефтекама ҡалаһының Үҙәк китапханаһында капиталь ремонт үткәреләсәк. Шулай уҡ Ишембай районы Кинйәбулат ауылы мәҙәниәт йортонда, Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театрында һәм Салауат районындағы Салауат Юлаев музейында реконструкция ҡаралған. Эштәрҙе 2026 - 2027 йылдарҙа тамамлау планлаштырыла.

ТЕЛҺӨЙӘР

# ҮРГЕН ШЫРШЫЛАР УЛТЫРТЫЛДЫ

**Ейәнсура районында Башҡорт Үргене тип аталған ауыл бар. Үрген нимәне белдерә, тигән һорау ҡуя берәү интернет селтәрендә. Был ауыл кешеләрен борсоп тормай, ҡул аҫтындағы һүҙлеккә күҙ һалдыҡ.**

**Үрген.** Йәш үҫенте, йәш ботаҡ тураһында һүҙ барһа, "үрген" һүҙен ҡулланыу урынлы. *Мәҫәлән: Гөл үргене. Йүкәнең яңы үргене күренә.* "Үрген ағастар" иһә "йәш ағастар" мәғәнәһендә эйә. *Миҫал өсөн: Өфөлә үрген шыршылар ултыртылды.*

**Үргенләү. 1.** "Үргенләү" тигәндә, үҫемлектәрҙең ныҡ үҫеп китеүе аңлашыла. *Мәҫәлән: Сирендәр үргенләп үҫкән.* **2.** "Үргенләү" һүҙенең тағы ла "ут ялмап алыу" тигән мәғәнәһе бар. *Миҫал: Мейестәге утынға ут тиҙ үргенләне.*

**Үңгәләү.** "Үңгәләү", "иҫ үңгәләү" - тимәк, аңды юғалтыу. *Мәҫәлән: Яман еҫтән үңгәләп ҡуймағыҙ.*

**Үң. 1.** Беҙ уны эмаль тип йөрөтәбеҙ. Ә туған телебеҙҙә борон-борондан "үң" тигән үҙ һүҙебеҙ бар. *Миҫалға: Тештең үңе. Аш-һыуҙы үң йүгертелгән һауытта әҙерләү.* **2.** "Үң" тип шулай уҡ аяҡ табанындағы, үксәләге ҡатҡан тирене атайҙар. *Мәҫәлән: Яланғас аяҡ йөрөргә яраткас, табан үңгә әйләнгән. Үңде йомшартыу өсөн төрлө майҙар ҡулланыла.*

**Үңләү.** "Үңләү" тигәндә, берәй әйберҙе үң, йәки, эмаль менән ҡаплауҙы аңлайбыҙ. *Миҫалға: Көршәкте үңләү. Үңләнгән ҡумта.*

**Шулай итеп, Теш биҙәге - ялтыр үң, тел биҙәге - йомарт һүҙ.**

**НУРБИКӘ әҙерләне.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# АУЫР ЭШТЕ...

## күмәк ҡул еңгән

Аяғың ауыр булһа, атлаған һайын эҙ ҡалыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Үҙ иленең бөйөк хирургы булған докторҙы Хирургтарҙың милли йәмғиәтенә президент итеп ҡуйғандар. Был көндө уның хөрмәтенә оло байрам ойошторолған. Ләкин докторҙың йөҙөндә шатлыҡтың әҫәре лә юҡлығын күреп, дуҫы һорай ҡуйған:**

**- Нинә һин бик бойоҡ күренәһең? Һин бит бөйөк хирург һәм һинә берәү ҙә тиңләшә алмай, шулай булғас, һин бәхетле булырға тейешһең?**

**- Мин бер ваҡытта ла хирург булырға теләмәнем, - тип яуаплаған доктор. - Мин үҙем теләмәгән өлкәлә уңыш ҡаҙандым. Әгәр ҙә хирург булып уңыш ҡаҙана алмаһам, минең икенсе өлкәгә хеҙмәт итергә тигән өмөтөм булыр ине, хәҙер иһә мин был шөғөлгә ғүмерлеккә бәйләндем...**

**- Һин шаяртаһыңдыр ул? - ти дуҫы аптырап. -Һинең ғаиләң бәхетле, ҡатының, балаларың бәхетле, быңдағы һәр кем бәхетле һәм һинә оло хөрмәтен белдерә...**

**- Ләкин мин үҙемдә үҙем хөрмәт итмәйем, был - иң мөһиме, - тип һүҙен дауам итә хирург. - Мин бейеүсе булырға теләгәйнем, атай-әсәйем минең теләгемде хупламаны һәм мин улар ихтыярына буйһондом. Мин бигерәк ихтыярһыҙ инем шул. Һәм мин бөйөк хирург булыуым менән бәхетһеҙмен. Мин бәхетһеҙ, сөнки мин донъялағы иң насар бейеүсемен. Мин бейей белмәйем, бейергә өйрәнә лә алмайым - бына шунда инде минең бәләм...**

**...Эйе, үҙ-үҙең менән ҡәнәғәт булыу йәмғиәттән түгел, ә тәбиғәттән килә шул. Беҙ үҙ яҙмышыбыҙҙы үҙебеҙ менән бергә йөрөтәбеҙ, ләкин был аңһыҙ әйбер. Яҙмышҡа эйәреп ҡаҙанған еңеүҙәрегеҙ тураһында бер кем дә белмәҫкә мөмкин, ләкин һеҙ уны аңығыҙ менән тояһығыҙ. Һеҙ Нобель премияһы алмаҫҡа ла мөмкинһегеҙ, сөнки ул бер ваҡытта ла үҙ-үҙе менән ҡәнәғәт булған кешеләргә бирелмәй. Үҙ-үҙенән ҡәнәғәт булған берәү ҙә, Будда ла, Ғайса бәйғәмбәр ҙә, был премияны алмаған. Һәм бындай хәл киләсәктә лә булмаясаҡ, сөнки Нобель премияһы йәмғиәткә ихлас буйһонған, үҙенең түгел, ә йәмғиәт маҡсаттарына өлгәшкән кешеләргә бирелә. Нобель премияһы лауреаттарына ҡарағыҙ әле: һеҙ уларҙан да бойоғораҡ йөҙлө башҡа кешеләрҙе тапмаҫһығыҙ. Уларҙың күбеһе үҙ-үҙенән ҡәнәғәтһеҙлек кисереп йәшәгән, ҡайһы берҙәре үҙ-үҙенә ҡул һалған кешеләр. Был осраҡлы түгел, бында тәрән мәғәнә бар. Премиялар ҡәнәғәтләндерә алмай. Шуның өсөн, үҙегеҙҙең аңһыҙ тойолған тәбиғәтегеҙгә эйәрегеҙ, уны аңлы рәүештә низер ҡаҙанырға, шатланырға йә ҡайғырырға мәжбүр итмәгеҙ..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррирләт:** Рәсүл БАЙГИЛДИН, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

**Телефондар:**
| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |
| Матбуғат таратыу | 252-39-99 |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -** 20 март 17 сәғәт 00 мин. Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 2857
Заказ - 542